ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

11-17 декабрь (аҡъюлай) 2021

№50 (988)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Башҡортса һөйләшмәгәс...**
башҡорт буламы ни кеше!



3

**Ауыҙ тултырып...**
һөйләшеүгә ни етә!



6

**Туған телем менән...**
үҙ халҡыма хеҙмәт итәсәкмен!



8-9

**Уның ябайлығына ла...**
бөйөклөк хас ине



12

**ТВ-программа** 14


***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 6 декабрҙән 16 декабргә гәзит-журналдарға ташламалы хаҡ менән яҙылыу ун көнлөгө бара. Ошо мәлдә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2022 йылдың беренсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 642 һум 38 тингә яҙыла алаһығыҙ. Был мәғлүмәтте йәнәшәгеҙҙәге дуҫ-иштәрегеҙгә, туғандарығыҙға ла еткерһәгеҙ ине. Әйҙәгеҙ, ошо ун көнлөктә "Киске Өфө"гә дәррәү яҙылып, гәзитебеҙҙең киләһе йыл буласаҡ 20 йыллыҡ юбилейына бер бүләк эшләйек!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? Балаларығыҙ башҡортса һөйләшәме, уларҙы милли рухта тәрбиәләү һәм туған мөхиткә йәлеп итеү өсөнниҙәр эшләйһегеҙ?

***Рәмил МАНСУРОВ, Стәрлетамаҡ ҡалаһы "Ашҡаҙар" гәзитенең баш мөхәррире:*** Телде һаҡлау-яҡлау йәһәтенән, һис шикһеҙ, уның киләсәген ҡайғыртыу зарур. Был тәңгәлдә, әлбиттә, йәш быуынды милли мөхит шарттарында тәрбиәләү ҙур әһәмиәткә эйә. Шул уҡ ваҡытта туған телендә яҡшы үҙләштереү өҫтөнлөктәрен аңлатыу ҙа мотлаҡ балаға. Мәҫәлән, башҡорт телен белеү башҡа төрки телдәр өйрәнеүҙе еңелләштерә. Уның шулай уҡ инглиз, француз телдәре менән оноҡшашлығы ла хатта ошо телдәге һүҙҙәрҙең дөрөҫ, акцентһыҙ әйтелешенә булышлыҡ итә. Был дәлилдәр, бер яҡтан, минең өсөн ниндәйҙер аҡланыу, үҙ фекеремә яҡлау эҙләгән һымаҡ та тойолоп китә. Ә бит бер ниндәй өгөт һәм нәсихәт, әсә телендә белеүҙән ниндәйҙер файҙа эҙләү кәрәкмәй, сөнки башҡорт булып тыуғанһың икән, милләтебеҙ алдында бурыслыһың: балаларыңды башҡорт итеп тәрбиәлә! Юғиһә, кем һин?

Тәрбиә эше еңел булмаған һымаҡ, баланы милли рухта башҡорт итеп тәрбиәләүҙең, бигерәк тә ҡала шарттарында, үҙ ауырлыҡтары бар, әммә улар һис тә йырып сыҡҡыһыҙ дәрәжәлә түгел, ә тормош көтөүҙең үҙе кеүек боронғо һәм ябай булыс. Беҙ ҡатыным Гүзәл Абдрахман ҡыҙы менән өс бала үҫтерәбеҙ: 9 йәшлек улыбыҙ Айбулат менән 7 йәшлек Раушания ҡыҙыбыҙ Стәрлетамаҡ ҡалаһының Ж.Кейекбаев исемендәге 3-сө гимназияһының 3-сө һәм 1-се кластарында уҡыйҙар, ә Айтуған улыбыҙ ни бары 6 айлыҡ ҡына. Милли тәрбиә әсә ҡарынында уҡ башлана, тиҙәр. Йөклө сағында ҡатыным һәр саҡ башҡорт йыркөйҙәрен тыңларға һәм көйләп йөрөргә ғәҙәтләнде, йөрәк аҫтындағы сабыйыбыҙ менән гел башҡортса һөйләште. Балаларҙың өсөһөнә лә йырлап торған матур, мәғәнәле башҡорт исемдәре ҡуштыҡ. Уларҙы йоҡлатҡанда ла халыҡса "һәтестә-һәтестә, минең улым (ҡыҙым) бәпес тә" тип һамаҡлап-көйләп өйрәттек.

Беҙгә "Был Рәмил менән Гүзәл афариндар, балаларын рухлы итеп тәрбиәләйҙәр", тигән һүҙҙәрҙе йыш ишетергә тура килә һәм был беҙҙе ҡанатландыра, **ләкин шуныһы ла бар: төп тәрбиә эше ғаилә бурысы булған хәлдә лә, ул фәҡәт беҙҙең индә генә ятмай бит. Был изге бурысты беҙҙең менән бергә мәғариф, белем биреү ойошмалары ла күтәрешергә, үҙҙәренең өлөшөн индерергә тейеш, тип иҫәпләйем.** Был йәһәттән балаларыбыҙ тәүҙә ҡала шарттарында милли рухты үҫтереүгә күп көс һалыусы 64-се "Толпар" балалар баҡсаһына (элекке һәм хәҙерге етәкселәре З.Ибраҡова, Г.Собханғолова), унан шулай уҡ милли мөхит гөрләп торған гимназияла (директоры А.Шаһисолтанова) уҡып йөрөйҙәр. Бынан тыш, Айбулат репертуары башҡорт бейеүҙәренән торған "Торатау" балалар бейеү ансамблендә (етәкселәре Лиана менән Рәил Лоҡмановтар) шөғөлләнә, пианино түнәрәгендә (етәксеһе Ә.Богачева) "Суҡ муйыл"ды уйнай, ә Раушаниябыҙ боҙҙа шыуа һәм ярыштарҙа Рим Хәсәновтың "Иртәнге томан" көйөнә бейей икән, был да бит балаларҙы туған мәҙәниәткә йәлеп итеүҙең бер төрө.

Балаларҙы башҡортса һөйләшергә өйрәтеүҙең тағы бер мөһим мәктәбе - өләсәйҙәр тәрбиәһе айырым урын алып тора һәм оло хөрмәткә лайыҡ. Ял һәм каникул көндәрендә ҡәйнәм Роза Биктимер ҡыҙы менән әсәйем Зәйтүнә Лотфулла ҡыҙының (хәҙер мәрхүмә инде), урыҫса һөйләшеүҙе аңламағанға һалышып, саф башҡортса аңлашыуҙы талап итеүе, туған телдә туған мондарыбыҙҙы көйләп-йырлап, ейәнейәнсәрҙәре менән рәхәтләнеп аралашыуы - үҙе ҙур һабаҡ. Шуға күрә, баланы башҡорт итеп, башҡортса тәрбиәләү - күп кеше ҡатнашлығында атҡарыла торған комплекслы тәрбиәүи эш ул, тип уйлайым. Был берҙәй үк кимәлдә ғаиләнең дә, балалар баҡсаһы менән мәктәптең дә һәм, әлбиттә, дәүләттең дә бурысы. Шул шарттарҙа ғына милли йолаларыбыҙ һәм мөхитебеҙ ҙә, туған телебеҙ һәм милләтебеҙ ҙә һаҡланыр.

## МӨҒЖИЗӘЛӘР ДОНЪЯҺЫНДА

# САФ ҺАУАНЫ...

## бактериялар бүләк иткән



**Саф һауаны кем яратмай ҙа, кем уны һулап туйған. Ә Ер шарында таҙа һәм саф һауа түгел, ә ҡоҫторорлоҡ еҫтәр генә булһа? Ә бит 3,8 миллиард йылдар элек нәҡ шулай булған да инде.**

Әгәр шул дәүергә, йәғни Ер шарының бынан 3,8 миллиард йыл элекке ваҡытына әйләнеп ҡайтһаҡ, беҙ унда 3 минут та йәшәй алмаҫ инек. Һәм, әйтергә кәрәк, әлеге бер нисә минут кеше ғүмеренең иң насар ваҡыты булыр ине. Сөнки ул ваҡытта Ер шарында саф һауаның эҙе лә булмаған, ә серегән, әсегән еҫ кенә хөкөм һөргән, имеш. Тәүҙә Ер шарының атмосфераһы водород һәм гелийҙан торған. Вулкандар урғылыуы уға углекислый газ (әсе еҫ), көкөртлө водород (серегән йомортҡа еҫе) һәм аммиак (бесәй бәҙрәфе еҫе) еҫтәре өҫтәй. Кислород һәм, тәбиғи, саф һауа бөтөнләй булмай. Атмосферала кислород барлыҡҡа килһен өсөн тағы ла 1,3 миллиард йыл үтергә тейеш була әле.

Ә ул нисек барлыҡҡа килгән һуң? Баҡтиһәң, кислородты беҙгә боронғо бактериялар "бүләк" иткән! Атап әйткәндә, диңгеҙҙә углекислый газ ($CO_2$) һәм кислород ($O_2$) бүлеп сығарыусы бактериялар тарала башлай. Ә Ерҙең атмосфераһында глобаль үҙгәрешкә килтергән "Бөйөк кислород революцияһына" тиклем әле бактерияларға тағы ла 300 миллион йыл дауамында ныҡышмалы "эшләргә" кәрәк була. Шуға күрә, сирләп китеп, бактерияларҙы әрләгән саҡта, нәҡ уларҙың "туғандары" беҙгә кислород, тимәк, йәшәү өсөн шарттар тыуҙырғанын онотмағыҙ.

**Һүрәттә** строматолиттар - боронғо дәүерҙә кислород эшләп сығарыусы бактерияларҙың минераль ҡалдыҡтары.

12+

✓ *Бер яҡтан, әсә теле төркөмөн һайлауҙары бик мәслихәт. Өйөндә урыҫ телмәре яңғырай икән, тимәк, тәрбиәсе генә уларҙың балаһын туған теленә өйрәтә алмаясаҡ, сөнки әсә һөтө менән һеңдерелмәгән сабыйҙарға туған тел моңо...*



*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*



# БИК ЯҠШЫ МАЙҘАНСЫҠ

**2022 йылдың беренсе ярты йыллығына гәзит-журналдарға яҙылыу бара. Редакция хеҙмәткәрҙәре өсөн иң яуаплы осор был. Шулай уҡ ваҡытлы матбуғат уҡыусылары өсөн дә, тип әйткем килә, сөнки тап ошо осорҙа беҙ ниндәй баҫмаларҙы яҙҙырырға хәл итәбеҙ.**

Мин үҙем бер ҡасан да гәзит-журналдан айырылғаным юҡ. Совет осоронда ла, хәҙер ҙә бик күп баҫма яҙҙырып уҡыйым. "Йәшлек"те йәш саҡтан алдырам. Шулай уҡ "Башҡортостан", район гәзиттәренең башҡортсаһын да, урыҫсаһын да яҙҙырам. Һуңғы йылдарҙа "Киске Өфө" гәзитенән ҡалғаным юҡ. Баҫма миңә бигерәк оҡшай. Ҡулға алыу менән һәр биттең өҫкө өлөшөндә урын алған фәһемле фекерҙәр менән танышам. Уларҙың һәр береһендә халҡымдың оло аҡылы, тормош тәжрибәһе, фәлсәфәһе ята. Көндәлек хәбәрҙәрҙе, яңылыҡтарҙы, теге йәки был ҡануниәттәге үҙгәрештәрҙе, файҙалы кәңәштәрҙе - береһен дә ҡалдырмай уҡып барам. Егерме йылдан ашыу тыуған яҡты, нәҫел ептәрен, шәжәрәләрҙе өйрәнеү менән шөғөлләнгән кеше булараҡ, тарихи ысынбарлыҡ, ырыуҙар хәрәкәте, халыҡ байрамдары хаҡындағы материалдарҙы ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уҡыйым. Башҡорт тарихы йылында ҙур масштабта үткән ырыу сараларын да "Киске Өфө"ләр киң яҡтыртты. Крайҙы өйрәнеүселәр өсөн бик яҡшы материалдар урынлаштырыла унда.

"Киске Өфө"лә Хәлил Һөйөндөковты, Арыҫлан Таймасовты, Әхмәр Үтәбайҙы яратып уҡыйым. Ғөмүмән, баҫма төрлө йәштәгеләр өсөн кәрәкле генә мәғлүмәттәр баҫа. Көн ҡаҙағындағы проблемаларға, көнүҙәк мәсьәләләргә ҡарата фекер формалаштырырға ярҙам итә улар. Шуға күрә киләһе йылда ла мотлаҡ гәзиткә яҙылырға уйлайым һәм башҡаларға ла яҙылырға кәңәш итәм. Үҙегеҙ яҙылған булһағыҙ, балаларығыҙға, әсәй-атайығыҙға яҙҙырып ҡыуандырығыҙ. Туған тел, милләт, башҡорт мәҙәниәте, тарихы, киләсәге тип борсолаһың икән, "Киске Өфө"гә яҙылып, туған телеңде ихтирам итеүеңде, халҡыңды, республикаңды, мәҙәниәтеңде, тарихыңды яратыуыңды иҫбат ит!

**Миңзәлә САНГИШЕВА,**
**хеҙмәт ветераны.**
**Мәләүез районы Эткөсөк ауылы.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Гәзитебеҙҙе, үҙе бүләк ул, тип ҡабул итһәгеҙ ҙә, һәр яҙылыу кампанияһы мәлендә һеҙгә даими рәүештә дәртләндереү, бүләкләү саралары ла тәҡдим итеүебеҙҙе беләһегеҙ. Был миҙгелдә лә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ. Квитанцияға ҡушып, гәзитебеҙ тураһындағы фекерегеҙ теркәлгән ҡош телендәй генә хатығыҙҙы ла һалһағыҙ, бик шат булырбыҙ.**

**Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# БЕҘҘӘ ТЕЛ ҠАЙҒЫҺЫ!



**Стәрлетамаҡ ҡалаһынан бер ҡатын шылтырата. "Ғәфү итегеҙ, көн-төн тел тураһында аҡыл һатаһығыҙ, бына әле телевизорҙан һеҙҙең дә сығышығыҙҙы тыңланым. Халыҡ шул тиклем бөлгөнлөктә йәшәгәндә, тел ҡайғыһымы ни бында!"- тип ебәрҙе был.**

"Ә һеҙҙә нимә ҡайғыһы һуң?" тип һорайым тыныс булырға тырышып. Теҙеп алып китте ханым: ҡыҙы ауырый, уны сит ил клиникаһына алып барырға аҡсалары юҡ; улы ипотека түләй, йүнле эш урыны юҡ; Татарстанға күсеп китергә уйлайҙар, әммә ике йыл инде фатирҙарын һата алмайҙар; ире машинаһын алыштырырға аҡса туплай алмай, эш хаҡы бәләкәй... Ҡыҫҡаһы, аҡса етмәй был ханымға. Татарстанға күсеп китһәләр, аҡса ла, башҡаһы ла булыр ине, тип өмөтләнә. Республика Башлығына хат яҙған, Рәсәй Президентына хат яҙған (нимә тураһында яҙғанын бик үк аңғарманым), әммә уны ҡәнәғәтләндерерлек яуап ала алмаған...

Мин уны бары тик тыңланым ғына, бер ниндәй һүҙ ҙә ҡыҫтырманым. Һүҙгә ҡушылырға теләк тә булманы, сөнки беҙҙе бит аҡса түгел, ә тел ҡыҙыҡтыра. Беҙ бит балаларыбыҙҙың туған телендә һөйләшеүен, туған телендә йырлауын, тарихи тамырҙарын белеүен, нәҫелдә, милләтте дауам итеүен өҫтөнлөклө маҡсат иткәнбеҙ. Бындай рухи ҡиммәттәр тураһында хәстәрләгән кешелә аҡса беренсе урында тормай.

Әлбиттә, мин был ханымға ул турала һөйләп, тел әрәм итеп торманым. Ә шулай ҙа уның сығышы аҙағына етә икәнен аңғарғас, "Тел ҡыҙыҡтырмай, тинегеҙ, үҙегеҙҙең балалар туған телде беләме һуң?" тип һорарға баҙнат иттем. "Ҡайҙан белһендәр, ейән-ейәнсәрҙәр ҙә белмәй, барыһы ла русса ғына һөйләшәләр..." тип кенә әйтте лә, мин берәй һүҙ ҡыҫтырып өлгөргәнсе, тағы ла шул насар тормош, аҡсаһыҙлыҡ, эшһеҙлек тураһындағы зарын дауам итте...

...Журналистың яҙмышы инде был - шундай әҙәмдәрҙе лә түҙеп тыңлап ултырырға тура килә бына.

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

?

## Балаларығыҙ башҡортса һөйләшәме, уларҙы милли рухта тәрбиәләү һәм туған мөхиткә йәлеп итеү өсөн ниҙәр эшләйһегеҙ?

***Резеда ВӘЛИЕВА, Сибай ҡалаһы:*** Үҙ телен белмәгән балалар күбәйҙе, айырыуса ҡала башҡорттары ғаиләләрендә. Аталары ла, әсәләре лә башҡорттар була тороп, балалары менән урыҫса һөйләшеүселәр таныштарым араһында ла йыш осрай. "Ниңә үҙ телегеҙҙә һөйләшмәйһегеҙ?"- тигән һорауыма: "Аңламайҙар бит", - тип, битараф яуап ҡайтара улар. Бындай кешеләргә ихтирамым юғала, наҙан кешеләр, тимәк, тигән һығымтаға киләм ирекһеҙҙән.

Аңламайҙар... Бәләкәй балаға кем аңлатырға, өйрәтергә тейеш, тип уйлайҙар икән? Тоталар ҙа, интернет-телевизорҙы, урыҫса йәнһүрәттәрҙе, аралашҡан дуҫтарынан ғәйеп эҙләй башлай бындай ата-әсәләр. Ғәйепләме улар? Юҡ! Фәҡәт ата-әсә үҙе ғәйепле. **Ғаиләңдә, исмаһам, икейөҙлөләнмә, аралаш үҙ телеңдә - балаң да үҙеңә эйәрер, башҡортса теле асылыр, телмәре үҫер.** Ә бит кесе йәштә балалар аңы бөтөн нәмәне бик тиҙ үҙенә һеңдерә! Шунан файҙаланып, бәләкәй саҡтарынан уҡ балағыҙҙы башҡортса һөйләшергә өйрәтегеҙ. Хәйер, махсус өйрәтеү ҙә кәрәкмәй, әлегесә, өйҙә башҡорт телмәре яңғырап тороу ҙа етә.

Беҙ үҙебеҙ, мәҫәлән, ғаиләлә тик башҡортса һөйләшәбеҙ. Ҡыҙыбыҙ Нурия балалар баҡсаһына барғансы урыҫса бер һүҙ ҙә белмәне. 2,5 йәшендә беҙ уны балалар баҡсаһының башҡорт төркөмөнә бирҙек. Ҡыҙғанысҡа, унда урыҫса һөйләшкән башҡорт балалары күберәк булып сыҡты. Ата-әсә балаһына үҙ телен һеңдерә алмағас, уларҙы шулай башҡорт төркөмөнә биреп, башҡортса өйрәтмәксе булғандар икән. Бер яҡтан, әсә теле төркөмөн һайлауҙары бик мәслихәт, ләкин һуңлаған шул улар. Өйөндә урыҫ телмәре яңғырай икән, тимәк, тәрбиәсе генә уларҙың балаһын туған теленә өйрәтә алмаясаҡ, сөнки әсә һөтө менән һеңдерелмәгән сабыйҙарға туған тел моңо...

Әсә теленә һөйөү сәңгелдәктән башлана, был тотошлайы менән ата-әсәнең аң кимәленә, фекерләү ҡеүәһенә бәйле. Бая әйткәнемсә, ҡыҙыбыҙ тәүҙә урыҫса бер ауыҙ һүҙ белмәгәс, атаһы борсола биреп тә ҡуйғайны, мин был йәһәттән тыныс ҡалдым: "Ҡалала бала барыбер урыҫса өйрәнәсәк, ихата тулы урыҫ балалары. Улар менән уйнай, аралаша, өйрәнә ул, борсолма", - тинем уға. Һәм, ысынлап та, баҡсаға тәү көн барып ҡайтҡас та ҡыҙыбыҙ беҙгә "Догоняй!" тип бойорҙо ла, өй эсен уратып, йүгереп тә китте. Был уның үҙаллы отоп ҡайтҡан тәүге урыҫ һүҙе булды. Ғөмүмән, башҡортса һөйләшеүҙә уға еткән бала булманы төркөмөндә. Әсә телен иң яҡшы белгән, еренә еткереп һөйләшкән баланы тәрбиәселәре лә ратты һәм уны туған тел менән бәйле төрлө конкурстарға йәлеп итә башланылар. Шулай итеп, 3 йәше лә тулмаған ҡыҙыбыҙ, "Урал батыр" эпосынан 12 юл ятлап, ҡала кимәлендәге конкурсҡа сыҡты һәм иң бәләкәй ҡатнашыусы номинацияһында билдәләнде.

Шөкөр, үҫә килә, баланың күңеле лә үҫте. Үҙ телен яҡшы белеүенә ҡыуанысы, башҡорт теленә ихтирамы артты. Артабан да нәфис һүҙ, әкиәт конкурстарында ихлас ҡатнашты, ҡыйыуланды, туған теленә бәйле тиңдәштәре, һабаҡташтары араһында абруйы, үҙ баһаһы күтәрелде. Бөгөн ҡыҙыбыҙ Сибайҙағы Рамаҙан Өмөтбаев исемендәге Башҡорт лицейының 2-се класында уҡый. Башҡортса ла, урыҫса ла таҙа һөйләшә, өҫтәүенә, инглиз телен өйрәнә, өҫтәмә дәрестәр ала башланыҡ. **Маҡтанып әйтмәйем, әммә күҙәтеүҙәрем буйынса шуны билдәләй алам: үҙ телен яҡшы белгән бала һәр йәһәттән дә тиҫтерҙәренән бер аҙым алда бара - фекерләүе төплө (зирәклеге менән аптыратып ҡуя йыш ҡына), телмәре аныҡ һәм асыҡ, йәшенә хас булмағанса, әҙәби һүҙҙәр ҡушып та һөйләп ебәрә хатта.**

Бөгөн мине шулай ҙа бер нәмә борсой: заман ағымы ыңғайына һәм урыҫса һөйләшкән дуҫ-иштәре йоғонтоһонда башҡорт теленә булған һөйөүе һүрелә төшмәгәйе, тием. Минең бурыс хәҙер ана шул һөйөүҙе үҫтереүгә, нығытыуға булышлыҡ итеү. Ошо маҡсатта нисек тә уны башҡортса китаптар уҡыуға, әҙәбиәткә ылыҡтырырға ине. Юҡ, мотлаҡ тел белгесе булһын тимәйем, бары тик әсә телен онотмаһын, артабан, Алла бирһә, үҙ балаларына ла үҙ телен өйрәтһен, тигән теләктәмен.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Республикала коронавирустан вафат булғандар һаны 3,8 меңдән артҡан. Тәүлек эсендә коронавирустан 31 үлем осрағы теркәлгән. Вафат булғандарҙың дөйөм һаны 3856-ға еткән, шул иҫәптән 60 йәштән өлкән 3465 кеше. Оперштаб мәғлүмәттәре буйынса, республикала сирлеләрҙең дөйөм һаны - 112 106 кеше. Бер тәүлектә уларға 589 яңы осраҡ өҫтәлгән. 6,7 мең кеше амбулатор шарттарҙа дауалана.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров яңы коронавирус инфекцияһына бәйле хәл киҫкенләшһә, ҡышҡы мәктәп каникулдарын оҙайтыу ихтималлығы тураһында белдерҙе. "Уҡыусылар күпләп сирләһә (хәҙер бит грипп башланып тора), ул саҡта, бәлки, каникулдарҙы тағы бер аҙнаға оҙайтырбыҙ. Көҙгө каникулда шулай эшләгәйнек, был бик ыңғай һөҙөмтә бирә", - тине республика етәксеһе. Башҡортостанда Яңы йылға яңы локдаун көтөлмәй, тине ул. Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, әле республикала балансты сикләү саралары ғәмәлдә.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә Башҡортостан биатлонсыларын еңеүҙәре менән ҡотланы. Антон Бабиков Норвегияла IBU Кубогында рәттән ике уҙышта алтын миҙал яуланы. Икеһендә лә ул Норвегия спортсыларын артта ҡалдырҙы. Эдуард Латипов Сәид Хәлили, Даниил Серохвостов һәм Александр Логинов менән Донъя кубогында 7,5 саҡрымлыҡ эстафетала бронза миҙал алды.

✓2020 йылда Президент указы менән өс йәштән ете йәшкәсә балаларға айлыҡ түләүҙәр индерелде. Уларҙы аҙ килемле ғаиләләр ала. Һуңынан дәүләт башлығы адреслы ярҙам күрһәтергә ҡушты. Шуға бәйле 2021 йылда аҡса түләү ҡағиҙәләре камиллаштырылды. Хәҙер иһә ғаиләләге хәлгә ҡарап, уның күләме төбәктә балалар өсөн йәшәү минимумының 50 проценты, 75 һәм 100 процентҡа етеүе ихтимал. Әле Башҡортостанға аҙ тәьмин ителгән ғаиләләргә ярҙам күрһәтеү өсөн федераль бюджеттан өҫтәмә рәүештә 632 миллион һум йүнәлтелә. Был хаҡтағы бойороҡҡа Хөкүмәт Рәйесе Михаил Мишустин ҡул ҡуйҙы.

*✓ Ағинәйҙәрҙең һәр береһе үҙҙәренең килен булып төшкәндән ҡәҙерләп һаҡлаған бирнәлек балаҫтарын күрһәтте; балаҫ, аламыс һуғыу терминдарын төшөндөрҙө, халыҡ кәсептәре хаҡында халыҡ мәҡәлдәре мәғәнәләрен тылҡыны.*



КИЛЕШМӘЙЕМ!

# БАШҠОРТСА ҺӨЙЛӘШМӘГӘС...

## башҡорт буламы ни кеше!



**Олатай-өләсәйҙәр менән ейән-ейәнсәрҙәр мөнәсәбәтен үҙемдең тормош тәжрибәмде бәйән итеүҙән башлағым килә. Ни өсөн тигәндә, күберәген өләсәй ҡулында тәрбиәләнеп үҫкәнгәме, минең өсөн өләсәйҙәр, нисектер, яҡынырaҡ кеүек.**

Туған телебеҙгә һөйөүгә тәү нигеҙҙе атайым менән әсәйем (улар икеһе лә уҡытыусылар ине), бигерәк тә өләсәйем башлап һалғандыр тип уйлайым. Хәҙер урамға сыҡһаң, сөй буйлыҡ бала ла белер-белмәҫ көйө урыҫса һупалап маташа. Ә инде район үҙәгенә барып, башҡортлоғо йөҙөнә сыҡҡан бала-сағаға үҙебеҙҙең телдә һүҙ ҡушһаң, ҡайһы береһе яурынын һикертеп кенә ҡуя, ә күпселеге: "Что сказали? Я не понимаю по-башкирски", - тип тә ебәрә әле. Был нимә? Атай-олатайҙарыбыҙ телен ихтирам итмәүме, әллә урыҫлашып, ассимиляцияға бирелә барыуыбыҙмы? Уйлаһаң, ҡурҡыныс булып китә. Аллаһ һаҡлаһын! Быуаттар буйына илем-ерем, телем, халҡым тип ҡан ҡой, ҡырталаш та, бөгөн килеп милли ҡаҙаныштарҙы үҙ ҡулдарыбыҙ менән юҡҡа сығар ҙа ҡуй әле? Ҡот осҡос бит!

...Асҡарҙағы сәнғәт мәктәбенә ейәнсәрҙәремде (бөтәһе 21 ейән-ейәнсәргә олатаймын) бер нисә йыл уҡырға алып йөрөнөм. Ундағы балалар мине танып бөткән."Здрасьте!" тигәнгә һәр ваҡыт "Һаумыһығыҙ!" тип яуаплайым. Торабара шулай итеп, бында уҡыған байтаҡ бала башҡортса иҫәнләшергә өйрәнде. Хәҙер үҙҙәре башлап: "Һаумыһығыҙ!"- тип сәләмләй һалалар һәм бының менән бик ҡәнәғәт ҡалалар. Ә бына, үкенескә, уларҙың ата-әсәләре араһында аңһыҙыраҡтары байтаҡ, тип әйтер инем. Ошоға ҡағылышлы эс бошорғос бер хәл һаман күңелде өйкәп тора. Мәктәпкә ингән ерҙә, ғәҙәттәгесә, уҡыусылар менән башҡортса аралашып ултырам. Шунда бер маңҡорт "атай" ишараты торҙо ла:"Һин нимә шуларҙы ыҙалатаң телдәрен боҙоп? Через лет 20 башкирский язык вообще булмаясаҡ", - тип һалдырмаһынмы! Тәүҙә ни әйтергә белмәй, шаңҡып ҡалдым. Бер аҙ һушымды йыйғандан һуң: "Дөрөҫ әйтәһең, ҡустым, - тинем, - һинең кеүек "атай"ҙар барында телебеҙҙең юғалыуы бик ихтимал. Телебеҙҙең дә, илебеҙҙең дә..." Теге әҙәм шундуҡ телен тешләне. Ҡаршы бер һүҙ ҙә өндәшә алманы, әммә уңайһыҙланманы ла, ҡыҙарынманы ла хатта. Аҙаҡ мине күрһә, урап үтер булды...

Үҙемә килгәндә, балаларымды туған телдә һөйләштерергә тырышам. Ҡайһы берәүҙәр кеүек мәжбүр итмәйем, ә тырышам. Исмаһам, өйҙә булһа ла үҙ телендә һөйләшһендәр, ә урыҫсаға улар былай ҙа өйрәнә: мәктәп, гаджет, телевидение өйрәтә. Үҙебеҙ бит 10 класты бөткәнсә урыҫса һөйләшмәнек, әммә бер еребеҙ ҙә кәмемәне, хур ҙа булманыҡ, унын ҡарауы, йөрәгебеҙгә башҡорт рухы мәңгелеккә һеңде. Өлгөргәнлек аттестаты алдыҡ, әрме хеҙмәтендә булып ҡайттыҡ, техникум, институт бөтөрҙөк, мәгәр телебеҙҙе онотманыҡ. Параллель урыҫ класында уҡыған бер һабаҡташым гел үкенә ине: "Эх, ниңә мин һеҙҙең менән уҡыманым икән? Хәҙер бына ни урыҫ, ни башҡорт түгелмен. Үҙебеҙҙең яҙыусыларҙың китаптарын да уҡый алмайым..." Һуңлап килгән үкенесме? Бәлки. Баяғы, 20 йылдан башҡорт теленең бөтөүен көҫәп йөрөгән маңҡорттоң балаларына ла ошо рәүешле үкенергә тура килмәгәйе бер заман...

Ейәнсәрем Елизавета Белова саф башҡортса һөйләшә, башҡортса йырлай, шиғырҙар һөйләй, хатта үҙе уҡып йөрөгән Ғ.Әлмөхәмәтов исемендәге Республика музыка гимназияһында тиңдәштәре араһында тәржемәсе ролен башҡарырға ла тура килгеләй икән уға. "Олатай, беҙҙә гимназияла берәү ҙә башҡортса һөйләшмәй, ә үҙҙәре - башҡорт. Ә кеше башҡортса һөйләшмәгәс, башҡорт буламы икән һуң?"- тип аптырай Лизабыҙ... Ул үҙе, әйтеүемсә, ике телде лә яҡшы белә, халыҡса әйткәндә, "һатып ебәрер".

Күп тел белгәндең рухы ла бай була. "Теле барҙың - иле бар" тигән бит бөйөк шағирыбыҙ. Илебеҙҙең нигеҙен нығытайыҡ, тиһәк, телебеҙҙе һаҡлайыҡ. Ә туған тел тәрбиәһе ғаиләнән башлана икәнен онотмаһаҡ ине.

**Иҙрис НОҒМАНОВ.**
**Әбйәлил районы Ҡырҙас ауылы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? Балаларығыҙ башҡортса һөйләшәме, уларҙы милли рухта тәрбиәләү һәм туған мөхиткә йәлеп итеү өсөн ниҙәр эшләйһегеҙ?

***Гөлназ ХӘСӘНОВА, Баймаҡ районы Бөрйән-Йылға башланғыс мәктәбе уҡытыусыһы:*** Интернет, заманса күп программалы кабель телевидениеһы, смартфон-айфондар беҙгә лә килеп еткәс, балалар хатта ауылдарҙа ла урыҫ телендә аралашыуға күсеп бөтөп бара, ләкин мин үҙем уҡытҡан мәктәп балалары хаҡында ла шундай хәл тип әйтмәҫ инем. Беҙҙә өлкәндәрҙән алып кескәй балаларға тиклем фәҡәт үҙ телебеҙҙә һөйләшәбеҙ, мәктәп укыусылары ла матур итеп башҡортса аралаша һәм уҡый. Төпкөл һәм бәләкәй генә ауылда йәшәгәнлектән дә түгел. Ауыл халҡы берҙәм һәм татыу, илһөйәрҙәр һәм телһөйәрҙәр төйәге ул Бөрйән-Йылға. Балалар мәктәпкә уҡырға төшкәндә үк бик матур ғаилә тәрбиәһе алып, уҡырға башланғыс әҙерлекле булып киләләр. Беҙҙә уҡыуҙы тамамлағас, улар күрше ауыл мәктәптәренә йәки район үҙәгендәге лицей-интернатта белем алыуҙы дауам итәсәктәр. Шуға күрә әсә телен онотмаһындар, милли рух тойғоһон юғалтмаһындар өсөн уларҙы мөмкин тиклем тыуған мөхит йоғонтоһонда тәрбиәләү сараларына әһәмиәт бирәбеҙ, сөнки туған тел - ул башҡортса телмәр һәм аралашыу "ҡоралы" ғына түгел, ә кешенең донъяға ҡарашын формалаштырыу сараһы ла, илһөйәрлек тойғоһоноң нигеҙе лә ул.

Ә илһөйәрлек хисе туған тәбиғәткә һаҡсыл мөнәсәбәттән, ауылыңа, унын кешеләренә ихтирам йөҙөнән башлана. Шуға күрә лә мәктәптә ошо темалар сиктәрендә ниндәй генә саралар үткәрелһә лә, унда күпте кисергән абруйлы ауылдаштарыбыҙҙы саҡырабыҙ. Ә уларҙың балаларға әйтер һүҙҙәре һәр саҡ бар. Мәҫәлән, йәй башында уҡ боронғо йоланы үтәп,"Кәкүк сәйе"нә сығабыҙ икән, ҡунаҡҡа саҡырылған ағинәйҙәребеҙ ошо йоланың тарихы, маҡсаты менән таныштыра, ер-һыу атамалары хаҡында риүәйәттәр һөйләй; ҡошҡортҡа, тәбиғәт хазиналарына һаҡсыл булырға өндәй. Әйткәндәй, беҙҙә матур шишмә һәм ауыл ҡоҙоҡтары бар. Өмәләр үткәреп, беҙ ауыл биләмәһен, әлеге һыу сығанаҡтарын тәртипкә килтереп, таҙартып торабыҙ. Ә инде йыл һайын үтә торған Милли костюм байрамында өлкәндәр ҙә, балалар ҙа мотлаҡ башҡорт кейемендә йөрөй. Быйыл ошо байрам программаһын "Өләсәйем әкиәте" кисәһе менән байыттыҡ. Ветеран уҡытыусы Земфира апай Теләүсина үҙенең өләсәһе һөйләп ҡалдырған ҡарһүҙҙәрен көйләп-һөйләп ишеттергәс, балаларға төрлө әкиәттәр буйынса викторина-һорауҙарын биреп, уларҙың был өлкәлә белем кимәлен тикшереп тә алды; унан уҡыусыларға аңлашылып етмәгән боронғо һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен аңлатты.

Халыҡ кәсептәрен тергеҙеү саралары ла балалар ҡатнашлығынан тыш үтмәй. "Ир ҡанаты -ат" тигән әйтемгә нигеҙләнеп, ауылыбыҙ аҡһаҡалдары Булат олатай менән Сәлимйән ағай аттарҙы тәрбиәләү, екке кәрәк-яраҡтары тураһында һөйләне, йылҡы малының йәш буйынса атамалары менән таныштырҙы, балаларҙы септә һуғыу серҙәренә өйрәтте. Мәктәбебеҙҙә иғлан ителгән Башҡорт теле айлығында шиғыр, әкиәт һөйләү, инша яҙыу конкурстарынан тыш, милли биҙәктәр менән балаҫ һуғыу буйынса ауылыбыҙ ағинәйҙәре күрһәтмә дәрес үткәрҙе. Зилә инәй Теләүсина эшләп күрһәткәндән һуң балалар балаҫ һуғырға үҙҙәре лә ихлас ҡушылып китте: береһе туҡыма-еп ҡырҡышты, икенсеһе орсоҡ әйләндерҙе. Ағинәйҙәрҙең һәр береһе үҙҙәренең килен булып төшкәндән ҡәҙерләп һаҡлаған бирнәлек балаҫтарын күрһәтте; балаҫ, аламыс һуғыу терминдарын төшөндөрҙө, халыҡ кәсептәре, хеҙмәт һөйөүсәнлек һәм тырышлыҡ хаҡында халыҡ мәҡәлдәре, ҡанатлы һүҙбәйләнештәр, әйтемдәрҙең мәғәнәләрен тылҡыны. Иманым камил: ошондай мөхиттә үҫкән балаларҙы, киләсәктә улар ҡайҙа ғына йәшәһәләр һәм эшләһәләр ҙә, туған тел, тыуған ватан менән өләсәй-олатайҙар биргән тәрбиә һабаҡтарының күҙгә күренмәҫ, ләкин мәңгелек булған нурлы еп-тәре бәйләп торасаҡ...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рәсәй Эске эштәр министрлығы бойороғо менән полиция полковнигы Владимир Александрович Севастьянов Башҡортостан Республикаһы буйынса Эске эштәр министрлығының Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге дәүләт инспекцияһы идаралығы етәксеһе вазифаһына тәғәйенләнде. Ул 1980 йылдың 1 мартында Нефтекамала тыуған. 2003 йылдың мартынан 2010 йылдың июненә тиклем Өфөнөң Юл-патруль хеҙмәте полкында төрлө вазифаларҙа эшләй. Һуңғы эш урыны - 2018 йылдың ноябренән Башҡортостан Республикаһы буйынса Эске эштәр министрлығының ЮХХДИ идаралығы етәксеһе урынбаҫары булып эшләй.

✓Башҡортостан Яңы йылда ял итеү өсөн Рәсәйҙең иң яҡшы биш тау саңғыһы курорты иҫәбенә инде. Был хаҡта "ТурСтат" туристик порталына һылтанып, Башҡортостандың Туризм буйынса дәүләт комитетының матбуғат хеҙмәте хәбәр итте. Республиканың Белорет районында урынлашҡан "Абҙаҡ" тау саңғыһы үҙәге дүртенсе урынды алды. Рейтингта тәүге урындарҙы "Роза Хутор" (Сочи) һәм "Эльбрус" (Ҡабарҙа-Балҡар) курорттары биләй, "Белокуриха" (Алтай крайы) - өсөнсө, "Шерегеш" (Кемерово өлкәһе) бишенсе баҫҡыста килә.

✓Республикала грипп һәм ОРВИ менән сирләүселәр күбәйә, эпидемик сик 14,4 проценттан артҡан, тип хәбәр итте Роспотребнадзорҙың республика буйынса идаралығы. Өлкәндәр араһында сирлеләр күп, бынан алдағы аҙна менән сағыштырғанда ауырыуҙарҙың 16,2 процентҡа артыуы күҙәтелә. Ноябрҙә республикала грипп һәм киҫкен респиратор вирус инфекцияһын йоҡтороуҙың 22 130 осрағы теркәлгән. Шул иҫәптән балаларҙа - 10 789 осраҡ, был сирлеләрҙең дөйөм һанынан 48,7 процентты тәшкил итә.

✓Учалының 9-сы биҫтәһендә 1225 урынлыҡ полилингваль мәктәп һалыу быйыл ғына башланды. Мәктәп "Мәғариф" милли проекты һәм Республика адреслы инвестиция программаһы ярҙамында төҙөлә. Ошо маҡсатта федераль бюджеттан 300 миллион һумдан ашыу бүленгән. Бинаның дөйөм майҙаны - 18 мең квадрат метрҙан күберәк. Төҙөлөштө киләһе йылдың сентябренә тамамлау күҙаллана.

ҠЫҪҠАСА

# ШЫРШЫ БИҘӘЙБЕҘМЕ?

✓ **Республиканың урман хужалыҡтарында Яңы йылға шыршылар әҙерләй башланылар.** Урман хужалығы министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, яңы йыл алдынан урмансылыҡтар 60 меңгә яҡын ылыҫлы ағас әҙерләргә йыйына, 3 декабргә 23 807 ағас әҙерләнгән дә инде.Яңы йыл байрамдары яҡынлаша башлағас, урман фондында шыршы һәм башҡа ылыҫлы ағастарҙы рөхсәтһеҙ ҡырҡыу осраҡтары арта. Ылыҫлыларҙы законһыҙ әҙерләгән өсөн административ һәм енәйәт яуаплылығы ҡаралған. Бынан тыш, закон боҙоусы урман үсентеләренә килтерелгән зыянды ҡапларға бурыслы. Әгәр һеҙ урман үсентеләрен законһыҙ ҡырҡыуға, уларға зыян килтереүгә шаһит булһағыҙ, ошо хаҡта Башҡортостан Республикаһы Урман хужалығы министрлығының Төбәк диспетчер хеҙмәте номерына: 8 (347) 218-14-14 (Башҡортостан Республикаһы буйынса) йәки урман һағының тура элемтәһенә хәбәр итеүегеҙҙе һорайбыҙ. Мөрәжәғәттәрҙе (хәбәрҙәрҙе) ҡабул итеү өсөн федераль номер: 8-800-100-94-00 (бөтә Рәсәй буйынса).

✓ **Башҡортостандың Тәбиғәт парктары дирекцияһы сайтында республиканың махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәләренең интерактив картаһы барлыҡҡа килде.** Интерактив картала Башҡортостандың барлыҡ махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәләренең: төбәк заказниктарының, тәбиғәт парктарының, тәбиғәт һәйкәлдәренең, шулай уҡ өс федераль ҡурсаулыҡтың, бер милли парктың сиктәре билдәләнгән. Башҡортостан Республикаһының Махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәләре дирекцияһы етәксеһе Салауат Нафиҡов һүҙҙәренсә, картала еңел генә махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәһен табырға, район, объекттың статусы һәм уның майҙаны буйынса ентекле мәғлүмәт алырға, махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәһе сайтына күсергә мөмкин. Бынан тыш, картала Уралдың иҫтәлекле урындары, республиканың тәбиғәт ресурстары хаҡында мәғлүмәттәр бар. Бөтә Рәсәйҙең "Һөнәрсы картаһы" һөнәрсылыҡ хужалығы геопорталының ярҙамы менән булдырылған.

✓ **Башҡортостан Башлығы Баймаҡ районында һәм Сибайҙа һыйырҙарҙың дерматит йоҡтороуына бәйле карантин индерелеү тураһында указға ҡул ҡуйҙы.** 6 декабрҙә Икенсе Төркмәндә һәм Сибайҙың Төйәләҫ ауылында шәхси һөт-тауар фермаһында ғәҙәттән тыш хәл режимы башланды. Электе документҡа ярашлы, 25 ноябрҙән махсус ҡарар ҡабул ителгәнгә тиклем Беренсе Төркмән ауылы, Мөҙәрис Кәримовтың, Илдар Тулыбаевтың һөт фермаһы биләмәләре ауырыу сығанағы тип танылғайны. Хәүеф зонаһына Икенсе Төркмән, Әхмәр, Абҙаҡ, Назар, Беренсе һәм Икенсе Моҡас, Төйәләҫ ауылдары инде. Үрҙә атап кителгән биләмәләрҙә сирле һәм ауырыуға шик булған мал янына ветеринар хеҙмәт белгестәренән тыш, башҡа кешеләргә инеү, һыйыр, мал аҙығы, сирле малдан алынған һөт һәм башҡа сеймал килтереү һәм алып сығыу тыйыла. Ауырыу малды һауҙарынан айырыу һәм юҡ итеү мөһим. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Баймаҡ ауылының Төркмән ауылы халҡына Яңы йылға тиклем компенсация түләнәсәк. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика Хөкүмәтендә үткән оператив кәңәшмәлә әйтте.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БЕҘҘЕКЕЛӘР - БЕЛАРУСТА



**Республика Башлығы Радий Хәбиров етәкселегендәге рәсми делегация Беларуста булып ҡайтты. Сәфәрҙә республиканың 40-тан ашыу компанияһы вәкилдәре ҡатнашты.**

2020 йыл йомғаҡтары буйынса Беларусь Башҡортостандың тышҡы сауҙа әйләнешендә 7,0 өлөш менән дүртенсе урынды биләй. 2021 йылдың ғинуар-сентябрендә тышҡы сауҙа әйләнеше - 217,2 миллион доллар, экспорт - 134,7 миллион доллар, импорт 82,5 миллион доллар тәшкил иткән. Был сәфәрҙә лә Башҡортостан эшҡыуарҙары Беларустағы хеҙмәттәштәре менән ауыл хужалығы өлкәһендә хеҙмәттәшлек итеүҙе, Башҡортостан Республикаһына Белоруста етештерелгән ауыл хужалығы техникаһын килтереү мөмкинлектәрен, күргәҙмә-йәрминкә сараларында ҡатнашыуҙы һәм төбәк-ара хеҙмәттәшлекте тикшерҙе.

Сәфәр программаһы төрлө сараларға бай булды. Башҡортостан Башлығы Беларусь Республикаһы Президенты Александр Лукашенко менән осрашты. "Ошондай ҡатмарлы осорҙа вәкиллекле делегацияның килеүе беҙҙең өсөн бик әһәмиәтле. Төп бурысыбыҙ асыҡ һәм хәл итерлек - көрсөккә тиклемге сауҙа әйләнешен, элекке күрһәткестәрҙе мөмкин тиклем тиҙерәк тергеҙеү", - тип билдәләне Президент һәм сауҙа өлкәһендә үҙ-ара килешеп эш итеүҙе әүҙемләштереү өсөн файҙаланырға мөмкин булған резервтарҙы тикшерергә һәм киләсәккә өҫтөнлөклө йүнәлештәрҙе билдәләргә тәҡдим итте. Шунан ул Башҡортостан Башлығына мөрәжәғәт итеп, "Беҙ яҡшыраҡ булдырабыҙ!" лозунгыһын "Бергәләп яҡшыраҡ һәм күберәк булдырабыҙ!" тиғән һүҙҙәр менән тулыландырырға кәрәк, тип тә өҫтәне. Үҙ сиратында Башҡортостан Башлығы былай тип белдерҙе: "Беҙ уртаҡ үсеш, хеҙмәттәшлек өсөн тормошҡа ашырылмаған тағы бик ҙур потенциал барлығын аңлайбыҙ. Беҙҙе бер ниндәй ковидтар ҙа, санкциялар ҙа ҡурҡытмай. Һеҙҙең менән эшләргә, халыҡтың һәм Беларусь Республикаһының, Башҡортостандың именлеге үсешеүен теләйбеҙ".

Артабан Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Минскиҙа Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булғандарҙы хөрмәтләп иҫкә алыу өсөн Енеү монументына сәскәләр һалды. Беларусь Республикаһының башҡорт- татар диаспораһы менән осрашты. "Бөтә ерҙә лә яҡташтарыбыҙҙың ҡаршы алыуын күреү һәр ваҡыт рәхәт. Ике сәғәт элек кенә күренекле дәүләт эшмәкәре Урал Латипов менән һөйләшеп торҙоҡ, ул Башҡортостан тураһында йылы һүҙҙәр әйтте. Ул йыл һайын тыуған яғы Баҡалы районына ҡайта, Беларусь дәүләтселеген үҫтереү өсөн байтаҡ эштәр башҡарған, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Башҡортостанда үҙ телен һәм мәҙәниәтен һаҡлап ҡалған 12 меңдән ашыу беларус йәшәй. Һеҙҙең дә бында мәҙәниәтебеҙҙе онотмауығыҙ һәм уны үҫтереүегеҙ бик ҡыуаныслы. Бурысыбыҙ - ошо йәһәттән һеҙгә ярҙам күрһәтеү. Башҡортостанда тел мөхитен, туған телдәрҙе популярлаштырыу өсөн һанлы инфраструктура булдырыуға ҙур иғтибар бүләбеҙ". Башҡортостан Башлығы ватандаштарыбыҙҙы Рәсәйгә ҡайтарыу буйынса федераль программаның да эшләүен хәтергә төшөрҙө. 2018 йылдан сит илдә йәшәгән ватандаштарыбыҙҙы Башҡортостанға күсереүгә булышлыҡ итеү программаһы ярҙамында йөҙләгән кеше тыуған яғына ҡайтты.

# ЭСКЕЛЕККӘ ҠАРШЫ КӨРӘШ



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика Хөкүмәтенә, муниципалитеттарға ялған хәмер етештереүселәр һәм һатыусылар менән көрәште көсәйтергә ҡушты.**

Республикаға идара итеү үҙәгендә үткән кәңәшмәлә ул шундай бойороҡ бирҙе. "Республикала ялған спиртлы эсемлектәр әйләнешен иҫкәртеү сараларын күреү мөһим. Рөхсәтһеҙ сауҙа иткән урындарҙы тиҙ арала асыҡлап, енәйәт эше ҡуҙғатырға, ошондай һатыу нөктәләрен ябырға кәрәк", - тине Хәбиров. Бер нисә йыл элек законһыҙ сауҙа итеү һәм суррогат етештереү урындары буйлап рейдтар үткәрелде, был эште яңынан ойоштороу зарур, тип өҫтәне республика етәксеһе. "Халыҡтың һаулығын һәм ғүмерен һаҡлау мөһим. Яңы йыл байрамдары осоронда был айырыуса көнүҙәк. Шуға күрә махсус контроль булырға тейеш", - тине Хәбиров.

Кәңәшмәлә республиканың сауҙа һәм хеҙмәттәр министры Алексей Гусев күрше төбәктәрҙә ялған хәмер эскәндән һуң кешеләрҙең һәләк булыу осраҡтарын иҫкә төшөрҙө. "Ырымбур өлкәһендә 63 кеше эсеп ағыуланған, уларҙың 35-е үлгән. Свердловск өлкәһендә 25 кешенең ғүмере өҙөлгән. Татарстанда 13 кеше, уларҙың 11-е - яҡташтарыбыҙ, метанол менән ағыуланып, дауаханаға оҙатылған. Ҡызғанысҡа ҡаршы, табиптар бер пациентты ҡотҡара алманы", - тине Алексей Гусев. Уның ведомствоһы мәғлүмәте буйынса, республикала быйыл 15 мең литр самаһы алкоголь законһыҙ әйләнештән тартып алынған. Тикшереү йомғаҡтары буйынса штрафтың дөйөм суммаһы - 9 миллион һумдан ашыу."Республикала үткәрелгән контроль һәм иҫкәртеү сараларының һөҙөмтәлә булыуы күренә. Иҫерек килеш енәйәт ҡылғандар һаны 2020 йылда - 5,2 процентҡа, ә быйыл 10 айҙа 7,7 процентҡа кәмегән. Үҙған йылда 73 кеше ялған хәмер эсеп вафат булған", - тине Алексей Гусев.

# ИХТЫЯЖДЫ ӨЙРӘНӘЛӘР



**Башҡортостанда социаль координатор тигән яңы һөнәр булдырыласаҡ. Улар граждандарҙың социаль хеҙмәттәргә ихтыяж кимәлен асыҡлаясаҡ.**

Шул уҡ ваҡытта улар граждандарҙың социаль хеҙмәттәргә ихтыяж кимәлен генә асыҡлап ҡалмаясаҡ, ә 30 меңләп өлкән йәштәгеләр һәм инвалидтарҙың сикләнгән йәшәү эшмәкәрлеге кимәлен һәм уларҙы ҡарау буйынса төркөмдә билдәләйәсәк. Был турала сираттағы оператив хөкүмәт кәңәшмәһендә БР хеҙмәт министры Ленара Иванова хәбәр итте. Граждандарҙың сикләнгән йәшәү эшмәкәрлеге кимәлен билдәләү нигеҙендә социаль хеҙмәттәр күрһәтеүҙең шәхси программаһы һәм артабан мөмкинлектәре сикләнгән кешеләрҙе оҙайлы ҡарау буйынса социаль пакет эшләнәсәк. Бынан тыш, социаль координаторҙар өлкән йәштәге кешеләр һәм инвалидтарҙың социаль мәсьәләләре буйынса яҡындан шөғөлләнергә, уларҙы ҡабул итергә теләүсе ғаиләләр менән эшләргә, реабилитациялауҙың техник саралары менән тәьмин итеүгә сертификаттар биреү, инвалид балаларҙы реабилитациялау, әүҙем оҙон ғүмерлелек сараларын алып барырға тейештәр.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓30 декабрҙән 232-се, 230-сы, 262к, 270-се маршруттарҙа юл хаҡы 35 һумға тиклем арта. Был хаҡта баш ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте хәбәр итте. Үҙгәрештәр 230-сы "Белореченский" биҫтәһе - Дзержинский урамы", 232-се "Сипайлово һауыҡтырыу комплексы" - "Башҡортостан сәскәләре" торлаҡ комплексы", 262к "Сипайлово һауыҡтырыу комплексы - "Пушкин" сауҙа-сервис комплексы", 270-се "Белореченский" биҫтәһе - 75-се мәктәп" маршруттарына ҡағыла.

✓Өфөлә шыршы баҙарҙары 15 декабрҙән 31-енә тиклем эшләй. Сауҙа нөктәләре халыҡ күп йөрөгән урындарҙы иҫәпкә алып һайланған. Өфөнөң Тышҡы реклама һәм мәғлүмәт идаралығы үткәргән аукцион һөҙөмтәләре буйынса эшҡыуарҙар менән тейешле килешеүҙәр төҙөлгән. Тыйылған урындарҙа сауҙа иткән өсөн 3 мең һумға тиклем штраф ҡаралған, уны ҡабаттан боҙған өсөн граждандарға - 4000-5000 һум; вазифалы кешеләргә - 40 000-50 000 һум; юридик берәмектәргә 100 000-150 000 һум административ штраф һалына.

✓Рөстәм Аҡбашев Өфө хакимиәте башлығы урынбаҫары - финанс идаралығы начальнигы итеп тәғәйенләнде. Был хаҡта ҡала хакимиәтендәге оператив кәңәшмәлә билдәле булды. "Рөстәм Ғәлимйән улы финанс өлкәһендә ҙур юл үтте, республикала юғары вазифаларҙа эшләне. Ул командабыҙҙы көсәйтер тип ышанам", - тине Өфө мэры Сергей Греков. Аҡбашев тәғәйенләнгәнгә тиклем финанс идаралығы етәксеһе вазифаһын Гөлнара Вәлиева биләне. Октябрҙә ул, коронавирустан һуң өҙлөгөп, вафат булды.

✓29 ноябрҙән Өфө менән Түбәнге Новгород араһында авиабәйләнеш тергеҙелде. Был хаҡта "Башинформ" агентлығына баш ҡала аэропортының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр иттеләр. "2020 йылдың декабренән тәүге тапҡыр Pegas Fly авиакомпанияһы 110 пассажир һыйҙырышлы Embraer ERJ-190 самолетында аҙнаһына ике тапҡыр тура рейстар башҡара", - тип белдерҙеләр Өфө аэропортында. Осош ваҡыты - 1 сәғәт 30 минут.

**БАШИНФОРМ” материалдары файҙаланылды.**

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# КОЛЛЕКТИВ ИММУНИТЕТ...

## ҡасаныраҡ барлыҡҡа килер?



**Ниһайәт! Баш ҡалала халыҡтың 87 проценты тажзәхмәткә ҡаршы вакцинация эшләткән. Табиптар баштан уҡ әйтеүенсә, халыҡтың 30 проценты вакцинация эшләтһә, йәмғиәттә коллектив иммунитет барлыҡҡа килергә тейеш ине. Һуңынан был һан арта барып, 80 процентҡа менде. Һөҙөмтәләр 90 процентҡа яҡынлашҡас, ниһайәт, коллектив иммунитет барлыҡҡа килгәндер инде тип ҡыуанырға мөмкин. Әммә ҡала хакимиәтендә үткән сираттағы оператив кәңәшмәлә был һан, яҡшы күрһәткес, тип баһаланды һәм ошо йүнәлештә эште артабан дауам итеү кәрәклеге билдәләнде. Күрәһең, коллектив иммунитет һаман да барлыҡҡа килмәй ҡарыша...**

Ҡыш киләме, юҡмы, ни ҡары, ни һыуығы юҡ, тиһәк тә, саҡ ҡына һыуытып ебәргәйне, аяҡ аҫты боҙға әйләнде лә ҡуйҙы, бигерәк тә тротуарҙарҙа шыуышып ҡына йөрөрлөк. Ул боҙ ҡайҙан барлыҡҡа килгәндер... Әммә ҡаланың коммуналь хеҙмәттәре миҙгел башынан алып ҡар менән көрәшә. Ошо ваҡытҡа ҡарата урам-юл селтәренән барлығы 172275 кубометр ҡар сығарылған. Был үткән ике йыл менән сағыштырғанда 4 тапҡырға күберәк икән - хакимиәттең Коммуналь хужалығы һәм төҙөкләндереү идаралығы начальнигы Рөстәм Хәмитов үҙенең сығышында ошо хаҡта белдерҙе. Боҙлауыҡҡа ҡаршы көрәшеү өсөн 12,6 мең тонна бионорд һәм минераль тоҙ (галит) һатып алынған. Бөгөнгә уларҙың 1,5 мең тоннаһы ҡулланылған. 5 декабргә ҡарҙан таҙартыу зарурлығы тураһында 211 мөрәжәғәт ҡабул ителгән, уларҙың күпселеге үтәлгән. "Инцидент-менеджмент" системаһына 53 мөрәжәғәт булған, уларҙың барыһы буйынса ла сара күрелгән. Сығыш яһаусы шулай уҡ граждандарҙы автомобилдәрен юл буйында ҡалдырмаҫҡа саҡырҙы - юлды таҙартыуға ҡамасаулайҙар. Хәйер, был үтенес йыл һайын даими рәүештә ҡабатланып тора, әммә бер ҡолаҡтан инеп, икенсеһенән сыға, тигән төйгө ҡала.

Рәсәй Эске эштәр министрлығының Өфө ҡалаһы буйынса идаралығының иҡтисади хәүефһеҙлек һәм коррупцияға ҡаршы эшмәкәрлек бүлегенең бүлексә начальнигы урынбаҫары Игорь Ильин контрафактҡа ҡаршы көрәш, Яңы йыл байрамдарында ялған алкоголь һәм башҡа спиртлы продукция ҡулланыу хәүефе хаҡында иҫкәртте. Йыл башынан алып 10 айҙа баш ҡалала ошо йүнәлештә барлығы 3150 тикшереү үҙгәрылған, улар барышында 76530 литр спиртлы эсемлек тартып алынған, 319 административ протокол төҙөлгән, алкоголь продукцияһы етештергән һәм һатҡан бер йәшерен цех асыҡланған.

Уйлап ҡараһаң, бәхет тә, кешенең күңел торошо ла эске йәки тышҡы ниндәйҙер ихтыяжға бәйле түгел. Ошо халәтте тоя алһаң - һин үҙең байрам. Ә тышҡы сәбәптәр быны бары тик көсәйтеүе генә мөмкин. Мәҫәлән, ойошторолған байрамдар. Әйткәндәй, "Байрамса Өфө" конкурсы ла шундайҙарҙан. Конкурста барлыҡ милек төрөндәге ойошма һәм учреждениелар ҡатнаша ала. Улар үҙҙәренең биләмәһен байрамса биҙәргә тейеш. Конкурс район һәм ҡала этаптарында үткәрелә, енеүселәр дүрт номинация буйынса билдәләнә. 15 декабргә тиклем район этабына ғаризалар ҡабул ителә, 20 декабргә тиклем район хакимиәттәре ҡала этабына документтар һәм фото-видеоматериалдар тапшыра. Уҙған ике йылда ҡышҡы конкурста ҡаланың 500-ҙән ашыу ойошмаһы ҡатнашҡан.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# "ПУШКИН КАРТАҺЫ" МЕНӘН...

**"Пушкин картаһы" федераль проектына ярашлы, 14-22 йәштәге граждандар дәүләт иҫәбенә, йәғни бушлай театрҙарға, музейҙарға, концерттарға һәм башҡа мәҙәниәт учреждениеларына йөрөй ала.**

Өфөлә был карта менән яҡын көндәрҙә Йәш тамашасы театрына, Ҡала мәҙәниәт йорто, "Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамбле, "Машина эшләүселәр" мәҙәниәт һарайының концерттарына, конкурстарына һәм тематик программаларына, квиз-уйындарына, Ҡала мәҙәниәт-ял үҙәгенең уйын программаларына, "Дуҫлыҡ" мәҙәниәт йортоноң "Антиквиз" интеллектуаль жанрҙағы уйындарына, "Йәдкәр" мәҙәниәт йорто программаларына, Өфө ҡала планетарийының шаршамбынан йәкшәмбегә тиклемге программаларына барырға мөмкин. Барлыҡ саралар COVID-FREE форматында үткәрелә, 18 йәштән өлкән тамашасыларҙан QR-код йәки һуңғы ярты йылда тажзәхмәт менән сирләү тураһында белешмә, шулай уҡ шәхесте раҫлаусы документ талап ителә. "Пушкин картаһы"н "Госуслуги" порталында ғариза биреп алырға мөмкин. Мәҙәни сараларға билет алыу мөмкинлеген биргән махсус банк картаһына аҡсаны дәүләт күсерә. Быйыл һәр картаға 3000 һум һалынһа, киләһе йылда был сумма 5000 һум буласаҡ.

# ӨФӨЛӘР АТЛАРҒА ӨЙРӘНӘ...

**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Сергей Греков фигуралы шыуыу буйынса Олимпия уйындары призеры, донъя һәм Европа чемпионы, Ирекле физкультура союзы президиумы рәйесе Ирина Слуцкая менән осрашты.**

Быға Өфөлә юғары белем биреү ойошмалары араһында Бөтә Рәсәй йәштәр проекттары енеүсеһе "Спорт, фән һәм технологиялар марафоны"ның башланыуы сәбәп булды. Марафон ҡатнашыусылары - юғары һәм урта һөнәри белем биреү студенттары, шулай уҡ дөйөм белем биреү мәктәптәренең өлкән класс уҡыусылары. Сергей Греков менән осрашыуҙа Ирина Слуцкая үҙенең Рәсәйҙең 40 төбәгендә тормошҡа ашырылған "Төньяҡ атлауы (северная ходьба) - яңы йәшәү рәүеше" проекты менән таныштырҙы. Уның төп маҡсаты - эшләп йөрөүсе граждандарҙы төньяҡ атлауы ярҙамында даими рәүештә физик культура һәм спорт менән шөғөлләнеүгә, сәләмәт һәм әүҙем тормош алып барыуға йәлеп итеү. "Беҙ баш ҡала халҡын төньяҡ атлауына йәлеп итеүҙе пландлаштыра инек, әммә Ирина Эдуардовнаның килеүе һәм шәхсән ҡатнашыуы һөҙөмтәһендә эш тағы ла тиҙерәк алға барасаҡ", - тине хакимиәт башлығы.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ...

## "Ете аҙымы"

**Республикала 14 декабрҙә Башҡорт теле көнө һәм бөйөк мәғрифәтсе Мифтахетдин Аҡмулланың тыуыуына 190 йыл тулыу айҡанлы уҙғарыласаҡ бихисап ҡыҙыҡлы һәм йөкмәткеле саралар "Ете аҙым" концепцияһына берләштерелеп, бөйөк Аҡмулланың "Нәсихәттәр"ендә билдәләнгән ете рухи ҡиммәткә нигеҙләнә.**




Марафонға старт 7 декабрҙә бирелде. Артабан ете көн дауамында ете төшөнсәнең асылы, мәғәнәһе яҡтыртыла барасаҡ һәм был Башҡорт теле көнөнә тиклем дауам итәсәк, тип планлаштырылды: мәҫәлән, 7 декабрҙә - "Башҡорт теле - иман теле", 8 декабрҙә - "Башҡорт теле - күңелем көҙгөһө", 9 декабрҙә - "Башҡорт теле - аҡыл теле", 10 декабрҙә - "Башҡорт теле - шөкөр теле", 11 декабрҙә - "Башҡорт теле - әҙәп теле", 12 декабрҙә - "Башҡорт теле - сабырлыҡ теле", 13 декабрҙә - "Башҡорт теле - ихласлыҡ теле".

Ошо ете көн эсендә бик күп мәғәнәле, матур саралар уҙыу һәм уҙасаҡ. Мәҫәлән, "Без башкортлар" башҡорт рок-башҡарыусылары, "М. Акмулланың аҡ юлы" әҙәби кисәләре, йәштәр өсөн "Йомробаш" интеллектуаль уйыны, Башҡортостандың милли инновациялы мәктәптәре етәкселәре форумы, "Телгә бәйле..." старт-сессияһы.

Унан тыш, Ғафури районында Жәлил Кейекбаевҡа бюст асыласаҡ, "Дан юлдар үткән уҙамандар" темаһына түңәрәк өҫтәл ойоштороласаҡ. Башҡортостан Башлығы грантына "Кубоктар лигаһы" КВН финалы, "Әсәм теле - сәсән теле" шиғри бәйгеһе үтәсәк.

Тағы ла сағыу саралар иҫәбенә М. Аҡмулланың тыуыуына 190 йыл тулыуға бағышланған байрам концерты инә, унда мәғрифәтсе исемендәге премия лауреаттары билдәләнәсәк. 14 декабрҙә М. Аҡмулланың һәйкәленә сәскә һалынасаҡ, стипендиаттарға махсус премиялар тапшырыласаҡ. Уҡыусылар өсөн башҡорт теленән берҙәм онлайн-дәрес үтәсәк.

Шулай уҡ "Тамға" башҡорт милли кейеме оҫталарының халыҡ-ара конкурсы, "Башҡорт теле - яңы ҡараш" башҡорт телен популярлаштырыу һәм үҫтереү проекттарын презентациялау, "Ритайым" йәштәр сараһы ойоштороласаҡ, һәр районда тематик саралар уҙасаҡ.

Белем биреү ойошмаларында ла бер йүнәлешле саралар үткәреү ҡаралған. Шулар иҫәбендә башҡорт телендә радио, телевидение көнө; Аҡмулла шиғырҙарын башҡортса һәм "AkmullaWorld Challenge" сит телдәрҙә уҡыу видеомарафоны; башҡорт теле буйынса этноквизы; "Бикбай уҡыуҙары" төбәк-ара конкурсы һәм башҡалар планлаштырылған.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Грипп

❖ Был ауырыуҙы иҫкәртеү өсөн шундай халыҡ әмәле бар: 3 баш һуғанды ваҡ ҡырғыс аша үткәреп, өҫтөнә 300 гр ҡайнатылған йылы һыу ҡойоға һәм ауыҙы ныҡлы ябыҡ һауытта 7 сәғәт төнәтергә. Шунан һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда ярты шар стакан эсергә. Шулай уҡ ауырыу үҙен яңы һыҙзерткән осорҙа һәр 2-3 сәғәт һайын 1-әр ҡалаҡ һуған һуты эсеү файҙалы. Балаларға һуған һутына бал ҡатыштырып (1:1) бирергә мөмкин. Шулай уҡ көн һайын иртәнге аштан ярты сәғәт алда бер теш һарымһаҡ ашау ҙа файҙалы.

### Ангина

❖ Ҡылыс үлән (аир), имән ҡайырыһы, кесерткән һәм шалфейҙы бер тигеҙ өлөштә алып, тамаҡты сайҡау өсөн төнәтмә әҙерләргә була. Үләндәр ҡатышмаһынан 4 ҡалаҡ алып, 1 литр һыуыҡ һыу ҡойорға һәм ҡайнар хәлгә еткерергә, 10 минут талғын утта тоторға. Шунан ярты сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Уның менән тамаҡты һәр 3 сәғәт һайын сайҡап торорға. Был дауа хатта эренле ангинаны ла дауаларға ярҙам итә.

❖ 1 стакан мүк еләге (клюква) һутына 3 ҡалаҡ бал ҡушып, яҡшы итеп болғарға. Тамаҡты ошо дауа менән көнөнә бер нисә тапҡыр сайҡарға. Һәр сайҡағандан һуң 2 ҡалағын бер аҙ уртта тотоп йотоорға ла кәрәк. Мүк еләге тамаҡтың ауыртыуын һәм шеште баҫа, уны "төньяҡ лимоны" тип юҡҡа атамайҙар.

### Сиҡан

❖ Был сирҙән лавр япрағы ла ярҙам итергә мөмкин: 12 бөртөк япраҡҡа 1 литр һыу ҡойоп, 10 минут ҡайнатырға. Һыуытырға һәм көн дауамында 1/3-әр стакан эсергә. Был рәүешле 3-5 көн дауаланыу һөҙөмтәһен бирә.

### Пневмония

❖ Гәрсис менән йылы ванналар яһарға була. 100 грамм кипкән гәрсисте 1 литр һыуыҡ һыуға һалып болғарға һәм йылы һыу йыйылған ваннаға ҡойорға. Был ваннаны 7 минуттан да артыҡ инмәҫкә. Аҙағынан тәнде яҡшы итеп һыуырға. Процедураны йоҡларҙан алда эшләргә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Ейәнсура, Күгәрсен яҡтарының "һеңлем"де "һылыуым" тип һөйләшеүе ни өсөндәр шунда уҡ күңелемә ятты. Хатта, уларҙан күрмәксе, йәш ҡыҙҙарға мөрәжәғәт иткәндә "һылыу" тип өндәшеүҙе үҙемә ғәҙәт итеп алдым.*



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# ЙОРТ ЙЫҺАЗДАРЫ

Башҡорт өйөндә һырлау төрлөсә ҡулланылыш тапҡан. Тәү сиратта йорттоң төп өлөштәре (тәҙрә, ишек, урындыҡ), һуңынан мебель (карауат, өҫтәл, ултырғыс, эскәмйә, һауыт-һаба кәштәһе, һике, урын аяғы), хас булған көнкүреш әйберҙәре (һандыҡ, төрлө кәштәләр, урҙа, урынағас кәрәк-ярағы, иләүес, сәңгелдәк һ.б.). Традицион интерьерҙы аш һәм өҫтәл кәрәк-ярағынан тыш күҙ алдына килтереүе мөмкин түгел.

Художестволы формаһы буйынса төрлө-төрлө булған барлыҡ был әйберҙәр бер бүлмәлә йыйылған, сөнки күп өйҙәр бүлемһеҙ, соланлы булған. мейестән алып алғы стенаға тиклем урҙа эленгән, уның буйынан шаршау һуҙылған. Ул өйҙө һәм урындыҡты икегә бүлгән. "Шаршау эсе", йәки "ҡаҙанлыҡ" тип йөрөтөлгән яҡта аш-һыу әҙерләгәндәр, унда һауыт-һаба һәм кәрәк-яраҡ ҡуйылған.

Хәлле башҡорттарҙың өйҙәре алты мөйөшлө йәки һигеҙ мөйөшлө булған һәм ҡунаҡтар өсөн тәғәйенләнгән "таҙа" бүлмә айырым булған, ә хужалыҡ эштәре һәм аш-һыу әҙерләү өйҙөң ихата яғындғы эске яртыһында эшләнгән. Таҙа яҡ биҙәкле туҡымалар, аҫалы балаҫтар менән күркәм биҙәлгән, һандыҡ йәки урын аяғына күпертеп түшәк йыйылған, байрам кейемдәре элеүле торған, стеналарға һырланған кәштәләрҙә сәй өсөн һауыт-һаба, семәрле һикеләр ҡуйылған, һырланған ижаулы ҡымыҙ көбөһө ҡуйылырға мөмкин булған. Элек өйҙөң был өлөшөн ҡорал да биҙәгән: зауыҡлы ҡалъян һәм һаҙаҡтарҙа уҡ-ян, ҡылыс, йәҙрә һәм дары һауыттары эленгән һунарсы билбауы, шулай уҡ ҡунаҡҡа йөрөгәндә ҡулланылған күркәм эйәр, сбруй эленеп тороп булған. Бихисап һауыт-һаба аш бүлмәһенә тәғәйенләнгән яҡта һаҡланған, унда ла зауыҡ менән биҙәлгән әйберҙәр тап ителгән.

Тирмәләрҙә, ғәҙәттә, ишек һәм сағараҡ эргәһендәге кирәгә өлөштәрен семәрләгәндәр. Төрки халыҡтарының да, монголдар тирмәһендә лә шулай булған һәм был йоланы XX быуаттың һуңғы сирегенә тиклем һаҡлап ҡалған башҡа халыҡтар ҙа тотҡан. Башҡорттар ултыраҡ тормошҡа күсеүгә бәйле тирмә эшләү XIX быуатта уҡ туҡтаған. XX быуатта был оҫталыҡтың кәрәге бөткән һәм тулыһынса юғалтылған. Ә XIX быуаттың беренсе яртыһында малсылыҡ менән көн күргән көньяҡ-көнсығыш райондарҙа ауылдарҙың барлыҡ тиерлек халҡы йәйләүгә сыҡҡанда, хәллерәк кешеләрҙең тирмәләрендә семәрле ишек һәм биҙәкле сағараҡ булған, ҡайһылары ҡаҙаҡтарҙа эшләнгән. Әммә башҡорттар араһында ла тирмә ҡоролмаларын эшләүсе оҫталар йәшәгән һәм уларҙың ҡул эштәре үҙ сиратында ҡаҙаҡтар араһында ла таралған. XX быуаттың 50-се йылдарында Башҡортостандың көньяҡ-көнбайышында йәшәгән мәғлүмәт биреүселәр һырланған тирмәләр тураһында һөйләй: кемеһе үҙе күргән, кемеһе атаәсәһенән ишетеп белгән. Ҡыҙғанысҡа күрә XIX быуат - XX быуат башына ҡараған этнография материалдарында семәрләнгән тирмәләр тураһында мәғлүмәттәр бирелмәгән. Төрки халыҡтарҙың тирмәләрендәге (тәү сиратта ҡаҙаҡтарҙыҡын) семәрҙәрҙе һәм көньяҡ-көнсығыш башҡорттарының биҙәү сәнғәтен өйрәнгәндән һуң, XIX быуат аҙғы - XX быуат башында ауыл өйҙәрен, ҡапҡаларҙы, тәҙрә ҡапҡастарын биҙәгәндә ҡулланылған орнаменттар элек тирмәләр өсөн ҡулланылған, тигән һығымта яһарға мөмкин. Бигерәк тә был ҡабартып төшөрөлгән һәм киң таралыу алған "тештәр", "арҡан", "кәкерсәк", ҡыя шаҡмаҡтар һәм өсмөйөштәр теҙмәһе һ.б. биҙәк төрҙәренә ҡағыла.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

*ТУҒАН ТЕЛЕМ…*

# АУЫҘ ТУЛТЫРЫП...

## һөйләшеүгә ни етә!

**Студент йылдарында, үҙем табип һөнәренә уҡып йөрөүемә ҡарамаҫтан, республикабыҙҙың башҡа райондарынан килгән һабаҡташтарым, таныштарымдың теленә, айырыуса, уларҙың башҡортса һөйләшеүенә ныҡ иғтибар итә торғайным. Дөрөҫөн генә әйтергә кәрәк, минең баймаҡтарса "Иң таҙа башҡорт теле - беҙҙә" тигән инаныуҙараҡ булған осором ине. Һәр хәлдә, төрлө яҡтан йыйылған башҡорттарҙың төрлөсә һөйләшеүен ишетеү миңә ифрат та ҡыҙыҡлы булды.**



Ҡайһы бер таныштарымдың: "Нишләп һеҙ - баймаҡтар, хәйбуллалар "аҡса", "райцентр", "Аҡъяр", "Баймаҡ" һымаҡ һүҙҙәрҙең "а" өнөнә артыҡ баҫым яһап, ауыҙығыҙҙы ҙур асып, хәтәр ҡаты итеп һөйләшәһегеҙ ул?" - тиеүҙәренә ғәжәпләнә торғайным. Башҡаса нисек итеп әйтәһең инде уны? Ҡалай ғына итеп әйтһәң дә, "а" - "а" була инде ул... Һуңғараҡ ҡына аңғарып ҡалдым: күптәр был һүҙҙәрҙе "оҡса", "ройцентр", "Оҡъяр", "Боймаҡ" һымағыраҡ итеп, бер аҙ йомшағыраҡ әйтә икән. Үҙем дә "тәзәл" генә булғанмындыр инде, һис кенә лә бирешергә иҫәп юҡ. "Ә һеҙ, мәсетлеләр, нишләп сынаяҡ аҫтын "жәйпәк", ә әсәйҙе "инәй" тиһегеҙ, ә һеҙ, учалылар, ни өсөн "йышам" тиер урынға "шышам" тип әйтәһегеҙ, ә һеҙ, әбйәлилдәр, нишләп картуфты "кәртүк", ҡоҙоҡто - "ҡотоҡ", ә олатайҙы - "апа" тип һөйләшәһегеҙ?"- тигән һымағыраҡ ҡаршы һорауҙарым да үҙемдең һәр саҡ "кеҫәмдә" йөрөй торғайны.

Бынан тыш, "атайҙар", "әсәйҙәр", "ағайҙар" тип әҙәби телдә яҙыуыма ҡарамаҫтан, һөйләшкәндә "атайлар", "әсәйләр", "ағайлар" тип тә ғәҙәтләнгәнмен. Беҙҙең тирәләге барса ауыл кешеләре шулай һөйләшә. "Асҡар" яғынан булған бәғзе дуҫтарымдың "Ништәп улайтып татарса һөйҙәшәң?" тип миңә иҫкәрмә биреүселәре лә булманы түгел. Әммә бала саҡтан килгән һөйләш шулай бит инде. Әлшәйҙәрҙең дә "ҫимеҙ ҫыйыр", "ҫигеҙ ҫарыҡ", "ҫыу буйындағы ҫуғанға ҫыу ҫип" тигән һымаҡ һүҙҙәрен иғтибарҙан ситтә ҡалдырмай, тикшереп алабыҙ... Беҙҙең Баймаҡ яғында ла ҡайһы берҙә "һ" өнөн "ҫ"ға үҙгәртеп әйтәләр ул, тик берәй сифатты ("ҫап-ҫаҫыҡ", "ҫипҫимеҙ" һымағыраҡ итеп) көсәйтеп ебәрер өсөн генә. Йә булмаһа, саманан тыш әкрен атлаған атты: "Ней бер, ҫыйыр ҡошап, ығышланып бараһың", - тип ҡыуалар.

Миәкә районынан булған бер танышымдың "хәшәрәт тәмле" йә "хәшәрәт матур" тигән һүҙҙәренән дә ҡыҙыҡ табып көләм. "Беҙҙә "хәшәрәт" һүҙен икенсе мәғәнәлә ҡулланалар", тип үҙемсә аңлатырға маташам. Танышымдың да теле әсе генә: "Хәлил, һин үҙең дә ҡалай ҡыҙыҡ һөйләшәң ул!" - тип шаярта, "ҡалай" һүҙенә айырыуса баҫым яһап. "Ҡайһылай"ҙы башҡасараҡ итеп әйтеүемде эләктереп ала һалып, шул һүҙем менән эләкләп, үҙемә "төрткөләй" башлай... Унан икәүләшеп көлөшәбеҙ. Беҙгә ифрат ҡыҙыҡ! Бәхәсләшеү хаҡында хатта уйыбыҙға ла инеп сыҡмай.

Ейәнсура, Күгәрсен яҡтарының "һеңлем"де "һылыуым" тип һөйләшеүе ни өсөндәр шунда уҡ күңелемә ятты. Хатта, уларҙан күрмәксе, йәш ҡыҙҙарға мөрәжәғәт иткәндә "һылыу" тип өндәшеүҙе үҙемә ғәҙәт итеп алдым. Ә беҙҙең Баймаҡ яғында үҙенән йәшерәк ҡатын-ҡыҙға "ҡарындаш" тип өндәшәләр. Был һүҙҙең тамырына төшә башлаһаң, "ҡасандыр был ҡыҙ һинең менән бер ҡарында ятҡан" һымағыраҡ күҙ алдына килә. Шуғамылыр, "ҡарындаш"ты әллә ни ҡулланырға тырышмайым.

Күп кенә райондарыбыҙҙа "хәтәр" (ғәрәпсәнән урыҫ теленә - "опасность" тип тәржемәләнә) һүҙен дә "Бик хәтәр эш менән булышаһың бит", тип, кемделер киҫәтеү һымағыраҡ ҡулланыуҙарҙан тыш, йыш ҡына уның ярҙамында ниндәйҙер берәй сифатты көсәйтеп: "Хәтәр сибәр", "хәтәр аҡыллы", "хәтәр уҫал", - тип әйтәләр.

Бала сағымда ниндәйҙер бер китапта "уфтаныу" һүҙен "уфырыу" тип яҙғандарын уҡығаным иҫемдә (авторын хәтерләмәйем). Нимәгәлер ҡайғырып, ауыр көрһөнгән ҡартын: "Атаһы, нишләп улай ныҡ уфыраһың? Ҡайғырма..." - тип йыуатҡан әбейҙең һүҙҙәрен уҡып, Ринат исемле дуҫым менән рәхәтләнеп көлөшөп алғайныҡ. Шаян ғына был дуҫыма өлкән синыфтарҙа уҡыған Мәҙинә апаһы "Уфтаныу" тип аңларға кәрәк был һүҙҙе", тип төшөндөрөп маташа. Ә Ринат һаман: "Юҡ, мына бит, китапта "уфырма" тип яҙылған", - тип, тағы ла нығыраҡ, һыны ҡатып көлгәне хәтеремдә. Тимәк, ҡайһылыр районда ана шулай һөйләшкән милләттәштәребеҙ ҙә бар, тип уйлайым хәҙер.

Бына шулай халҡыбыҙҙың һөйләшеүҙәре хаҡында йыш ҡына сурытып алырға яратам. Әҙәби телебеҙгә оҡшап та етмәгән һымаҡ быңдай һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, шулай ҙа телебеҙҙе тик матурлай ғына, тип һанайым. Ниндәй генә районда булырға тура килһә лә, урындағы халыҡтың шундай матур, ябай итеп һөйләшеүен ишетеп, үҙемде ғәйәт тәмле берәй деликатес ашағандай тойоп кинәнәм. Берәй уңайын таба һалып, ауыл кешеләре менән бай телебеҙҙең гүзәл үҙенсәлектәре хаҡында, беҙҙең яҡта әйтмешләй, "ауыҙ тултырып" гәпләшеп алырға яратам. Бик күп диалекттарҙы хәтерләп тә ҡалам. Баштараҡ үҙем "Саф башҡорт теле - беҙҙең районда ғына" тип һанауыма ҡарамаҫтан, хәҙер ошондай уҡ позицияны тотҡан яҡташтарым хаҡлы түгелдер тип һанайым. Һәр райондың, һәр ҡасабаның үҙенә күрә һөйләшеү нескәлектәре булыуы - тәбиғи. Был - телебеҙҙең ифрат та бай икәнен күрһәтә, тигән инаныуҙамын.

**(Дауамы 9-сы биттә).**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# АЛМА АЛМАШАБЫҘМЫ?



Бөтөн донъяға билдәле Америка драматургы Бернард Шоуҙың бик ябай, әммә бик мәғәнәле афоризмы бар: "Миндә бер алма, һиндә бер алма. Мин алмамды һиңә бирҙем, һин алмаңды миңә бирҙең. Хәҙер һиндә лә бер алма, миндә лә бер алма. Миндә бер идея, һиндә бер идея. Мин идеямды һиңә һөйләнем, һин идеяңды миңә һөйләнең. Хәҙер һиндә лә ике идея, миндә лә ике идея".

Алыҫ 90-сы йылдарҙа бартер тигән сит ил һүҙе әрһеҙ рәүештә һөйләшкә килеп ингәйне. Хәйер, һөйләшкә генә түгел, иҡтисад өлкәһен яуланы ул иң тәүҙә. Бартер - тауарға тауар алмаштырыу. Уларҙың ҡиммәттәре бер тигеҙ булыуы мотлаҡ. Урыҫтар әйтмешләй, шило на мыло, түгел. Шулай йәшәнек, сөнки бөтә ҡиммәттәр үҙгәргән мәл ине. Шул иҫәптән, рухи ҡиммәттәр ҙә. Бөгөн хәлдәр нисек һуң? Рухи кимәлдә идеяларыбыҙ менән бүлешәбеҙме бер-беребеҙ менән, әллә алма алмаштырышабыҙмы?

**Радик ӨМӨТҠУЖИН.**

***✓ Юрматыларға ҡараған Айыусы һәм Аҙнай, бөрйәндәрҙең Үтәкәй, ҡыпсаҡтарҙың Йомағужа, Ҡыпсаҡ-Асҡар, әйеләрҙең Һултай, әйле ҡаратаулыларының Ҡәҙербәк, Иҫке Ҡаратаулы ауылдарында таҙлар нәҫелдәре бар.***



*ЫРЫУЫҢ КЕМ?*

# ТАҘЛАР - ТАРИХ АТАҺЫ ГЕРОДОТ АРГИППЕЙҘАРЫ ВАРИҪТАРЫ

Иң боронғоларҙан һаналған бөрйәндәр составында ла аптал аймағы булыуы билдәле. Боронғо булғар төркиҙәре составында ла "абдал" исемле нәҫел тармағы булған, ошо хаҡта Урта быуаттарға ҡараған Сирия сығанаҡтарында мәғлүмәт булыуын тикшереүсе А.Н. Баскаков иғтибарға алған. Ҡаҙаҡтарҙың Кесе Жузында йәшәгән таҙларҙың да абдал, чарги, жастабан исемле ырыу тармаҡтары була. Мангышлак ярымутрауында төркмән абдалдары йәшәй, улар ҡаҙаҡ абдалдары менән бәйләнештә була. Башҡорттарҙың таҙлар һәм бөрйән ырыуҙарына ҡараған абдалдар ҙа уларға ҡәрҙәш булып сыға. V быуатта ҡеүәтле дәүләттәре булған эфталиттар уларҙың ата-бабалары булған. Фарсы телле ҙур алан ҡәбиләләре составында ла таҙлар ырыуы була. Эфталиттар дәүләте төрҡөттәр тарафынан яулап алынғас, урындағы фарсы телле ҡәбиләләр төркиләшә башлай.

Этник сығышында көнсығыш фарсы субстраты булған хәлдә лә, таҙлар, бөрйәндәр кеүек, иң боронғо төрки ҡәүемдәренән була. Байтаҡ ҡына тикшеренеүселәр ошо фекерҙе раҫлаусы тарихи мәғлүмәттәр булыуы хаҡында яҙа. Мәҫәлән, Алтай халыҡтары тарихы буйынса хеҙмәттәре менән билдәле булған этнограф Л.П. Потапов алтай тастары һәм телеуттар (һун сығышлы боронғо төркиҙәр) араһында этник яҡынлыҡ булыуы хаҡында яҙа. Н.В. Екеев "Алтай этногониаһы" тигән хеҙмәтендә, этнографик ялан материалдарына таянып, "ете тас" исемле алтай сёогоның (нәҫел-һөйәгенең) таҙлар берләшмәһенең айырым бер төркөмөнән тороп ҡалыуын фаразлай. Уныңса, таҙлар боронғо уғыҙҙарҙың уң ҡанатына ингән ҡәүем булған, уларҙың онгоны (ҡошо) аҡ башлы бөркөт - таҙ, тип аталған була. Уғыҙҙарҙың заманында телес (төйәләҫ) ҡәбиләләре берләшмәһендә баш ҡәүем статусында булыу мөмкинлеге лә фаразлана. VIII быуатта уғыҙҙар көнбайышҡа табан күсеп китә, уларҙың ҙүҙҙәренең тәү төйәгендә ҡалғандары һуңынан монголдар составына ҡушыла. Үҙәк Азияла, алтайҙарҙа телеут, теленгит этнонимын йөрөткән ҡәүемдәр күпселектә тәшкил итә.

XI-XII быуаттарҙа Азия далаларын биләп йәшәгән Дәште Ҡыпсаҡ территорияһында, ҡыпсаҡтар конфедерацияһы составында ла таҙларҙың ата-бабалары була. Ҡаҙаҡтарҙың Кесе жузында, шулай уҡ ҡырғыҙ ҡәбиләләре иҫәбендә таҙ исемле этник төркөмдәр, ә үзбәк ҡыпсаҡтарының тоз ырыуы булыуы ошо хаҡта һөйләй.

Ҡырғыҙ тикшеренеүселәре тас ҡәбиләһенең дөйөм ҡырғыҙ тарихында мөһим урын биләүен билдәләй. Күрәһең, таҙларҙың башҡа бер ҡырғыҙ ырыуҙары менән этник бәйләнеше уларҙың Алтай территорияһында йәшәгән осоро менән бәйле була. Байтаҡ ҡына ҡырғыҙ ҡәбиләләренең икенсе атамаһында тас (таз, таш) этнонимы ла сағылыш тапҡан: саруу (кезектас), жокесек (ташкесек), сарыбагыш (тас), солто (төрт тас), сайак (баштаз) һ.б. Тикшереүсе Н.В. Екеев фекеренсә, таҙлар (тастар) Алтайға көнбайыш тарафтарҙан, Иртыш буйынан күсеп килгән. Уныңса, был XVI быуат аҙағында Себер ханлығының тар-мар ителеүе менән бәйле була. Таҙларҙың бер өлөшө ҙүҙҙәренең үтә боронғо төйәге булған Алтай тауҙары тарафына йүнәлһә, икенселәре Көньяҡ Уралға күсенеүҙе өҫтөн күргән. Ә XII быуатҡа тиклемге дәүерҙә уғыҙ-ҡыпсаҡ конфедерацияһы ҡәбиләләре менән этник бәйләнештә йәшәгән күп һанлы таҙ ырыуҙары Көнбайыш Себер территорияһында көн итә.

"Монголдарҙың йәшерен тарихы" әҫәрендә бәйән ителгәнсә, Ҡуян йылында (1207) монгол сардары Чжочи (Джучи) Уң ҡул ғәскәре менән Урман халыҡтарына ҡаршы походҡа ебәрелә. Монгол ханы власына барса Урман халыҡтары буйһондорола, улар иҫәбендә Шибир, Кесдиин, Байт, Тухас, Тешек, Тоелес, Тас һәм Бачжиги исемле ҡәүемдәр һаналып үтелә. Әлбиттә, Монгол иле төйәгенән иң алыҫта йәшәгән Бачжигиларҙың башҡорттар булыуына шик юҡ, сөнки был осорҙа "баш" һүҙе менән башланған башҡа бер халыҡ та булмай. Әммә уныһы ла бик мөһим: XIII быуат башында таҙлар (Тас) һәм төйәләҫтәр (Тоелес) башҡорттарға территориаль яҡтан йәнәш булған ерҙәрҙә йәшәгән була. Монгол походтары осоронда таҙлар элекке Дәште Ҡыпсаҡ далаларының төньяҡ зонаһында көн итә. Тимәк, Алтын Урҙа осоронда (XIII - XV б.б.) таҙлар Эмба һәм Яйыҡ йылғалары арауығында, урманлы-далалы зонала йәшәй, монгол хандарына буйһона.

1224 йылда Сыңғыҙ хан үҙ империяһын йорт-олоҫтарға бүлә. Уның оло улы Джучи олоҫона бик ҙур территория бирелә: көньяҡта карлук йабғуларының Ҡаялығынан һәм Хорезмдан - бынан төньяҡ йүнәлештәге Көньяҡ Уралғаса, көнсығышта - Иртыштан көнбайышҡа табан - Волга буйынаса. Ул саҡтағы Башҡорт иле ырыуҙары ла, таҙлар ҙа Джучи йортона буйһона. Әйтергә кәрәк, боронғо риүәйәттәргә ярашлы, башҡорт ырыуҙары Сыңғыҙ хандың үҙенән йәшәгән ерҙәренә аҫабалыҡ хоҡуғын алып, уның власын таный. Сыңғыҙ хан полководецтарының береһе - Майҡы бей (Байку нойон) төмәнендә башҡорт яугирҙары ла була. Таҙлар ҙа Батый хан ғәскәре составында Европа илдәренә ойошторолған походтарҙа ҡатнаша.

Күрәһең, таҙларҙың табындар, башҡа бер башҡорт ырыуҙары менән тығыҙ бәйләнештә йәшәүе, уларҙың Нуғай һәм Токта (Тохта) хандар низағында ҡатнашып, һуңғыһының үс алыуынан ҡасып, XIV быуат башында Көньяҡ Уралдың көнсығыш яғында йәшәгән әйеләр, табындар, теләүҙәр территорияһына күсеп китеүенә мөмкинлек биргәндер. Таҙларҙың тарихи хәтерендә Майҡы бей ҡулы аҫтында шул уҡ табындар менән яуҙаш булыуҙары хаҡындағы хикәйәттәр оҙаҡ һаҡлана. Табындар, уларҙың бер тармағы булған ирәктеләр ҙә таҙлар менән бәйләнештәрен өҙмәй. Ирәктеләр шәжәрәһе буйынса Майҡы бей Ҡара Табындың атаһы була. Ҡара Табындың улы Әхмәт шәйех, уның улы Абдал. Абдал бей атаһының үлеменән һуң үҙҙәренә ҡәрҙәш булған көҙәй, ғәйнә, елдәк, таҙлар, гәрәй, уран, ҡайпан ырыуҙары йәшәгән төбәктәр буйлап йөрөп ҡайта. Ошо башҡорт ырыуҙары шәжәрәләрендә Абдал бей вариҫы Иҫән хан ырыу башы сифатында иҫкә алына. Ә таҙлар ырыуы составында абдал тармағы булыуы ла уларҙың табындар менән туғандаш булыуына ишара.

Тарихи Башҡортостан ерлегендә яңы төйәктәрен тапҡан таҙлар, ике быуат самаһы ваҡыт үҙыуға ҡарамаҫтан, табын ырыуына ҡараған башҡорттарҙы үҙ итә. XV быуаттың 70-се йылдарында тарҡалыу процестары кисергән Алтын Урҙа олоҫтары хакимдары - Үзбәк ханы Мөхәммәт Шейбани (Шибак) менән Себер ханы Сайид Ибраһим (Ибак) араһында власть өсөн низағ ҡуба. Көнсығыш табын башҡорттары юлбашсылары Әсәди һәм Шәкәрле бейҙәр Шейбани ханды яҡлап сыға. Себер ханы, хыянатта ғәйепләп, уларҙы үлтерергә бойора. Урал аръяғында йәшәгән табындар Танып буйына, таҙлар биләмәләренә ҡасып китергә мәжбүр була. Таҙлар уларға ошонда йәшәп китергә рөхсәт итә, был танып тармағы булған ирәктеләр шәжәрәһендә сағылыш тапҡан: "Бер заман Иҫән баба урманда таҙ ҡәбиләһе аҡһаҡалы Таҙ бабаны осрата һәм уның менән дуҫлаша. Таҙ баба Иҫән бабаны, Таныпты мәңгелек төйәк итеп, үҙе менән бергә һунар итергә, балыҡ тоторға саҡыра. Иҫән баба риза була, уның улдары Таҙ бабаның ҡыҙҙарына өйләнә."

Хәҙерге осорҙа, Танып таҙларынан тыш, башҡа бер башҡорт ырыуҙары составында ла таҙ аймаҡтары барлығы билдәле. Юрматыларға ҡараған Айыусы һәм Аҙнай, бөрйәндәрҙең Үтәкәй, ҡыпсаҡтарҙың Йомағужа, Ҡыпсаҡ-Асҡар, әйеләрҙең Һултай, әйле ҡаратаулыларының Ҡәҙербәк, Иҫке Ҡаратаулы ауылдарында таҙлар нәҫелдәре бар. Көҙәйҙәр, дыуандар араһында "таҙ" этнонимы XIV быуаттан башлап таралып китә. Ҡырмыҫҡалы районының Таҙлар (Мырҙа), Төбәк Таҙлары (дыуан-табындар), Ейәнсуралағы Таҙлар (үҫәргәндәр) ауылдары исемдәренең таҙлар башҡорттары менән бәйле булыуы хаҡында фараз итеп була.



**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**

**(Аҙағы. Башы 48-49-сы һандарҙа).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Мәңгелеккә рейд: бер туғандай үтәнеләр изге Ватан ҡушҡанды

Гвардия капитаны Абдулла Файзыл улы Әхмәзиев, 1908 йылда Ҡырмыҫҡалы ауылында тыуған. Рейдтан иҫән-һау сыға. 1943-1944 йылдарҙа 58-се гвардия атлы полкы командиры урынбаҫары вазифаһында яуҙарҙа ҡатнаша. Александр Невский (1943), I дәрәжәләге Ватан һуғышы (1943) ордендарына, "Хәрби хеҙмәттәре өсөн" (1944) миҙалына лайыҡ була. Үлеме хаҡында мәғлүмәт юҡ.

Гвардия лейтенанты Кәшфи Гинд (Ринд?) улы Шәрипов, 1910 йылғы, хәрби документтарҙа ошолай яҙылған (бәлки, атаһының исеме Ғиндулла булғандыр). Дүртөйлө районының Өҫпили (Учпили тип теркәлгән) ауылында тыуған. Хәрби хеҙмәткә ул саҡтағы Молотов өлкәһенең (хәҙерге Пермь крайы) Барҙым район хәрби комиссариаты тарафынан алынған. Башҡорт атлы дивизияһында 294-се полктың 3-сө эскадроны командиры урынбаҫары була. 1942 йылда уҡ Ҡыҙыл Йондоҙ орденына лайыҡ була. Үлеме хаҡында мәғлүмәт билдәһеҙ.

Гвардия полковнигы Черников Герасим Антонович, 1899 йылғы, Ставрополь крайының Пелагиада ауылында тыуған. 1941 йылдың декабренән, 112-се Башҡорт атлы дивизияһы ойошторолоу менән, дивизия штабы начальнигы урынбаҫары вазифаһына тәғәйенләнә. Рейдтан имен-аман сыға. 1944 йылдың октябрь-ноябрь айҙарында 58-се гвардия атлы полкы командиры була. Ике тапҡыр Ленин ордены (1944, 1945), ике Ҡыҙыл Байраҡ ордены (1943, 1944), I һәм II дәрәжәләге Ватан һуғышы ордендары (1943, 1944), "Сталинградты обороналаған өсөн" миҙалы (1945) менән бүләкләнгән. Үлгән йылы билдәһеҙ.

Мөлки Байрамов, гвардия өлкән лейтенанты, Советтар Союзы Геройы (1944), 1909 йылда Төркмәнстандың Мары вилайәте Мөлөк ауылында тыуған. 1935 йылда Ташкент кавалерия училищеһын тамамлай, 60-сы гвардия атлы полкының 2-се эскадроны командиры вазифаһында хеҙмәт итә. Рейдтан иҫән-һау сыға. 1944 йылдың сентябрь аҙаҡтарында Белоруссияның Нивки ауылы районында үҙенең эскадроны менән Днепрҙы кисеп сыға, немецтарҙың 70-ләгән һалдатын юҡ итеп, башҡа эскадрондар Днепрҙың уң ярына сыҡҡанға тиклем дошман атакаларын кире ҡаға. Ленин ордены (1944), III дәрәжәләге Богдан Хмельницкий ордены (1944), Ҡыҙыл Йондоҙ ордены һәм "Хәрби хеҙмәттәре өсөн" миҙалы (1944), "1941 - 1945 йылдарҙа Бөйөк Ватан һуғышында Германияны еңгән өсөн" миҙалы менән бүләкләнгән. 1965 йылда тыуған ерендә вафат була.

Әсғәт Шакир улы Искәндәров, лейтенант, 1915 йылда Учалы районының Йәнгүҙә ауылында тыуған, Ташкент хәрби пехота училищеһын тамамлаған, Ҡыҙыл Армияла 1936 йылдан хеҙмәт итә. 112-се Башҡорт атлы дивизияһының 313-сө атлы полкында пулемет эскадроны командиры була. 1942 йылда "Батырлыҡ өсөн" миҙалына лайыҡ булған. Үлеме хаҡында мәғлүмәт юҡ.

Пулеметсылар Ғәзизйән Ҡотдосов һәм Кәбир Киниәйбулатов хаҡында башҡа мәғлүмәттәр әлегә билдәһеҙ.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

✓ Бөтә уҡытыусыларҙың башҡортса һөйләшеүе, уҡыусылар араһында рус телендә аралашыуҙар таралған булыуға ҡарамаҫтан, барыһы ла башҡортлоғо менән ғорурланыуы, уны төрлөсә күрһәтергә тырышыуы ғәжәпләндерҙе.



# ТУҒАН ТЕЛЕМ

**14 декабрҙә республикала Башҡорт теле көнө билдәләнә. Ошо уңайҙан баш ҡалала урынлашҡан алдынғы белем усаҡтарыбыҙҙың уҡыусылары менән туған тел, уның яҙмышы һәм әһәмиәте тураһында әңгәмәләштек. Һөйләшеүҙә Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатынан Илүзә Янбаева, Гөлсинә Йомағужина, Ирхан Хисаметдинов һәм Өфөнөң Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһынан Дилә Йәһүҙина менән Арыҫлан Әбдрәхимов ҡатнашты.**

**Барығыҙ ҙа туған башҡорт телен яҡшы белгәндәр йыйылғанһығыҙ бында. Һеҙҙе туған телгә, тыуған мөхиткә йәлеп итеүсе тәүге "уҡытыусыларығыҙ" кемдәр булды?**

**Илүзә:** Мин үҙем Ейәнсура районы Башҡорт Үргене ауылынан. Беҙҙең ихатала ике өй урынлашҡайны: береһендә беҙҙең ғаилә йәшәй, икенсеһендә - олатай-өләсәйем. Шуға ике ағайым да, мин дә бәләкәйҙән олатай-өләсәй тәрбиәһен алып үҫтек. Хәҙер баш ҡалала уҡығас, йышыраҡ телефондан ғына һөйләшеп торабыҙ һәм яңылыш урыҫ һүҙҙәрен ҡыҫтырып ебәрһәм, олатай: "Ҡыҙым, һин рус теленә күсеп бараһыңмы әллә?" - тип иҫкәртә һала. Уның борсолоуын аңлап, телмәремә гел иғтибар итәм. Ғөмүмән алғанда, мин өйҙә лә, балалар баҡсаһында ла, мәктәптә лә башҡорт мөхитендә үҫтем. Хатта ауыл мәктәбендә уҡыу предметтары ла башҡортса алып барыла торғайны, мәҫәлән, физиканы 7-се класта башҡортса китап буйынса уҡыныҡ. Үҙем күптән хыялланған Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатына уҡырға инергә лә башҡорт телен яҡшы белеүем ярҙам иткәндер, тим.

**Гөлсинә:** Сығышым менән Белорет районы Үткәл ауылынан булам. Минең дә туған телемде яҡшы белеүем ғаиләмдән килә, атай-әсәйем һәм олатай-өләсәйем был йәһәттән тәүге уҡытыусыларым. Әсәйем үҙе башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, ул беҙҙә - миндә һәм һеңле-ҡустымда, башҡорт теленә һөйөүҙе бәләкәйҙән тәрбиәләп үҫтерҙе. Беҙ башҡортса гәзит-журналдар алдырабыҙ, бергәләп төрлө китаптар уҡыу ғәҙәтебеҙ бар, башҡортса ғына аралашабыҙ. Шуға гимназия-интернатҡа 10-сы класҡа уҡырға килгәс, күпселек дәрестәрҙең русса алып барылыуына саҡ күнектем. Шунан тәүге осорҙа үҙем дә һиҙмәҫтән каникулдарға ҡайтҡанда русса ҡатыштырып һөйләй башланым - әсәйем һәм хатта һеңлем дә шелтәләне. Хәҙер телмәремә иғтибарлы булырға тырышам.

**Ирхан:** Әлеге көндә мин гимназия-интернаттың 9-сы синыфында уҡыйым, ә сығышым менән Бөрйән районы Нәби ауылынанмын. Дөрөҫөн әйткәндә, Бөрйәндә бер урыҫ һүҙен дә ишетермен тимә, бөтән халыҡ тик башҡортса ғына һөйләшә. Быға мин бик шатмын һәм беҙҙең ғаиләлә туған тел һағында торған әсәйемә рәхмәтлемен. Ул үҙе башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булараҡ, башҡортса һүҙҙәрҙең мәғәнәһен дөрөҫ аңлауҙы, урынлы ҡулланыуҙы, дөрөҫ әйтеүҙе бер ваҡытта ла күҙ уңынан ысҡындырмай. Шуныһы ҡыҙыҡ, туған телемдең уғата бай булыуын бында уҡырға килгәс тағы ла нығыраҡ аңланым.

**Дилә:** Минең дә туған телемә һөйөүем - ғаиләмдән һәм ауылдан килә. Сөнки баш ҡалағы Республика инженер лицей-интернатына, ә һуңынан Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһына уҡырға килгәнсе мин Әбйәлил районының Үтәгән ауылында йәшәнем. Бала саҡ хәтирәләренән әсәйемдең бишек йырҙарын көйләүе, башҡорт халыҡ әкиәттәрен һөйләүе хәтерҙә ҡалған. Ә 2-се класта уҡығанда уҡытыусыбыҙ миңә "Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосын ятларға тәҡдим итте. Халҡымдың ауыҙ-тел ижады менән шулай таныштым һәм күңелемдә мәңгелеккә һөйөү яралды, оҙаҡ йылдар ятланым, әле лә хәтерҙә яңыртып алам һәм ундағы аҡылға таянырға тырышам. Әйткәндәй, мәктәптә айырым предметтарҙы русса өйрәнгәнгә күрә, төшөнөп етмәгәнемде атайымдан русса һорайһам, ул һәр ваҡыт башҡортса аңлата. Шуға беҙ көндәлек темалар буйынса ғына түгел, үйфекерҙәр белдергәндә лә туған телдә һөйләшәбеҙ.

**Арыҫлан:** Мин - баш ҡала малайы. Бәләкәйҙән рус телле мөхиттә үҫтем һәм, ҡыҙғаныска күрә, фекерҙәремде бындағы тиҫтерҙәрем кеүек иркен итеп туған телемдә белдереүе ауырғараҡ тура килә. Өйҙә лә беҙ күберәк русса һөйләшәбеҙ, ләкин атай-әсәйем минең киләсәгемде хәстәрләп, башҡорт гимназияһына уҡырға бирҙе. Гимназияға килгәнсе башҡорт телендә һөйләшә белеү үҙем өсөн мөһим булыуын уйламаным да, ә атайәсәй аңлаған. Тәүҙә ауылдағы олатай-өләсәйем янында булғанда ғына башҡортса һупалаштырып йөрөй торғайным, хәҙер 11 йыл гимназияла уҡыу дәүерендә яраһыҡ уҡ туған телемде өйрәндем. Һәр хәлдә, барыһын да аңлайым һәм уңайһыҙлыҡ кисермәйем, туған телдә күберәк аралашырға тырышам.

**Үҙегеҙ уҡыған белем усаҡтарындағы башҡорт мөхитенә лә байҡау яһайыҡ әле...**

**Илүзә:** Беҙҙең 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында, бөтәһе лә башҡортса һөйләшергә тейеш, тигән яҙылмаған ҡанун бар. Бының менән барыбыҙ ҙа килешәбеҙ, шуға бер-беребеҙгә туған тел нескәлектәрен өйрәнеүҙә һәр саҡ ярҙам итергә әҙербеҙ. 8-се класҡа уҡырға килгәндә бер нисә класташыбыҙ телдә яҡшы белмәй ине. Шулай ҙа тәүҙә барыбыҙ ҙа башҡортса ғына һөйләшә инек, ләкин бер мәл аңламағандар арҡаһында руссаға күсеп барыуыбыҙҙы һиҙеп ҡалдыҡ. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыбыҙ Альбина Хәсән ҡыҙы Кайбышеваның дәрестәрҙе бик ҡыҙыҡлы итеп алып барыуы, уйындар, төрлө конкурс-ярыштарҙа ҡатнашырға йәлеп итеүе ярҙам итте шул саҡ. Мәҫәлән, "Башҡорт теле көнө" тигән уйыныбыҙ бар, рус һүҙе әйтеүсегә штраф һалына. Үҙем етенсе кластан башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төрлө кимәлдәге олимпиадаларҙа ҡатнашып, призлы урындар яулап торам. Быйыл да уға әҙерлек башланды, ошо көндәрҙә Башҡорт дәүләт университетының Башҡорт теле көнөнә арнап уҙғарған олимпиадаһында ла Гөлсинә менән ҡатнаштыҡ, һөҙөмтәләрен көтәбеҙ. Тағы ла гимназияла "Аҡ ҡауырһын" тигән ижади түңәрәк ойошторола һәм Гөлсинә менән мин унда мөхәррирҙәр. Беҙ "Интернатым - пар ҡанатым" гәзитенә гимназистарҙың шиғырҙарын, иншаларын, мәҡәләләрен етәксебеҙгә туплап бирәбеҙ, үҙебеҙ ҙә ҡәләм тирбәтәбеҙ.

**Гөлсинә:** Эйе, гимназиябыҙҙа башҡорт теле төп урында тора. Барлыҡ саралар ҙа башҡортса ойошторола, телгә һәм башҡорт халҡының тарихына, мәҙәниәтенә, сәнғәтенә ҡағылышлы конкурстар үтә, осрашыуҙар йыш булып тора. Бигерәк тә башҡорт яҙыусылары һәм шағирҙары менән бик фәһемле әңгәмәләшкәнебеҙ бар. Тәү сиратта туған телемде өйрәтеп үҫтергән әсәйемә, был белемде киңәйткән, яңы мөмкинлектәр асҡан гимназияма һәм уҡытыусыларыма ла сикһеҙ рәхмәтлемен. Был тойғоно һәр гимназист кисерәләр, тип уйлайым. Гимназияла башҡорт теле һәр саҡ йәшәйәсәгенә, Рәми Ғариповтың эше дауам итәсәгенә шик юҡ.

**Дилә:** Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһына гуманитар йүнәлештә белем алыр өсөн 10-сы класҡа уҡырға күстем һәм бындағы мөхит хайран итте. Бөтә уҡытыусыларҙың башҡортса һөйләшеүе, уҡыусылар араһында рус телендә аралашыуҙар таралған булыуға ҡарамаҫтан, барыһы ла башҡортлоғо менән ғорурланыуы, уны төрлөсә күрһәтергә тырышыуы, туған телдә үткән бихисап сараларҙа әүҙем ҡатнашыуы ғәжәпләндерҙе. Ошо мөхит, билдәле шәхестәр менән даими осрашыуҙарҙан һуң туған телгә һөйөү яңынан ҡабынып киткәндәй.

**Арыҫлан:** Мәктәптән тыш сараларҙа ла башҡортса аралашып йөрөргә күнеккәнбеҙ. Бына мин гимназияның волейбол һәм баскетбол буйынса командалары составында уйнайым һәм беҙ йыш ҡына ярыштарҙа ҡатнашабыҙ. Бигерәк тә Өфөнөң башҡорт мәктәптәре араһында уҙған ярыштарҙа тиҫтерҙәр менән иркенләп туған телдә аралашып ҡайтабыҙ. Башҡорт булыуым менән һәм Салауат Юлаев кеүек милли батырыбыҙ булыуына ғорурланам. Сит илдәрҙең уйлап табылған супер-геройҙарынан айырмалы рәүештә, ҡасандыр йәшәгән һәм тарихыбыҙҙа юйылмаҫ эҙ ҡалдырған шәхес, милли рухтың тере сағылышы ул. Бына был хаҡта, ғөмүмән, үҙебеҙҙең халыҡҡа ҡағылышлы тарихты балаларға күберәк һөйләп-күрһәтеп, аңлатып үҫтерһендәр ине. Беҙ - милләт киләсәге бит.

**Геройҙар тураһында һүҙ ҡуҙғатҡас, арҙаҡлы башҡорттарҙан кемдәрҙе өлгө итеүегеҙ тураһында ла белге килә...**

**Илүзә:** Шөкөр, беҙҙең бындай күренекле шәхестәребеҙ бик күп һәм шуларҙың береһе - Рәми Ғарипов. Гимназиябыҙ уның исемен ғорур йөрөтә. Туған теле, халҡы, иле өсөн бар ғүмерен бирергә әҙер торған шәхес. "Тел бөтһә - ил бөтә" тигән юлдары ла бар яҙмаларында, мин был хаҡ һүҙҙәрҙең мәғәнәһе тураһында йыш уйланам. Шулай уҡ китап геройҙарым да бар минең. Әле яңыраҡ Мостай Кәримдең "Ташлама утты, Прометей!" трагедияһын уҡып бөтөп, шул әҫәр, Прометей образы йоғонтоһонда йөрөйөм.

**Ирхан:** Минең яҡташтарымдың, билдәле фольклорсылар Мөхтәр Сәғитов менән Әхмәт Сөләймәновтың халҡыбыҙҙың һүҙ ынйыларын туплау, мәңгүмәттәрҙе киләсәк быуынға еткереү һәм билдәле итеү өлкәһендәге хеҙмәттәре баһалап бөткөһөҙ. Өлгө алырлыҡ бындай шәхестәр булыуы оло ғорурлыҡ бит.



## үҙ халҡыма

**Дилә:** Быйыл йәйге каникулдарҙа Әхмәт-Зәки Вәлидиҙең "Хәтирәләр" китабын уҡыным. Йәйләп, уйлап уҡый торған китап. Бына шул яҙмаларҙан 20-се быуат башында йәшәгән ата-бабаларыбыҙҙың автономия яуларға күтәрелеүе, илдең ҡыҙылдар һәм аҡтар булып икегә бүленген сағында "Беҙ - башҡорттар" тип оран ташлауҙары, идеялары өсөн көрәшеүҙәре һоҡландыра. Һәр һынылышлы осорҙа дөйөм мәнфәғәтте ҡайғыртҡан шәхестәребеҙ ҡалҡып сыҡҡан, бөгөн матур Башҡортостан Республикаһында йәшәүебеҙ өсөн рәхмәт һүҙен уларға әйтергә тейешбеҙ.

**Ғаиләлә, мәктәптә лә башҡортса һөйләшеп йөрөйһөгөҙ, афариндар! Ә урамда башҡортса һөйләшергә уңайһыҙланмайһығыҙмы?**

**Илүзә:** Һис юҡ! Гимназияның эргәһендә генә бер баҙар бар, шунда сығып әйләнгеләйбеҙ. Ҡыҙҙар менән башҡортса һөйләшәбеҙ һәм күптәрҙең беҙҙе хуплап ҡарауын аңғарабыҙ. Оло иней-олатайҙар ҡайһы саҡ хатта арҡабыҙҙан һөйөп, афариндар тип, маҡтап та китәләр әле.

**Арыҫлан:** Ҡайҙа ғына йөрөргә лә, туған телде белгән кеше менән үҙебеҙсә һөйләшергә тырышам. Әйткәйнем инде, йыш ҡына спорт ярыштарына йөрөргә тура килә. Бына шундағы бер хәл иҫтә ҡалған. Волейбол буйынса ярышта ҡаршы командалағы бер малай беҙҙең башҡорт мәктәбенән булыуыбыҙҙы күреп, үҙ-ара башҡортса аралашыуыбыҙҙы ишетеп, насар һүҙҙәр менән үсекләшеп тора ине. Иптәштәр менән ихтыярыбыҙҙы йыйып, тегеләрҙе ендек тә ташланыҡ! Тик үсекләшмәнек, йылмайып ҡына ҡуйҙыҡ.

**Ирхан:** Башҡорт телендә һөйләшеүҙең бер ниндәй ҙә ояты юҡ, киреһенсә, был бик модалы. Сөнки үҙен башҡорт тип иҫәпләгән кеше үҙ туған телендә фекерләй һәм һөйләшә белергә тейеш.

**Йәш быуынды, үҙегеҙ әйтмешләй, модалы итеп үстереү өсөн ниндәй саралар күрергә кәрәк? Һеҙгә форсат һәм мөмкинлек бирелһә, был йәһәттән ниндәй эштәр атҡарыр инегеҙ?**

**Гөлсинә:** Хәҙерге балалар күберәк Ютуб каналында видеолар ҡарарға ярата, унда руссаһы ла, инглизсәһе лә етерлек. Бәлки, башҡортса ла шундайыраҡ видеолар төшөрөргә кәрәктер? Тағы ла балалар онлайн-уйындар ярата, үҙебеҙҙең башҡорт батырҙары ҡатнашлығында эшләнгәндәре булһа ла теләп уйнарҙар һәм туған тел, мәҙәниәт, хатта тарих менән дә ҡыҙыҡһынып китерҙәр ине. Башҡорт һүҙҙәрен өйрәнеүгә ҡоролған йемендә кадрға инә. Ошондай заманса күренештәр ҙә туған телебеҙҙе, мәҙәниәтте модалы итеүгә булышлыҡ итәләр. Әммә, ҡыҙғанысҡа күрә, йәш йырсылар элек популяр булған берәй башҡорт йырының көйөн үҙгәртеп, ниндәйҙер "тренд"тар төшөрөп һалһа, өлкәндәр йыш ҡына үҙ комментарийҙарында ҙур ризаһыҙлыҡ, ҡәнәғәтһеҙлек белдереп, тәнҡитләп, насар итеп яҙа башлайҙар. Яңыраҡ ҡына "Өфө йүкәләре" тигән йырҙың көйөн үҙгәртеп һалғайнылар, шул уҡ хәл. Ә мин был йырҙы шулай яңыса башҡарыуҙарын ишеткәс кенә тыңлай башланым, быға тиклем, нишләптер, һүҙҙәренә лә иғтибар иткәнем булмаған...

**Ирхан:** Бер хәл тураһында һөйләп китәйем әле. Тикшереүҙе үткәргәйнем һәм дуҫтарым араһында "Нишләп башҡорт теленән имтихан тапшырмайһығыҙ?" тигән һорауға яуап алдым. Күбеһе яуапты шундай һорау менән ҡайтарҙы: "Башҡорт теленән имтихан һөҙөмтәһенең ниндәй файҙаһы бар һуң?" Файҙаһы бик ҙур. Мәҫәлән, быйыл башҡорт теленән БДИ һөҙөмтәләренә республика вуздарында бер нисә өҫтәмә балл бирелде. Быны гәзиткә индерһәк, телде белергә теләүселәр һаны ла артыр ине, бәлки.

**Арыҫлан:** Бөтәһе лә Хабиб Нурмагомедовтың асыҡ миҫалын күрҙе. Ул донъя кимәлендә танылыу яулағанға тиклем ер йөҙөндә уның тыуған төйәге Дағстан, туған теле, милләте тураһында белеүселәр һаны артыҡ күп булмағандыр ҙа. Шуның Салауат батырҙарҙы манга геройы тип кенә уйлаһалар?

**Дилә:** Меңәр йылдар һаҡланған эпос ниндәйҙер комикс сығарыуҙан асылын үҙгәртеп китмәҫ. Былай әҫәрҙәрҙә һүрәтләнгәндәр нигеҙендә ысын тарих ятһа, киреһенсә, кешеләрҙең ҡыҙыҡһыныуы артып, ысынбарлыҡта булғанын укыпбелергә ынтылыш тыуыр кеүек. Ҡайҙалыр саңланып ятҡансы, яңы форматта популярлыҡ яуларға мөмкин. Шуныһы ла мөһим: комикста күберәк һүрәттәр төшөрөлә, унда һүҙҙәр аҙ яҙыла һәм кемдер телде белмәһә лә, китаптың мәғәнәһен аңлай. Ә ябай бер нисә һүҙҙе тиҙ генә ятлап та алырға була.

**Ирхан:** Тарихы бөтөнләйгә боҙолмаһа, насар интерпретацияла булмаһа ғына шундай форматтарҙа эшләүҙәренә ҡаршы булмаҫҡа мөмкин, әлбиттә. Үҙгәртеп күрһәтелһә, күптәр рәсми ҡағыҙҙарҙы аҡтарып ултырмаясаҡ. Көлкөгә ҡалдырып ҡуймаһындар өсөн үҙебеҙҙең тарихты һәм телде яҡшы белгән кеше ижад итергә тейештәр инде бындай заманса әҫәрҙәрҙе.

**Тиҫтерҙәрегеҙгә әйтергә теләгән фекерҙәрегеҙ ниндәй булыр?**

**Дилә:** Ҡайһы бер йәш милләттәштәр, бигерәк тә ҡалала үҫкәндәре, башҡорт булыуҙары менән сикһеҙ ғорурланһа ла, туған телдә яҡшы һөйләшә алмауынан тартыналар. Шундай йәштәргә "Ҡурҡмағыҙ!" тип әйткем килә. Сөнки көндәлек аралашҡан саҡта бер кем дә уларҙан башҡорт теленән имтихан

# МЕНӘН...

## хеҙмәт итәсәкмен!

ҡушымталар, сағыу йәнһүрәттәр, күберәк йырҙар кәрәк. Миңә "Тамыр" телеканалы төшөргән башҡортса сериалдар оҡшай. Әле "Бирешмә" сериалының ике сезонын да ҡараным, "Ышан" тигән яңыһын көтәм.

**Дилә:** Ә мин ул "Ышан" сериалында үҙем төштөм! Бына шул сериалдар ҙа телде модалы итә. Үҫмерҙәр кинолағы йәштәштәренә оҡшарға, тиңләшергә тырыша. Етмәһә, беҙҙең "Ышан" сериалында башҡорт халыҡ ижады, мәҙәниәте, тәрбиә-тәртип йәһәтенән дә фәһем һалынған. Ысынлап та, балалар өсөн йәнһүрәттәрҙе барыһы ла уның менән "сирләрлек", культовый итергә кәрәк. Ниндәй милләттән булыуына ҡарамаҫтан, нәҡ башҡорт халыҡ әкиәте батырҙарына тиңләшергә теләрлек булһа, беҙҙең тел һәм мәҙәниәт, тарих та бар донъяға таныулы буласаҡ.

**Илүзә:** Социаль селтәрҙәр бөгөн тормошоболоҙҙоң мөһим өлөшөн биләй. Унда башҡорт блогерҙары күбәйә, "Тик-ток"та ла башҡортса роликтар, "тренд"тар сыға башланы. Мәҫәлән, тәүҙә көндәлек кейемдә торған ҡыҙ ҡапыл башҡорт милли кейемендә кадрға инә. Ошондай ... 

өсөн һәр башҡорт үҙе һайлаған өлкәлә билдәлелек яуларға, үҙен башҡорт тип танытырға, Рәсәйҙе һәм Кесе Ватанын данларға, туған телендә һөйләшергә тейеш. Бынан тыш, ҡуйылған һорауға яуап итеп, шуны әйтер инем: бөгөн актуаль булған нәмәләрҙән сығып эш итергә кәрәк. Мәҫәлән, әле башҡорт һәм татар йырҙарының көйөн заманса ауҙарған Zaki Scream тигән йәш кеше билдәлелек яулай бара. Уны башҡорттар йә татарҙар ғына тыңламай, шул музыканы үҙ иткән башҡа милләт вәкилдәре лә бар һәм кем белә, бәлки, йырҙың һүҙҙәренең мәғәнәһен аңларға теләп, телдәргә, йәлап мәҙәниәтебеҙгә лә ҡыҙыҡһыныуҙар артыр. Тағы ла бөгөн тиҫтерҙәрем араһында манга, анимелар бик популяр. Улар Салауат Юлаев, йә Урал батыр тураһында ла эшләнһә, шәп булыр ине!

**Ирхан:** Башҡорт халҡының тарихын, батырҙарыбыҙҙы һәм шәхестәребеҙҙе улай комикс, аниме, манга геройҙары итһәк, күпселек халыҡ хәтерендә улар шундағы персонаждар булып ҡалмаҫмы? Һуңынан Урал һәм алмай, хаталанһалар ҙа һәр саҡ ярҙам итергә әҙер торалар. Башҡорт теленә мәктәптәге предмет кеүек ҡарамайыҡ, көндәлектәге гәҙәти күренеш тип белəйек. Сөнки көндәлектә хаталар эшләй-эшләй булһа ла ҡулланмаһаҡ, шулай телмәребеҙҙе шымартмаһаҡ, беҙҙең өсөн кем был эшләр?

**Гөлсинә:** Киләсәктә беҙ ҙә атай-әсәй булырбыҙ. Балаларыбыҙға туған телебеҙҙе өйрәтәйек, онотмайыҡ. Төрлө-төрлө китаптар уҡыйыҡ, башҡорт телендә булған гәзит-журналдарҙы алдырайыҡ. Был баһаһын билдәләп тә булмаҫ ҡиммәт мираҫ өсөн ата-бабаларыбыҙ түккән көстө әрәм итмәйек!

**Ирхан:** Туған телдең киләсәге - һәр кем иңенә һалынған яуаплылыҡ. Киләсәктә мин дә бер нәмәнән ҡурҡмай, тел менән ҡоралланып, үҙ халҡыма хеҙмәт итергә теләйем. Тиҫтерҙәрем дә шул фекерҙә булһын ине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Туған телен ҡәҙерләгән халыҡ ҡәҙерле булыр, тигән боронғолар. Ошо хәҡиҡәтте бәләкәйҙән аңлап буй еткергән балаларыбыҙ бар, шөкөр. Бөгөнгө әңгәмәбеҙ был хаҡта уйлап еткермәгән милләттәштәргә фәһем дә булыр тәсләһ.**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**әңгәмәләште.**

ТУҒАН ТЕЛЕМ...

# АУЫҘ ТУЛТЫРЫП...

## һөйләшеүгә ни етә!

**(Башы 6-сы биттә).**

Кешене берәй хайуанға, ҡошҡа, хатта бөжәктәргә, йә булмаһа, берәй тере булмаған предметҡа ла оҡшатып, уларҙың атамаһын ҡушып һөйләшеүҙәр телебеҙҙә киң таралған. Берәй һорау биреп, артыҡ маҙаһыҙлай башлаған кешене һөлөк йә ыҫмалаға оҡшатыу, тиҙ генә илап бара торған берәүҙе серәкәйгә йә серек йомортҡа менән тиңләү, һуғышырға йөтеш кешене - әтәскә, ҡурҡаҡ кешене - ҡуянға, маҡтансыҡты - күркәгә, көслө кешене айыуға оҡшатыуҙарҙы күптәрҙең ишеткәне барҙыр

Әҙәм балаһының тәнендә бер ниндәй ҙә һайғау булмауына ҡарамаҫтан, беҙҙең яҡ ауылдарында бәгзе берәү хаҡында "һайғауы һирәк" тигән бер һүҙбәйләнеште йыш ҡулланалар. "Башҡортсаурыҫса һүҙлек"тә был, нишләптер, "Не смыслить, не понимать" тип тәржемәләнгән. Ә беҙҙә уны, киреһенсә, берәй хәбәрҙе ярты һүҙҙән аңғарып, тиҙ генә эләктереп алған зирәк кешегә ҡарата "уның һайғауы һирәк", тип әйтәләр. Мәҫәлән, яҡында башҡа милләт кешеһе бар икән, башҡортса аңламай тип уйлап, уның хаҡында низер әйтә башлаған кешегә: "Был ағайҙың һайғауы һирәк. Иплəберәк һөйлә..." - тип аңғартып ҡуялар. "Башҡортса аңлай ул, һағыраҡ бул", йәнәһе. Йә берәй бәләкәй бала алдында эс серен сисә башлаған осраҡта ла шулай тип иҫкәртәләр.

Бушҡа ғына үпкәләй һалып барыусы, үсексән кеше хаҡында ла "тәртәһе серек" йә иһә "ерек тәртәле кеше", йә булмаһа, "һеркәһе һыу күтәрмәй" тип әйтәләр. Элек ҡараған спектаклдәрҙең береһендә ("Ҡыҙ урлау"ҙа булһа кәрәк) яңғын һүндереүсе булып эшләгән Мотойғулла үҙен "әллә кемгә ҡуйған" бер тәкәббер кеше хаҡында: "һай-һай, был әҙәмдең каланчаһы бик юғары икән!.." - тигәне лә хәтеремдә. Беҙ бала саҡта әсәйем беҙҙең ойоҡтарыбыҙҙы ямай-ямай: "Һай, "төрән аяҡ" малайҙар",- тип көлә торғайны ("төрән" - лемех). Кейем-һалым наҡыҫыраҡ булған шул замандарҙа ойоҡтарыбыҙ ҙа бик тиҙ тишелгән булғандыр инде...

Кешенең ниндәйҙер ыңғай йә кире һыҙатын, берәй ағзаһын төрлөсә һүрәтләү, нимәгәләр тиңләү аша күрһәтеү ҙә бар. Ябай ғына берәй эште лә етешле атҡара алмаған, ҡулынан эш килмәгән кешене "майҙул" тигәндәрен ишеткеләй торғайным. Физик эшкә әүәҫ, йылдам, тырыш кешене "калын елкә", "ҡара тырыш", ә ялҡау кешене, нишләптер, "оҙон үңәс" тип тә әйтәләр беҙҙең яҡта.

Берәй нәмәне уйлап еткермәй әйткән кешегә "кәзә баш", "тауыҡ мейе" тигәнде йыш ҡына ҡулланалар. Хатта бәгзе берәү үҙе берәй нәмәне онотһа: "Ә-й-й, мин, кәзәбаш, онотоп торам да баһа..." - тип үҙен шелтәләгәнен дә ишеткәнем бар. Берәй нәмәгә яңылыш ҡына аяғы менән баҫып ваткан кешегә "һыйыраяҡ" тиҙәр. "Һыу мейе", "батмус ҡолаҡ", "бесәй ҡолаҡ", "кишер танау", "картуф танау", "бирән ҡорһаҡ", "көрәк ҡул", "багор бармаҡ", "ҡыл үңәс" тигән һүҙҙәрҙе лә ауылда йыш ҡуллана торғайнылар.

Эт исеме менән бәйле һүҙҙәрҙең кире мәғәнәлә булыуын беләбеҙ. Мәҫәлән, "этйығыш" кеше - саманан артыҡ ныҡыш кеше, "эт ашамаҫ" һүҙ - насар һүҙ, "этләшеү" - кешегә яуызлыҡ ҡылыу һ.б. "Эт менән эт булма" тигән әйтем дә бар. Әммә, "эт"те ыңғай яҡтан ҡулланған осраҡтар ҙа булғылай. Мәҫәлән, "Атыңа, ҡатыныңа ышанма - этеңә ышан", тигән әйтем бар. Беҙҙең яҡта ҡайһы бер яҡшы кешене лә эт менән сағыштыралар. Әйтәйек, йомшаҡ күңелле, алсаҡ кешене "алабай" тип әйтәләр. Был да буштан ғына килеп сыҡмағандыр, тип уйлайым. Ана шулай тип аталған дәү кәүҙәле, көслө, әммә ифрат та йыуаш тоҡомло эттәр була. Кешене лә тешләмәй. Хатта өргәндә лә абалап түгел, ә ҡалын тауышлы ир кешеләрҙең тыныс итеп һөйләшкәнен хәтерләткән, тоноҡ ҡына тауыш менән өрә ул. Һис кенә лә аҫтыртынлыҡты белмәгән ябай, эскерһеҙ "асыҡ-ярыҡ" кешеләрҙе ана шул эт менән сағыштырыуҙан килеп сыҡҡан булһа кәрәк был һүҙ.

"Алабай", тигәндәй, яҡшығамы был, насарғамы, әммә милләтебеҙ кешеләренең күптәренә тап бына шундай ябайлыҡ, эскерһеҙлек сифаттары булыуы хас. Һәр хәлдә, бәгзе ваҡыт миңә шулай тойола башлай. Айырыуса ситтән килгән башҡа милләт кешеләренә ҡарата халҡыбыҙҙың мөнәсәбәтендә сағыла бындай һыҙат. Шуға ла бөтә башҡа халыҡтар башҡорттар араһында үҙҙәрен ифрат та иркен, хатта "һыуҙағы балыҡ" һымаҡ тоя, тиһәм дә, хаталанмаҫмын. Теге йәки был сит милләт кешеһен яңылыш ҡына үпкәләтеп ҡуймайым, тигәндәй, һәр саҡ ул аңлаған телдә һөйләшеүгә күсергә лә әҙер милләттәштәребеҙ (Бәйғәмбәребеҙ өс кешенең береһе аңламаған телдә, йә ул ишетмәҫлек итеп, ҡалған икәүһенең һөйләшеүен тыйған. Ә дүрт йә унан да күберәк кеше булһа - рөхсәт иткән. Шәриғәт ҡануны буйынса ла беҙ үҙ телебеҙҙә иркенләп һөйләшергә хоҡуҡлыбыҙ, тимәксемен). Сит яҡтарҙа ла булғылағаным бар: артыҡ "алабай"ланып тормаған халыҡтар ҙа юҡ түгел. Ә милләттәштәремде мин ысын күңелдән яратам. Уларҙың йөрәккә ятып, үҙенә тартып торған ихласлығы, яғымлығы, бай, матур телле булыуы, ябайлығы өсөндөр ҙә...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**




* * *

Кеше рәхәткә тиҙ өйрәнә, тиҙәр бит, бындағы тормошона зарланмай Рәүиз. Тәү күргән нәмә башта мөғжизә һымаҡ күренһә лә, тора-бара күнегелгән күренешкә, тәбиғи әйбергә әйләнә башлай бит ул. Шулай ҙа ирҙең эсен ҡырып торған нәмә бар: "Банктарға үтесем муйындан. Хәләлемдең алҡымынан аласаҡтар, үлгәнсе минең бурысты түләйәсәк". Алтын япраҡтарға оҙаҡ итеп ҡарап торған саҡтары ла бар. Эйе, бер нисәһен һатһаң, бурыс ҡайтарыу ғына түгел, киләсәк быуынын хәстәрләрлек запас тупларға була. Ләкин былар фани донъя емеше түгел. Ер өҫтөндәгеһен ул үҙе табырға тейеш. Шул саҡ бер япраҡ усына килеп ятты: "Беҙ ярҙам итә алабыҙ". Рәүиз моңһоу йылмайып, баш сайҡаны. "Ниндәй теләгең бар? Бурыстарымды ҡайтарырлыҡ аҡсамы?" - тип яҙылды япраҡ битендә. Шул саҡ япраҡтар уның баш осонда әйләнергә тотондо: "Һайла! Һайла!"

- Эйе, бурыслымын, ләкин һеҙгә бармаҡ осо менән дә оронмайым.

Япраҡтар кире үҙ урына барып ҡунды. Шул саҡ бер себен баш осонда өйөрөлөргә кереште. "Бында себен?. Ҡайҙан?" Рәүиз ныҡ аптыраны, башын сайҡаны. Еңелсә генә баш ҡағыуҙы бурандай ҡабул иттеме, себен мәтәлә-мәтәлә әллә ҡайҙа осоп юҡ булды. Рәүиз ауыҙын асып торған арала, бер япраҡ кеҫәһенә инеп йәшенде.

Көтмәгәндә-уйламағанда, баҫҡыс хасил булды. Тимәк, Ерән һүҙендә торған, Бузмыйҙан уның ишеген ала алған! Ҡыуанысы эсенә һыймаған Рәүиз баҫҡысҡа табан ҡулдарын һуҙҙы һәм күҙ асып йомған арала ер өҫтөндә баҫып тора ине. Үҙенең ихатаһына ҡайтырмын тип уйлаған егет ҡайһы ергә килеп сыҡҡанын башта аңлай алмай торҙо. Ни өсөн Ерән ишекте урманда ҡалдырып киткән? Эйе, тылсымлы ишеге ҡайынға һөйәтелгән. Ярай, баш ватырға түгел, иң мөһиме, ул ер өҫтөндә. Ана, ҡояш ҡалай сумарт йылмая! Рәүиз ҡәҙерле йөгөн артмаҡланы ла юлға сыҡты. Оҙаҡламай бер йөк машинаһын туҡтатты. Адресын атап, тейешле хаҡ килешкәс, ҡуҙғалып киттеләр.

Ҡайтып инеү менән Дианаһына шылтыратты. Һуңғы айҙарға кәләше телефонын алмай, һәр саҡ ҡәйнәһе яуап бирә торғайны. "Нимә, үтескә һорамаҡсыһыңмы? Әллә ҡыҙымды алып ҡайтырлыҡ хан һарайы төҙөп ҡуйҙыңмы?" - тип кенә ебәрә Милана Дауисовна. Был юлы ла шулай булыр тип уйлағайны, ләкин Диананың тауышын ишеткәс, ҡыуаныстан бер килке телһеҙ торҙо. Иламһыраған тауыш менән кәләше хәлен һөйләй башланы.

- Әсәйем ҡаты ауырып китте. Операция яһатыр кәрәк. Түләүле, етмәһә. Нимә эшләргә?

- Уйларбыҙ, Дианаҡайым! - тип ҡысҡырып ебәрҙе Рәүиз . - Тыныслан! Мин хәҙер!

- Эй, ҡайҙан инде һин!.. - телефон һүнде.

Рәүиз, ыуаланып, тегеләй-былай ҡаранды. Аҡса кәрәк! Ошо уйҙан хатта йөрәге сәнсеп ҡуйҙы. Шуға ла "тыныслан," тип, үҙенең күкрәк тирәһен һыпырҙы, нишләптер, шул мәл уға кеҫәһе ҡалын һымаҡ күренде. Кеҫәһенән ҡағыҙ аҡсалар килтереп сығарғас, шаҡ ҡатты. Ләкин оҙаҡ уйланырға ваҡыт юҡ ине, Рәүиз кире телефонға йәбеште.

- Дианаҡайым! Күпме кәрәк? - Тейешле сумманы ишеткәс, аҡса һанарға тотондо. - Артығы менән етә! Хәҙер барып етәм, йәнем!

Ҡәйнәһенә операция уңышлы үткәнен ишеткәс, ул өйҙәге ҡалған аҡсаны иҫәпләргә булды. Ҡумтаны асты, шыптырлаҡ ҡағыҙҙарҙы ҡулына алды. Банктан алған сумма ята ине был ҡумтала... Мөғжизә. Хәҙер Рәүиз артыҡ баш ватманы, бурыстарын түләне. Бушаған ҡумтаны быраҡтырырға ғына ҡалды. Ул иркен һулап, ҡумтаны асты һәм телһеҙ ҡалды. Ҡумта эсендә алтын япраҡ ята ине. Рәүиз уға ҡараған килеш баш ҡағып оҙаҡ торҙо. Һауытты кире элекке урынына ҡуйҙы. Шунан хәләленә шылтыратты:

- Ҡайт, был донъя хәҙер һинеке.

Ҡатыны ла бер ни булмағандай кире ҡайтты, тормош көйләнде һымаҡ. Ҡәҙимге донъя көтә башланылар, тик әлегә өйҙөң эсен тултыра алмайҙар. Диана арзан мебелгә ризалашманы. Рәүиздең эш хаҡы әллә ни ҙур түгел шул. Шуға ҡарамаҫтан, иренең бер туҡтауһыҙ "Миңә вариҫ кәрәк", тип тыңҡылдауы ғына аптыратты ҡатынды. Диана элек, өйөң юҡ, тип сәбәп таба ине, хәҙер "Булыр бөтәһе лә үҙ яйы менән, сабыр ит", ти ҙә ҡуя. Бер ҡыуаныс, һауығып сыҡҡан ҡәйнәһе элекке шикелле мыжымай, һирәгерәк килә. Һәм, ғәҙәттә, кейәүе юҡ саҡта килергә тырыша.

Бер мәл Диана ҡояштай балҡып, уның эргәһенә килеп баҫты.

- Был миңәме?

Ҡатыны ҡулында япраҡ һалынған ҡумтаны күргәс, Рәүиз телһеҙ ҡалды.

- Зинһар, ҡағылма... Онот һин уны. Ишеттеңме?

Диананың күҙҙәре шарҙай булды.

- Һин нимә! Бындай хазина берәүҙә лә юҡ. Япраҡ минеке! Ниңә ҡотоң осто? Әйт, улайһа, ҡайҙан алдың? Мин үҙ өлөшөмдө талап итәм, хаҡым бар! - Ире өндәшмәгәс, ҡыҙа башланы.- Ҡайҙан алдың, тием, мыубаш!

- Ишек артынан... - тине Рәүиз ағас ишеккә күрһәтеп.- Ул тылсымлы. Ләкин берәү ҙә белмәһен. Кәрәкмәй.

Ҡатыны уға ышанманы, нәфрәт менән ҡарап тора бирҙе.

- Һин мине күптән алтын-көмөшкә күмергә тейеш инең. Алама ишектең ни ҡыҫылышы бар? Мине мыҫҡыл итеүеңме?

- Иҫкене алыштыр тип әрләй инең, мин уны тимерҙән көпләтәм.

- Нишләп һүҙҙе ситкә бораһың! Был алтын япраҡ минеке! Берәүгә лә бирмәйем.

- Диана, тыныслан. Онот был нәмәне, - Ул ҡумтаны ҡатынының ҡулынан тартып тигәндәй алды ла, кире шкаф эсенә тыҡты, шунан хәләленә боролдо. - Малай табып бир, Диана, миңә вариҫ кәрәк.

- Дауаланам, тинем бит! Булыр бөтәһе лә үҙ яйы менән. Һүҙҙе ситкә борма! Ә алама ишегеңде, ысынлап та, көпләт, кеше килһә, оят!

Рәүиз командировкаға китеү менән Милана Дауисовна килеп төштө. Ҡыҙы һуҙған алтын япраҡты күргәс, бер талай телһеҙ ултырҙы.

- Кейәү бик мәүеш түгел, бай ул, һиҙәм. Тик йәшерә-ә-ә... - тип һуҙҙы. - Бы һынным хазинаны нишләп кулон итеп таҡманың? Эл үңәсеңә, бөтөнөһө күреп шаҡ ҡатһын!

Диана Рәүиз менән булған һөйләшеүҙе әсәһенә түкмәй-сәсмәй еткерҙе. Үҙе бер аҙҙан магазинға сыҡты ла, кире ҡайтып тупһаға баҫыу менән аптырап ҡысҡырып ебәрҙе.

- Әсәй, ҡайҙа булды беҙҙең тышҡы ишек?

- Мин өр-яңы броняле ишеккә заказ бирҙем. Онлайн түләнем, иртәгә килтереп ҡуялар.

- Рәүиз көпләтергә һөйләште бит ул. Бына командировканан ҡайтыу менән эшләтә.

- Аламаны көпләтеп ултырып булмай инде! Ҡарун, күпме байлығын беҙҙән йәшерә. Юҡ, беҙ уны яулаясаҡбыҙ.

- Кемде?

- Хазинаны.

- Ә быны... Был ишекте нисек ысҡындыра алдың? Күгәнен тимер менән йәбештерҙе бит ул. Ун бурҙың да көсө етмәйәсәк, тине.

- Һа, маҡсат булғанда көс табыла, - тине Милана ханым эре генә.

- Белмәйем, оҡшатмаҫ шул... Аламаһын ныҡ һаҡлай торғайны. Ашына төшкән тараҡан була күрмә, әсәй, - тип ҡуйҙы Диана.

- Һа, хыял ҡошон эләктереп, бик бәхетле йәшәй бит әле. Ә уның хыял ҡошон кем үҫтергән? Хәҙер мин, имеш, бөтөн нәмәгә ҡыҫылыусы тараҡан. Тараҡан булһам ни! - Милана Дауисовна тышта һөйәп ҡуйылған ишеккә ымланы. - Тикшереп ҡарайыҡмы әллә?

- Шуның әкиәтенә ышанаһыңмы?

Милана ханым, күҙ ҡырыйы менән ҡарап алды ла, һөйәп ҡуйылған ишек артына сумды:

- Мин тараҡандан кәм түгел! Тикшерәм!

Уның кире сыҡҡанын көтөп торған Диана түҙемһеҙләнеп өндәште.

- Ярай, әсәй, етте, сыҡ. - Ул алтын япраҡты ҡулына алды. Йылмайҙы. - Эйе, мин хыял ҡошо, мин алтын, ишеттеңме, әсәй! - Шунан Милана Дауисовна артынан ҡыуыш эсенә уҡталды. "Тараҡан" да, "хыял ҡошо" ла кире сыҡманылар.

Иртәгәһен оҫталар килде. Ихатала һөйәп ҡуйылған иҫке ишекте күргәс, өлкәне тамаҡ ҡырып ҡуйҙы: "Хужаһы егәрле, алып әҙерләп ҡуйған! Тимәк, яңыһын ҡуйып нығытырға ғына ҡалды." Шунан ярҙамсыһы менән ауыр броня ишекте ҡуйҙылар. Иҫкеһен үҙҙәренең йөк машинаһына ырғыттылар. Бер аҙҙан тимер арба оло юл буйлап елдерҙе.

Оҙаҡламай Рәүиз командировканан ҡайтып төштө. Тимер ишекте күреп, ҡәнәғәтлеге йөҙөнә сыҡты: "Килеп эшләп тә киткәндәр! Ҡалай яҡшы көпләгәндәр. Хәҙер Диана "Иҫке ишекте алыштыр", тип һөйләнмәҫ. Тылсымлы ишегем броня эсендә мәңгегә бикләнде, күңел дә тынысланды". Шул саҡ күҙе өҫтәлдә ултырған ҡумтаға төштө. Рәүиздең йөҙө кинәт ағарҙы, эйәге дерелдәп ҡуйҙы.

Ҡумта асылды. Йорт хужаһы, ирекһеҙҙән, артҡа сигенде. Бына ҡумта эсенән япраҡ осоп сыҡты һәм ирҙең усына төшөп ятты.

- Васыят япрағы, - Рәүиз тамағына тығылған төйөрҙө көс-хәл менән йотто. - Мин һинең ҡасан да булһа усыма ҡунырыңды белә инем. Бары ошо мәлде кисектерергә тырыштым. Шуға ла ҡатыныма, тиҙерәк бала тап, минең вариҫ кәрәк, тип инәлдем. Тик, нишләптер, Дианам һаман һуҙҙы. Инде был йыйған донъя кемгә ҡалырын белмәйем. Хәйер, васыят күптән яҙылғандыр инде. Үкенес, үҙ балама ҡалдырып китә алмайым, япраҡ...

"Бушҡа өмөтләнгәнһең, ҡатының һиңә бала тапмаҫ ине. Уның бындай уйы юҡ ине", - тип яҙылды япраҡ битендә.

- Мин аңлайым, һеҙҙең донъяға рөхсәтһеҙ барып индем. Мин борсоном һеҙҙе!

"Тап һин беҙҙән рөхсәт һорандың!"

- Нисек?

"Ишекте шаҡының, һәм беҙ һине индерҙек".

Рәүиз сытырлатып күҙҙәрен йомдо, шунан йәнә ҙур асып, япраҡҡа текләне:

- Васыят япрағы, нимә яҙылған минең васыятта?

"Белмәйем".

- Нисек? - тип ҡабатланы Рәүиз.

"Мин һинеке түгел. Һинең васыят әле яҙылмаған. Мин инде яҙылған васыят. Икенсе кешенеке. Йәғни, уның һиңә яҙған васыяты. Оҙаҡламай ҡулыңа алырһың".

Рәүиздең тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте.

- Яҡындарымдың ғәйебе юҡ! Минең арҡала килеп сыҡты аңлашылмаусанлыҡ!

"Һәр кем үҙе ынтылғанды алды".

- Был бит дөрөҫ түгел!

"Улар үҙ хыялдарына ирештеләр. Ҡабатлайым, васыяттары һиңә килеп ирешер".

- Япраҡ, туҡта!

"Мин ишек артына инергә тейеш. Уның юлы буйлап киттем".

- Ишек? Бына бит ул ишек. Көпләнгән!

"Тылсымлы ишекте берәү ҙә көпләй алғаны юҡ".

Рәүиздең ауыҙы асылды.

- Нисек? Улайһа, ҡайҙа ағас ишек? Ашыҡма! Мин хатаны төҙәтәм! Мин яҡындарымды ҡотҡарам!

Ләкин алтын япраҡ ҡулдан ысҡынды ла, тәгәрәй-тәгәрәй осоп китте. Рәүиз уны күпме генә баҫтырһа ла, ҡыуып етә алманы. Кире әйләнеп килгәс, ир, ярһып, броня ишекте типкесләргә тотондо.

- Ҡайҙа минең ағас ишек? Ҡайҙа? Һин нимәне, кемде һаҡларға тейеш?

Ни саҡлы типһә лә, дөмбәҫләһә лә, броняға барыбер ине.

**(Аҙағы. Башы 48-49-сы һандарҙа).**

✓ *Моҡсайҙа түгел һеҙҙең хазина. Башығыҙҙа. Көс - аҡылда булыр, бәләкәй дуҫтарым. Уҡығыҙ, ғилем алығыҙ. Хәйер, быйыл ҡайһы бер фәндәрҙе үҙемә лә яңынан үҙләштерергә тура килер!*



БАЙРАМ СЦЕНАРИЙЫ

# ЯҢЫ ЙЫЛ НИНДӘЙ ТӨҪТӘ?


Фәнисә ХАЛИКОВА.


**Ҡатнашалар: Ҡыш бабай, Ҡарһылыу, Көҙһылыу, Һуҡыр сысҡан, Дөйәгош, Тауыҡ, себештәр, Төлкө.**

**Ҡыш бабай.** Хөрмәтле дуҫтар, һеҙҙе яҡты, күңелле уртаҡ байрамыбыҙ менән ҡотлайбыҙ! Ихлас тәбрикләйбеҙ! Етеп килгән Яңы йыл менән!

**Ҡарһылыу.** Яңы йыл менән, әкиәт яратыусылар һәм үҙҙәре мөғжизә тыуҙырыусылар! Байрамыбыҙ тылсым көсөнә эйә, Ҡыш бабай, шулай бит!

**Ҡыш бабай.** Бәй, был сер түгел, ейәнсәрем Ҡарһылыу. Уны бөтәһе лә белә. Эйе, кемдер мөғжизә көтә, ә кемдер һөйөнсөләргә ашыға.

**Ҡарһылыу.** Кемдер байлыҡ, кемдер һаулыҡ теләй.

**Ҡыш бабай.** Теләктәре ҡабул булһын. Сөнки хыялһыҙ, дәртһеҙ йәшәү ҡыйын. Яңы йыл тигәндән... Мин яңыһын һары төҫтә, алтын төҫөндә күрәм.

**Ҡарһылыу.** Ни өсөн? Донъябыҙ ап-аҡ бит, Ҡыш бабай.

**Ҡыш бабай.** Ҡышы - аҡ, ә йылы алтын булһын! Ер өҫтөнә Барыҫ йылы килә. Минең Барыҫым көҙгө муллыҡ төҫөндә. Көҙ - тотош йылға мәғәнә бирә. Көҙ!

*Көҙһылыу инә.*

**Көҙһылыу.** Мин бында, саҡырҙыңмы, Ҡыш бабай?

**Ҡыш бабай.** Әйҙә, ейәнсәрем, Яңы йылды үҙ төҫөң менән байыт! Һин һалған алтын һуҡмаҡ буйлап ҡунаҡтарҙы ҡаршы алайыҡ.

*(Сығалар. Һуҡыр сысҡан менән Дөйәгош инә).*

**Дөйәгош.** Яңы йыл ҡунағы, һин кем? Танышайыҡ!

**Һуҡыр сысҡан.** Мин - Һуҡыр сысҡан.

**Дөйәгош.** Ә-ә-ә, һуҡыр...

**Һуҡыр сысҡан.** Һуҡыр сысҡан!

**Дөйәгош.** Һуҡыр икәнеңде әйттең. Нишләп әҙәм ышандырып күҙлек кейеп алғанһың?

**Һуҡыр сысҡан.** Линза ла кейә алам, тик мин барыбер һуҡыр. Ә күҙлек дәрәжәле күрһәтә.

**Дөйәгош.** Ҡыҙыҡ икәнһең, һуҡыр сысҡан!

**Һуҡыр сысҡан.** Үҙең кем булаһың, тояҡ муйын?

**Дөйәгош.** Таяҡ түгел, оҙон муйын. Мин - Дөйәгош. Ай-һай, һуҡыр түгелһеңдер, күрәһең бит.

**Һуҡыр сысҡан.** Күңелем күрә минең. Эске күҙем. Ә Яңы йыл төҫкә бай!

**Дөйәгош.** Кемебеҙ беҙҙең аҡылдан яҙған? Ул - һуҡыр, мин күҙле. Төҫтәр күрмәйем барыбер. Алдаша был...

*Ҡыш бабай инә.*

**Дөйәгош, Һуҡыр сысҡан.** Хәйерле көн, хәйерле йыл, Ҡыш бабай!

**Ҡыш бабай.** Хәйерле булһын, дуҫтар! Һин аптырама, Дөйәгош. Һуҡыр сысҡан бик һизгер ул. Уҡымышлы, ана күҙлеге лә бар.

**Һуҡыр сысҡан.** Уҡымышлы мин, тик таяҡ муйын ҡош тураһында китабымда яҙылмағансы.

**Ҡыш бабай.** Яҙырға оноҡтандарҙыр. Ул икенсе ҡитғанан. Австралия ҡошо.

**Һуҡыр сысҡан.** Нисек тиҙ генә килеп еткән һуң?

**Ҡыш бабай.** Бәй, минең тылсым атым күҙ асып йомғансы алып килде.

**Дөйәгош.** Австралияла әле йәй! Минең ҡышты күргем килде.

**Һуҡыр сысҡан.** Дөйәгош алдай.

**Ҡыш бабай.** Дөрөҫтө һөйләй, Австралияла ике генә миҙгел бар: ямғырлы миҙгел, ҡоро миҙгел.

**Һуҡыр сысҡан.** Бигерәк ярлылар икән.

**Ҡыш бабай.** Шуға ла бөгөн Көҙһылыу, Йәйһылыу, Яҙһылыу Ҡарһылыу ҡунаҡҡа килер. Хәйер, Көҙһылыуҙы үҙем менән алдым.

*Көҙһылыу инә.*

**Дөйәгош.** Ә ни өсөн ул бында?

**Ҡыш бабай.** Быйылғы йыл алтын төҫөндә. Көҙһылыуға төҫтәш.

**Көҙһылыу.** Күрәһегеҙме, нииндәй бүләк алып килдем байрамға! Көлтә-көлтә арыш-бойҙай, мул уңыш!

**Дөйәгош.** Ух, күңелле буласаҡ! Күпме дуҫтар киләсәк! Мин ярлы түгел, мин бай, йөрәк күкрәккә һыймай.

*Дөйәгош бейей.*

**Ҡыш бабай.** Тылсым аттар тағы ҡунаҡтар алып килде. Ҡаршы алабыҙмы, дуҫтар?

**Бергә.** Ҡаршы алабыҙ!

*(Сығалар. Себештәре менән Тауыҡ инә).*

**Тауыҡ.** Ҡыт-ҡыт-ҡыт... Һуңламаныҡмы байрамға? Себештәремде эйәрттем. Һарыҡастарым, һеҙ теуәлме? Бындамы бөтәгеҙ ҙә?

*(Күмәкләшеп әйләнеп бейейҙәр, йырлайҙар. Ҡасып-боҫоп Төлкө инә).*

**Төлкө.** Тауыҡ тауыҡ инде, һанай ҙа белмәй.... Ә себештәр... Ух, тәмлекәстәр. Туҡта, тауыҡбаш ниндәй моҡсай аҫып алған? Әллә тибенеп йөрөп, ҡыйлыҡта хазина тапҡанмы? Эләктерһәм... байыр инем. Миллиардер Төлкө - елле яңғырай! Юҡ, олигарх төлкө шәберәк! Аңра тауыҡты алдаштырайым. Йомро-йомро, нимә ул?

**Тауыҡ.** Моҡсай.

**Төлкө.** Арҡама аҫ, күҙем насар күрә.

**Тауыҡ.** Арҡаңда күҙең юҡ бит.

**Төлкө.** Әй, эйе. Мороному ултырт. Күҙем насар күрә.

**Тауыҡ.** Ниңә моронға? Әләйек шыршыға!

**Төлкө.** Бәләкәстәр, ана тегендә Ҡыш бабай уйынсыҡтар тарата. Эх, унда күңелле!

**Себештәр.** Беҙгә уйынсыҡтар кәрәк!

*Йүгереп сығалар.*

**Тауыҡ.** Туҡтағыҙ, себештәрем. Юғалаһығыҙ бит, таралмағыҙ!

*(Тауыҡ себештәре артынан сыға).*

**Төлкө.** Киттеләр. Анһат ҡына ҡотолдом. Моҡсайҙы алып ҡасайым. Аһ, көсөм етмәй. Был ни хәл?

*Һуҡыр сысҡан инә*

**Һуҡыр сысҡан.** Ер өҫтөндә йөрөргә яратмайым. Ер аҫтында күпкә рәхәт.

**Төлкө.** Һуҡыр сысҡан, сәләм бирҙек!

**Һуҡыр сысҡан.** О, мине беләләр, танышҙар. Кем һин, нарыҡай-ерәнкәй?

**Төлкө.** Бәй, Барыҫтың үҙе булам. Төҫөмдән танырға тейешһең. Ҡыш бабай әйтмәнеме ни?

**Һуҡыр сысҡан.** Әйтте. О-о-о-о, һин Барыҫ!

**Төлкө.** Тап үҙе!

**Һуҡыр сысҡан.** Ҡотло аяғың менән, Барыҫ!

**Төлкө.** Күптән ҡотло! Тик бынау йомройомро...

**Һуҡыр сысҡан.** Йомран хәҙер килеп етергә тейеш, сәләм ебәрҙе.

**Төлкө.** Йомран түгел, миңә йомро-йомро...

**Һуҡыр сысҡан.** Йомғаҡ май?

**Төлкө.** Май ҙа насар түгел.

**Дөйәгош.** Хәҙер әбей менән бабай май алып килергә тейештәр.

**Төлкө.** Ниндәй әбей менән бабай?

**Дөйәгош.** Бәй, нисек ниндәй? Боронборон замандағы әбей менән бабай. Йәгени, әкиәттәге!

**Төлкө.** Ана шул әкиәттәгеләр бөтөнләй кәрәкмәй. Сей елкәгә тейҙеләр. Әкиәттә мине йонсоттолар... Хәҙер бында ҡамасаулайҙар... Бынау йомро моҡсай минеке. Кҫстәнәс менән килгәйнем. Һинә ышаныс белдерәм. Күтәреш, арҡама һал.

**Һуҡыр сысҡан.** Хәҙер, хөрмәтле Барыҫ!

*Тауыштар ишетелә.*

**Төлкө.** Ашығырға кәрәк. Бигерәк яйһың, сысҡан. Анау ағаслыҡтар араһына алып бар.. Шунда булырмын.

*Сыға.*

**Һуҡыр сысҡан.** Хәҙер-хәҙер.

*(Тоҡто күтәрә. Тауыҡ, Ҡыш бабай, Көҙһылыу инәләр).*

**Тауыҡ.** Нишләтәһең минең моҡсайҙы?

**Һуҡыр сысҡан.** Был - йыл хужаһы Барыҫтың йөгө.

**Тауыҡ.** Туҡта!

**Һуҡыр сысҡан.** Барыҫ мине көтә!

**Ҡыш бабай.** Ашыҡма, һинең Барыҫыңдың төҫө ниндәй?

**Һуҡыр сысҡан.** Ошо Көҙһылыу төҫөндә.

**Тауыҡ.** Бәй, дөрөҫ...

**Ҡыш бабай.** Тағы ниндәй?

**Һуҡыр сысҡан.** Үҙе һығыла-бөгөлә.

**Тауыҡ.** Был да дөрөҫ. Барыҫ!

**Һуҡыр сысҡан.** Мороно осло. Ҡойроғо ялбыр, ҡуйы.

**Тауыҡ.** Бәй, был бит хәйләкәр Төлкө!

**Ҡыш бабай.** Бына кемдең ҡармағына ҡапҡанһың!

**Һуҡыр сысҡан.** Нисек төлкө? Ул бит һары.

**Көҙһылыу.** Кәрәк икән аҡ та булыр, ҡара ла.

**Һуҡыр сысҡан.** Ғәфү итегеҙ, мин уға ышандым. Бур исеме ала яҙҙым.

**Ҡыш бабай.** Кәйефеңде төшөрмә. Тылсымлы байрам беҙҙә!

**Көҙһылыу.** Байрам кәйефе теләп, дуҫтарың йыр бүләк итә.

*Сарала ҡатнашыусы берәйһе йыр башҡара. Дөйәгош Төлкөнө тотоп алып инә.*

**Дөйәгош.** Тоттом үҙен. Ағас төбөнә боҫҡан ине. Үнәсте һуҙҙым да, ҡаптырҙым.

**Һуҡыр сысҡан.** Рәхмәт. Оҙон муйын бына ҡасан кәрәк икән!

**Төлкө.** Ҡыш бабай, байрамһыҙ ҡалдырмағыҙ мине. Көнөгөҙ хәйерле булһын! Мин шуҡмын, шаярттым ғына.

**Һуҡыр сысҡан.** Оят төлкөгә -
Ҡалды көлкөгә,
Ҡыш бабай. Ни хәл итәбеҙ?

**Дөйәгош.** Байрам хаҡына...

**Һуҡыр сысҡан.** Ғәфү итәбеҙ.

**Төлкө.** Шатлыҡтан күҙ йәшем килеп сыҡты... Бынан ары урманда тәртипле булырмын, бөтә ерҙә лә тәртипле булырмын.

*Төлкө бейеп китә.*

**Дөйәгош.** Уй, ә нишләп ҡапыл ҡараңғы төшә башланы?

**Ҡыш бабай.** Беҙҙең шыршыға ла байрам бүләге кәрәк.Үҙен биҙәгәндәрен көтә.

**Һуҡыр сысҡан.** Мин алып килдем кишер-шалҡан. Өйөм түбәһендә улар үҫкән.

**Дөйәгош.** Өй түбәһендә?

**Һуҡыр сысҡан.** Ер аҫтында йәшәйем бит, былар минең оя башында үҫә. Ҡай саҡ мине ҡыҫырыҡлайҙар.

**Дөйәгош.** Мин алтын ҡаурый бүләк итәм. Бәлки, берәйһе перо яһар ҙа, шәп шиғыр яҙыр.

**Төлкө.** Ә мин үҙем геройымын. Күп әкиәттәрҙең геройы. Эйе, минең турала әкиәт яҙырға яраталар.

**Көҙһылыу.** Уның менән һәр саҡ ҡыҙыҡ.

**Ҡыш бабай.** Шулай! Сөнки Төлкө - ул төрлө-төрлө.

**Төлкө.** Мин хәйләкәр ҙә, ярҙамсыл да, аҡыллы ла, ҡурҡаҡ та, бер ҡатлы ла, оҫта ла, ялҡау ҙа. Шуға мине әкиәтселәр ярата.

**Дөйәгош.** Улай булғас, беҙ ҙә һине яратабыҙ.

**Тауыҡ, себештәр.** Себештәрем һеҙ теуәлме? Беҙҙән бүләк - йыр.

*(Берәй йыр башҡаралар).*

**Төлкө.** Рәхмәт! Улай булғас, быйыл бер нисә әкиәт бүләк итермен. Йәгни, яҙыусыларға яңы сюжет бирермен.

**Көҙһылыу.** Алтын төҫкә мансылып.
Юлбарыҫ йылы килә.
Йыл матур буласағын,
Себештәр алдан белә.
Ҡабул булһын уларҙың
Бар изге теләктәре,
Артып торһон йыл буйына
Шатлыҡ-һөйөнөстәре.

**Себештәр.** Ә әлегә сүпләйек тары,
Тарыбыҙ шундай тәмле.
Ҡыуанабыҙ, бейейбеҙ,
Донъябыҙ ниндәй йәмле!

**Төлкө.** Тауыҡтың моҡсайы ауыр. Унда ғы бүләк иң шәбелер.

**Тауыҡ.** Моҡсайым эсендә тары.

**Бөтәһе лә.** Тары?

**Ҡыш бабай.** Барыҫ йылы барын сәс, һис булмаһа, тары сәс. Шулай, ти, аҡыллы тауыҡ.

**Төлкө.** Тауыҡтар ҙа хәҙер аҡыллы шул. Үәт, замана!

**Ҡарһылыу инә.** Әлегә был тары бөртөктәре осҡон булып шыршыны биҙәр.

*(Шыршыла кескәй осҡондар тоҡана).*

**Бөтәһе лә.** Ниндәй шәп бүләк!

**Ҡарһылыу.** Мин йәнә болоттарҙың сәләмен алып килдем. Күктән бер нисә йондоҙҙо улар беҙгә төшөрҙө.

*(Шыршыла йондооҙҙар ҡабына).*

**Барыһы ла.** Байрам менән!

**Ҡыш бабай.** Моҡсайҙа түгел һеҙҙең хазина. Башығыҙҙа. Көс - аҡылда булыр, бәләкәй дуҫтарым. Уҡығыҙ, ғилем алығыҙ.

**Дөйәгош.** Минең дә ғилемле булғым килә. Муйыным оҙон үҫте, инде аҡылым да үҫһен!

**Ҡыш бабай.** Эйе, бына шулай яҡшы эштәрҙә, ғилем юлында уҙышығыҙ. Хәйер, быйыл ҡайһы бер фәндәрҙе үҙемә лә яңынан үҙләштерергә тура килер!

**Төлкө.** Улай булғас, мин дуҫтарымды Яңы йыл менән... Барыҫ йылы менән ҡотларға йүгерҙем!

**Көҙһылыу.** Бар, ос, был һиңә байрам фатиһаһы!

**Ҡыш бабай.** Бына бит, һәр бер заттың күңелендә яҡшылыҡ йәшәй.

**Ҡарһылыу.** Шул матурлыҡты күрһәтергә,

**Ҡыш бабай.** Бер-беребеҙҙе ҡыуандырырға онотмайыҡ.

**Көҙһылыу.** Яңы йылыбыҙ йомарт,
Йылыбыҙға - бәрәкәт,
Тырыштарға бир ҡеүәт.
Ә дуҫтарға - сәм һәм дәрт!

**Ҡарһылыу.** Китап - белем аҫҡысы,
Аҫҡысты ныҡ тотһондар.
Белем-ғилем тауына
Бергәләшеп менһендәр.

**Тауыҡ.** Төшөп китте, төшөп китте. Ҡотҡарығыҙ! Һуҡыр сысҡан төшөп китте соҡорға!

**Дөйәгош.** Бәй, уның донъяһы ер аҫтында бит!

**Тауыҡ.** Эх, мин тауыҡ баш! Бөтөнләй онотҡанмын.

**Ҡыш бабай.** Дәрт, илһам алып төшөп китте үҙ донъяһына.

**Көҙһылыу.** Эйе, хәҙер барлыҡ ер аҫтындағы бөжәктәрҙе, йәнлектәрҙе ҡотлаясаҡ. Хатта өңөндә тәпәйен имеп ятҡан айыуҙы ла онотмаясаҡ.

**Тауыҡ.** Барыҫ йылы яңы юлдар аса!

**Дөйәгош.** Тимәк, йәнә күрешәбеҙ. Тик ҡайһы урында?

**Ҡыш бабай.** Һәр миҙгел һеҙҙе үҙ йәме менән ҡаршы алыр. Барыҫ йылын улар сағыу төҫтәр, сағыу хистәр менән биҙәр.

**Көҙһылыу.** Беҙ дүрт миҙгел, ҡыш, яҙ, йәй, көҙ һәр саҡ сиратлашып киләбеҙ.

**Ҡарһылыу.** Усым яҙһам, бурап-бурап,
Еребеҙгә аҡ ҡар ятыр,
Йәшәү һуты булып ирееп,
Тәбиғәтте яҙ уятыр.

**Яҙһылыу.** Минең ҡулда яҙ тылсымы,
Усым яҙһам, тамсы тамыр,
Хәтфә үлән шытып сығыр.
Умырзая күҙен асыр.

**Йәйһылыу.** Минең ҡулда йәй тылсымы,
Усым яҙһам, еләк бешер.
Ҡыр-яланда емеш уңыр,
Борсолмағыҙ, бесән булыр.

**Көҙһылыу.** Минең ҡулда - көҙ тылсымы,
Баҫыуҙарҙа эштәр ҡыҙыр,
Зифа ҡайын алтынланыр,
Борсолмағыҙ, иген уңыр.

**Ҡыш бабай.** Ә мин һеҙгә, дуҫтар, яҡшылыҡ, сафлыҡ, күңел яҡтылығы теләйем. Бөтәбеҙ бер теләк менән янһаҡ, илдә бәрәкәт артыр, донъябыҙ тағы ла ҡотайыр, бөтәйер. Халыҡтар - иманда, илдәр тыныслыҡта йәшәр.

Яңы йылыбыҙ шатлыҡ төҫөндә булһын!

*Яңы йыл байрамын концерт номерҙары дауам итә.*

ИНТЕРНЕТТАН



# ГАДЖЕТЫҢДЫ ҠОСАҠЛАП ЙОҠЛАМА

■ Испан ғалимдары йоҡларға ятҡанда эргәгеҙгә гаджеттарҙы заряд йыйырға ҡуймаҫҡа кәңәш итә. Гаджет эргәһендә йоҡлаған кешенең организмында гормон системаһы эше боҙолоп, һимереүгә килтереүе ихтимал. Йоҡо бүлмәһендә заманса ҡоролмалар булғанда кешенең йоҡоһо туймай, кәйефе булмай. Йоҡо гормоны мелатонин бүлмә тулыһынса ҡараңғы булғанда ғына бүленә.

■ Бристоль университеты ғалимдары бөгөнгө замандағы йәшәү рәүеше балаларға кире тәьҫир итә, тип белдерә. Һуңғы 16 йылда яман шеш менән ауырыусы йәштәр һаны 40 процентҡа артҡан, быға атмосфераға бүленеп сыҡҡан зарарлы матдәләр, пестицидтар, дөрөҫ туҡланмау, радиация "ғәйепле". Британия ғалимдары дәүләт статистикаһын анализлаған һәм илдә 1998 йыл менән сағыштырғанда яман шеш менән сирләүселәр иҫәбе 1300-гә артыҡ икәнен асыҡлаған. Яман шеш бигерәк тә 15 йәшлек үҫмерҙәрҙән алып 24 йәшкә тиклемге йәш кешеләр араһында күп. 1998 йылда 100 мең пациентҡа 10 осраҡ тура килһә, хәҙер был һан 16-ға еткән. Был насар сирҙең артыуын, әлбиттә, медицинала диагностикалау өсөн шарттарҙың яҡшырыуы менән дә аңлатып була. Әммә уның барлыҡҡа килеүендә тышҡы факторҙар ҙа бар. Был йәһәттән йәштәрҙең сәләмәтлегенә һауаның бысранлыуы, төрлө йыһаҙдарҙан бүленеп сыҡҡан тулҡындар, бәлки, шулай уҡ кеҫә телефондары радиацияһы кире йоғонто яһай.

■ Бөгөн нindәй матурлыҡ стандарттары "мода"ла икәнен беләһегеҙме? Белгестәр хәҙерге заман ҡатын-ҡыҙҙарына XX быуат башындағы гүзәл заттарға оҡшарға тырышырға кәңәш итә. Марлен Дитрих, Лорен Бэколл, Лили Джеймс, Марго Робби - уларҙың барыһының да бил үлсәмдәре 26,5 инч, йәғни, 67,3 сантиметр булған. Яныраҡ үткән һынауҙар һөҙөмтәһе буйынса тап ошо бил үлсәмен Британия ғалимдары идеаль тип тапҡан. Был сама менән 42-44 кейем үлсәмене тап килә. Был үлсәмгә ныйыу өсөн билдәле йондоҙҙар Ким Кардашян һәм Дита фон Тиз кеүек корсет йөрөтөргә лә кәрәкмәй, ти белгестәр. Дита фон Тиз үҙенең билен 56 сантиметрға тиклем кәметә алыуы менән билдәле, корсет менән тарттырып ҡуйғандан һуң, уның бил үлсәме 42 сантиметрға ҡалған. Икенсе яҡтан, һуңғы мәлдә ҡатын-ҡыҙҙарҙың бил күләме арта бара, был андроген гормоны тәьҫире менән бәйле. Был гормон ҡатын-ҡыҙҙы көслөрәк, сыҙамлыраҡ итә, әммә бил, эс тирәһенә май ҙа күберәк туплана. Шуға ла стандарттарға тура килмәйһегеҙ икән, быға көймәгеҙ, бында һеҙ түгел, тәбиғәт "ғәйепле" ти тикшеренеүселәр. Етмәһә, өс йыл элек кенә ғалимдар һау-сәләмәт кешенең бил үлсәме 80-85 сантиметрҙан кәм булмаҫҡа тейеш, тигән ине.

■ Астма менән аллергия ҡайнатылған һөт эсеүҙән барлыҡҡа килеүе ихтимал, тип раҫлай немец ғалимдары. Ҡайнатылмаған һөттә бактериялар күп тиеүселәргә уларҙың дәлилдәре лә бар. "Таҙа" ризыҡтар һәр ваҡыт организм өсөн файҙалы булмауы ла бар. Иммунитет барлыҡҡа килһен өсөн организм бактериялар менән осрашырға тейеш. 6 йыл дауамында барған тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡайнатылмаған һөт эсеүсе балалар астма менән һирәк ауырыған. Иммунологтар әйтеүенсә, быны һөттәге Омега-3 тәьҫире менән аңлатып була. Ул ҡайнатылған, майһыҙландырылған һөткә ҡарағанда, яңы һауылған һөттә күберәк була.

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# УНЫҢ ЯБАЙЛЫҒЫНА ЛА...

## бөйөклөк хас ине

**Рәсәйҙә генә түгел, башҡа бик күп сит илдәрҙә лә, Урал-алтай телсе ғалимдары араһында ла ифрат ҙур абруй ҡаҙанған бөйөк башҡорт ғалимына арнап, һәр биш йыл һайын хәтер кисәләре, ғилми-ғәмәли конференциялар, симпозиумдар, осрашыуҙар үтеп тора, уның фәнни асыштары, әҙәби ижады, тормош юлы хаҡында ифрат юғары фекерҙәр әйтелә. Шундай һәр сарала Башҡорт дәүләт университетына Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаевтың мәшһүр исемен бирергә, тигән мөрәжәғәттәр ҙә ҡабул ителә килә, республика Хөкүмәтенә ебәрелә тора...**



Айырыуса 1996 йылда, Жәлил Кейекбаевтың тыуыуына 85 йыл тулған көндәрҙә, уның элекке шәкерттәре - күренекле журналист, ғалим Ризуан Хажиев, яҙыусылар Р. Бикбаев, Р. Мифтахов, Т. Йосопов, Т. Килмөхәмәтов, телсе ғалимдар В. Псәнчин, И. Ғәләүетдинов һ.б. был мөһим мәсьәләне ҡырҡыу ҡуйғайны. Йылдар үткән һайын бындай мөрәжәғәттәр республика гәзиттәрендә ҡабатлана торҙо, әммә, үкенескә ҡаршы, республикала иң тәүге филология фәндәре докторының, башҡорттарҙан беренсе профессорҙың исемен мәңгеләштереү һаман да тормошҡа ашырылмай килә.

Бөтә донъяға танылған бөйөк шәхес Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаевтың уҙған ғүмер юлына байҡау яһаусыларҙың иҫәбе-хисабы юҡ. Шуныһы мәғлүм: ул яҙған хеҙмәттәренең барыһын да баҫтырып сығара алмаған. Был инде ғәйәт аянысы хәл! Нәшриәт буяуы аңҡып торған китапты ҡулына алыу ғалим өсөн иң ҙур шатлыҡ булыр ине лә, тик ул бындай бәхеттән мәхрүм була. Быны ғалим бик тә ауыр кисерә. Вафатынан һуң ғына уның Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында уҡ ижад ителгән, 1946 йылда Яҙыусылар союзында тикшерелеп, нәшриәттә сығарырға тәҡдим ителгән "Туғандар һәм таныштар" романы нәшер ителә. Романды баҫырға әҙерләүсе әҙәбиәт белгесе, ғалим һәм яҙыусы Әнүр Вахитов ошондай фекер үткәрә: "...Бөтә хикәйәләрен, әкиәттәрен, повесть һәм очерктарын, шулай уҡ иң яҡшы шиғыр, тәржемә һәм ҡобайырҙарын туплап, "Туғандар һәм таныштар" романы менән бергә ике томлығын сығарырға кәрәк ине..." Шулай уҡ, бөтә донъя күләмендәге лингвистар күптән фәнни хеҙмәттәренең тулы йыйынтығын күрергә теләй. Тик ғалимдың вафатынан һуң 50 йыл самаһы ваҡыт үтһә лә, барлыҡ лингвистарҙың теләге булған баҫма, ғилми хеҙмәттәренең тулы йыйынтығы бөгөнгө уҡыусыға килеп етә алғаны юҡ...

Ғалимдың бөтә донъяла танылыу алған "Урал-алтай тел белеменә инеш" исемле хеҙмәте, үҙе мәрхүм булғандан һуң, 1972 йылда ғына донъя күрҙе. И. Ғ. Илишевтың тырышлығы менән 1996 йылда ғалимдың "Основы исторической грамматики урало-алтайских языков" тигән фундаменталь китабы нәшер ителде. Был ҡатмарлы хеҙмәтте өр-яңынан ҡарап сығыу, ҡарамаларын мөхәррирләү өсөн Илишевҡа өс йыл ваҡыт кәрәк була. Бөгөн дә актуаллеген юғалтмаған ғилми хеҙмәткә рецензияны күренекле лингвистар, академиктар П. А. Аристэ, Б. А. Серебренников, профессорҙар Н. А. Баскаков, М. З. Зәкиевтар яҙа. Ниһайәт, ҡоро көндә ямғыр көткәндәй, Ж. Ғ. Кейекбаевтың был китабы ташҡа баҫыла. Сиге булмаған эште башҡарып сыға алыуына шатланған йәш ғалим, китап сыҡҡас, сәскәләр алып бөйөк ғүр эйәһенең ҡәберенә йүнәлә. Күҙҙәренә йәш алған ғалим остазының баш осона яңы сығарған китабын һәм сәскәләр һала...

...Жәлил Ғиниәт улының тел ғилеме донъяһында абруйы сикһеҙ ҙур булыуы һәммәбеҙгә мәғлүм. Мәсәлән, ул үҙе иҫән сағында Ленинград СССР Фәндәр академияһының мөхбир-ағзаһы, Азия халыҡтары институты профессоры Андрей Николаевич Кононовты төркологияның актуаль мәсьәләләренә арналған темаға башҡорт-татар бүлектәре студенттарына махсус курс уҡырға саҡырған була. Даны сыҡҡан төркиәтсе менән яҡындан танышыу, аралашып, киләсәккә яңы пландар ҡороу маҡсаты менән арҙаҡлы ғалим Өфөгә килергә ризалыҡ бирә. Әммә Жәлил Ғиниәт улының вафаты хаҡында ишеткәс, хатта БДУ ректоры хат яҙып саҡырыуға ҡарамаҫтан, Кононов был сәфәрҙән баш тарта.

Дүрт тиҫтәнән ашыу тел белгән, ысын мәғәнәһендә полиглоттың - ағайыбыҙҙың - остазыбыҙҙың вафатына ла 50 йыл. Уның исем-шәрифе халыҡ күңелендә. Ошо дәүер эсендә заманында ул нигеҙ һалып киткән башҡорт теле үҫеш осорон кисерә: дәүләт теле статусын алыуға өлгәште. Тиҫтә-тиҫтә телсе ғалимдар, шәгирҙәр, прозаиктар, драматургтар, публицистар үҫеп сыҡты, бына тигән новатор-уҡытыусылар, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре республиканы данлай. Ваҡыт беҙмәне ғәҙел һәм аяуһыҙ: ул бөйөк ғалимдың башҡорт телен генә түгел, барлыҡ төрки телдәрен, Уралалтай телдәрен ентекле өйрәнгән, уларҙың алға әйҙәүсеһе булғанлығын таный, шул уҡ ваҡытта уның хеҙмәттәренә үҙе иҫән сағында тейешле баһа бирелмәүенә шаһитлыҡ ҡыла.

"...Их, әйҙәүсең булһын ине ул!" Был Жәлил ағайҙың хәсрәттәр йотоп, сарсап, уфтанып әйткән һүҙе. Эйе, хаҡ һүҙҙәр, әйҙәүсең булып, алдан бураҙналар ярып барһа, тапалған һуҡмаҡтан барыусыларға еңелерәк шул. Ә бына алға әйҙәү, башҡорт тел ғилеменә юл ярыу бөйөк шәхестең үҙ өлөшөнә тейҙе. Йылында күп осҡан ҡоштарҙың ҡанаттары тиҙ туҙа. Шуның кеүек, Жәлил Ғиниәт улының йөрәге лә сикһеҙ күп талпыныуҙан иртә туҙҙы. Беҙ, йәмәғәт, балды ҡалаҡлап йотабыҙ. Бер ҡалаҡ бал йыйыр өсөн бал ҡорттары меңәр сәскәгә ҡунып, күҙ алдына ла килтерә алмайбыҙ, балдың ысын баһаһын да онотабыҙ. Ғалимдың хеҙмәттәре лә нәҡ шундай бер миҫкә татлы бал һымаҡ. Ғилемен һоҫоп алабыҙ ҙа, уға күпме көс, йоҡоһоҙ көн-төндәр киткәнен, күтәрә алмаҫлыҡ хеҙмәт түгелгәнлеген уйлап та тормай, ҡуллана бирәбеҙ...

2021 йылдың 25 октябрендә олуғ ғалимдың тыуыуына 110 йыл тулды. Тынғыһыҙ ғалим-педагог, яҙыусы һәм актив йәмәғәтсе үҙе һау-сәләмәт сағында бер эштән дә ситтә ҡала белмәне. Азия һәм Африка илдәре тәләктәшлегенең Совет комитеты ағзаһы, БАССР Юғары Советы депутаты булып һайланды. Жәлил Ғиниәт улының фиҙакәр хеҙмәте Ленин һәм Почет Билдәһе ордендары менән баһаланды. "Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре" тигән оло исемгә лайыҡ булды. Ул 1942 йылдан СССР Яҙыусылар Союзы ағзаһы булып торҙо. Ж. Ғ. Кейекбаев тиҫтәнән ашыу филология фәндәре кандидаттарын әҙерләй, республикалағы фән учреждениеларының ғилми эштәрендә туранан-тура ярҙам итә, Рәсәй һәм башҡа күрше, сит илдәрҙең төрлө юғары уҡыу йорттары һорауы буйынса лекциялар уҡый, фәнемле ғилми-ғәмәли конференцияларҙа, форумдарҙа докладтар менән сығыш яһай. Талантлы тел ғалимы Вәли Шәғәле улы Псәнчин бөйөк тел белгесе һәм ижадсы Жәлил Ғиниәт улы хаҡында үҙенең "Исемдәре ҡалды илендә" мәҡәләһендә шулай тип нарыҡлай: "...Жәлил Кейекбаев һәр эштә тәүәккәл, киң һәм яңыса ҡарашлы, күп белемле, һәр саҡ ағымлы, алсаҡ, олоға ла, кесегә лә берҙәй мөләйем кеше, төрлө йүнәлештә эшләүсе арҙаҡлы ғалим ине. Ул минең хәтерҙә ана шулай кешеләрҙә һирәк була торған бөтә гүзәл сифаттарҙы үҙендә берләштереүсе, бер үк ваҡытта бөйөк тә, ябай ҙа шәхес булып ҡалды. Уның ябайлығына ла бөйөклөк хас ине шул".

Башҡорттоң бөйөк ғалимы хаҡындағы яҡты хәтирәләрҙе йыйһаң, үҙе бер китапҡа торошло булыр ине. Туған тел бөйөклөгөн мәңгелеккә илтеүҙәге сикһеҙ ҙур роле уҡытыусыбыҙҙың үҙен дә халыҡ ихтирамының иң юғары, яҡты һәм изге рух йондоҙона илтә. Бындай шәхестәр быуатҡа бер тыуа! Мин шулай тип хыялланам: киләсәктә бөйөк төркиәтсе, башҡорт халҡының арҙаҡлы шәхесе Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаев исемендәге уҡыу йорто алдында уның бюстһәйкәле урын алһын ине лә, ул студенттарға тура ҡарап: "Теле барҙың - иле бар, мырҙалар!" - тип өндәшкәндәй булһын ине!

**Рәүеф ШАҺИЕВ,**
**филология фәндәре кандидаты,**
**профессорҙың 1960 йылдарҙағы шәкерте.**

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

**Тулҡын-тулҡын булып ҡабатланып торған тажзәхмәт кешеләрҙе өйҙәренә бикләнергә мәжбүр итеп кенә тора. Мәҙәниәт йорттары ябылып, төрлө саралар үткәреүҙән дә туҡталып торорға мәжбүрбеҙ. Әммә күңел тигәнең аралашыуға тартыла бит барыбер. Шуға күрәләр инде уңайын табырға тура килә. Был мәлдә уңайы - онлайн формат. Беҙҙең "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ла бик йәтешләп кенә өйрәнеп алды быға. Инде дүртенсе сарабыҙ гөрләп бара ватсапта, интернетта. Әлеге мәҡәләмдә шуларҙың береүһе тураһында һөйләп китмәксемен.**

# ТАШҠАЙҘАРҒА СОҠОП ТАРИХ ЯҘҘЫМ...



"Ташҡайҙарға соҡоп ҡарғыш яҙҙым" исемле конкурс башҡорт халҡының "Ҡайғы һәм хәтер көнө"нә арналып, тарих йылына ла арналып, ауаздаш булды. Был сараға Наурыз ауылы ағинәйҙәре етәксеһе **Миңнур Байғарина** ошондай маҡсат ҡуйҙы ағинәйҙәр алдына: "Үткәндәрҙе онотмау киләсәк өсөн кәрәк. Тарихты иҫкә төшөрөп һәм барлап, йәш быуынға тапшырыу- беҙҙең бурыс". Конкурс тарихҡа арналған шиғырҙар, йыр-бәйеттәр менән бергә үҙебеҙ йәшәгән төбәктең тарихы менән дә байытылды. Салауат батырыбыҙға арналған шиғырҙар, йырҙар яңғыраны, ошо яу ваҡытында беҙҙең төбәк халҡына ҡағылышлы хәл-ваҡиғалар ҙа ситтә ҡалманы.

**Уральскиҙән Дилбәр Кинйәбаева:** "Мәскәү ауылы халҡы менән бергә яндырылған. Элек ауыл хәҙерге зыярат урынында булған. Был фажиғәнән имен ҡала алғандар хәҙерге урында нигеҙләгәндәр ауылды, тип һөйләй торғайны атайым ", - тип яҙып ебәрҙе. Ысынлап та, Салауат яуы осоронда, 1774 йылдың 25 февралендә Ступишин етәкселегендәге каратель отряды баш күтәреүселәрҙең терәк пункты булған Мәскәү ауылын баҫып ала, ауыл яндырыла. Вәхшилек ҡот осҡос була: ҡатын-ҡыҙ, бала-саға яндырыла, күлға алынған башҡорттар рәхимһеҙ язаланыуға дусар ителә. 1774 йылдың 5 май менән 9 май араһында Пугачев армияһы Наурыз ауылында була. Ауыл эргәһендәге Бүгәс тауы ошо ваҡиғаның өнһеҙ шаһиты булып тора бөгөн. Пугачев менән Салауаттың ғәскәре Яйыҡ башында Яманһаҙ аша күпер түшәп, һаҙҙы юғалтыуһыҙ үтәләр. Был күпер халыҡ араһында Салауат күпере тип йөрөтөлә башлай. Әле лә күперҙең урынын тоҫмалларға була, ти халыҡ.

**Мулдаҡай ауылынан Зөлфиә Әминева 18-се быуат башындағы тарихи ваҡиғаларҙы ҡыҫҡаса һөйләп үттө.** 1730-1750 йылдарҙа башҡорт ерҙәрендә йөҙләп ҡәлғә төҙөлә. Был, әлбиттә, халыҡ араһында ҙур ризаһыҙлыҡ тыуҙыра. Дүрт даруға вәкилдәре ҡоролтайға йыйыла һәм Ырымбур ҡәлғәһен һалыуға ҡаршы торорға ҡарар итәләр. Беренсе күтәрелештең етәксеһе яҡташыбыҙ Йосоп Арыҡов була. Нәрәле тирәһендәге, Йәнбикә йылғаһы буйҙарындағы ҡаты алыштар, 1736 йылда Кинйәкәй ( хәҙерге Вознесенка) ауылында баш күтәреүселәрҙең ҙур кәнәшмәһе, яҡташыбыҙ, ҡыуаҡан ырыуы старшинаһы Бәпәнәй Төрөпбирҙин, Мандар һәм Төлкөсура батырҙар тураһында ла иҫкә алды тарих һөйләүсе. Бәпәнәй абыҙ үҙенең Ҡалҡан күле буйындағы ҡышлауында ҡаҙаҡ ханы Әбүлхәйерҙе лә ҡабул итә икән ошо осорҙа. Зөлфиә Әсҡәт ҡыҙы бөгөн исеме генә ололарҙың хәтерендә һаҡланған Ҡасҡын ауылы тарихына ла туҡтап китте. Мулдаҡай мәктәбе уҡытыусыһы Эльза Рамазанова "Ҡасҡын ауылы" бәйетен яҙҙырып ебәрҙе. Халыҡтың аһ-зары булып ағылды был яҙма.

**Йәмилә Нурдәүләтова** ла ауылына бәйле тарих менән уртаҡлашты. Көҙөй ауылына нигеҙ һалыусы ата-бабаларыбыҙ әйле ырыуы, Салауат ырыуҙаштары була. Борон ул тирәләге ауыл халҡы Миндәк йылғаһы ашаһындағы тауҙың аҫҡы яғында тимерлек ҡорған. Шул тимерлектә ҡорос иретҡәндәр, балта, сүкеш, ҡорал яһағандар, ҡылыс, уҡ башаҡтары сүкегәндәр. Батша указы буйынса тимерлек торорға рөхсәт булмағанлыҡтан, ул йәшерен эр һаналған. Тәүге тимерсеһе Булат исемле бик батыр егет булған. Яҡын-тирәләге кешеләр, батша шымсылары белмәһен өсөн, тимерлек тип һөйләмәгәндәр, ә ҡорос Булатҡа барҙым, тип әйтер булғандар. Шул замандарҙың ауазы булып тау Ҡоросбулат тип йөрөтөлә. Хәҙер ҙә ул тирәлә иретелгән тимертомор, руда ҡалдыҡтары, уҡ башаҡтары табырға була.

Салауат яуы баҫтырылғас, ҡаты эҙәрлекләүҙәрҙән ҡасып, Шайтан-Көҙәй йортон ҡалдырып, әйле ырыуы кешеләре Тирлән яҡтарына күсеп килә. Унда ла тынғы булмаған, бер өлөшө хәҙерге Төҫлө Көҙәйгә, икенсе өлөшө Ҡоросбулат тауы эргәһенә ауыл ҡороп ултыра. 1840 йылда батша хөкүмәте тарафынан яңы указ сығарыла. Ауылдарҙы хужалыҡтарына ҡарап бүлергә, икенсе урындарға күсереп ултыртырға, картаға төшөрөү өсөн һәр ауылға исем бирелергә тейеш була. Күсенеп йөрөү михнәттәрен күп татыған Көҙәй халҡы, кәңәшләшеп, ауылды ҡап урталай бүлеп, көртәләй ҙә, ҡапҡа ҡуйып, һаҡсыларын да баҫтырып ҡуя. Ә ауылдарға ике бер туған етемдең - Һөйәрғол менән Мәһәҙейҙең исемдәрен бирәләр. Һуңғараҡ Мәһәҙей көҙөйҙәре һәм Көбәк ҡара табындары Һөйәрғол ауылын барлыҡҡа килтерә.

**Виләә Мырҙағолова** Һөйөндөк ауылы тирәһендәге ер-һыу атамалары менән таныштырып ҡыуандырҙы. Тарихҡа бай, әммә асылып бөтмәгән биттәре лә булған был яҡҡа бер экскурсия һымаҡ булды ул.

**Ҡоҙаш ауылы ағинәйҙәре Гүзәл Шәймәрҙәнова менән Илзидә Рәхмәтуллина** яҡташыбыҙ, "Илсе Ғайса" йырының авторы Ғайса ахун тураһында һөйләнеләр. Минзәлә Иҫәнбаева бик тә моңло тауыш менән йырлап та ебәргәс, Ғайса ахундың 1904 йылғы һуғышта саҡта ҡустыһы Мусаның һәләк булғанын ишеткәндәге күңел кисерештәре яңғырағандай булды. Яуҙан иҫән-һау ҡайтып, уҡытыусы, дауалаусы ла булып танылған Ғайса етем-еһергә, ярлыларға ярҙам итеп, изгелек ҡылып йәшәүе тураһында бәйән итеүсе тарихи хәтирәләрҙә.

Конкурс тамамланғас, ошо биттә яҙышып та, тарих һөйләп тә, тыңлап ҡына барыусыларҙан да рәхмәт һүҙҙәре яуҙы. "Бик мауыҡтырғыс, фәһемле, бай йөкмәткеле, йөрәктәргә үтеп инерлек бик тә кәрәкле бер ваҡиға булды был сара. Әле илебеҙ йылъяҙмаһында асылып бөтмәгән, халыҡ күңелендә һаҡланған тарих та күптер әле. Күпме мәғлүмәт тупланыҡ, изге йәндәрҙе лә, яуыҙларын да иҫкә төшөрҙөк. Бик мөһим мәғлүмәттәр еткерелде, юғалмаһын ине, был битүҙе бер хеҙмәт" , - тине ағинәйҙәр. "Был конкурс булмаһа, районыбыҙҙа Салауат батыр ырыуҙаштары йәшәүен һаман да белмәй йөрөр инем әле", тиеүселәр ҙә булды арабыҙҙа.

Ошо сараға яуаплы булған Наурыз ауылы ағинәйе Миннур Хәлфетдин ҡыҙы йомғаҡлап шулай тине: "Үткәндәргә байҡау яһап, уйландыҡ та, һыҙландыҡ та, ғорурландыҡ та. Күпте күргән, күпте кисергән халҡыбыҙҙың ҡыҡрәгәнән инрәү булып сыҡҡан йыр-бәйеттәрен, батырҙарын данлаған поэтик һүҙен, шанлы тарихын күңелебеҙ аша үткәрҙек, тыңлаусыларға еткерҙек. Сарабыҙ ҡуйған маҡсатына өлгәште".

Ә мин иһә был мәҡәләмдә гәзит уҡыусыларға Учалы районы ағинәйҙәренең үҙ мәшәҡәттәренә генә күмелеп йәшәмәүен, ватсап аша булһа ла аралашып, файҙалы ғәмәлдәр башҡарыуын еткерергә тырыштым.

**Мәрзиә СОЛТАНБАЕВА, Учалы районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Нисек итеп ҡараңғылыҡтан яҡтылыҡҡа сығырға?

Был һүҙҙәр индеецтарҙың сейчемы Такапуша тарафынан әйтелгән.

Заманында европалылар индеецтарҙы тыуған ерҙәренән ҡыуһа, ә индеецтар үҙ ерҙәрен яҡлап, әленән-әле көрәшкә күтәрелһә, бөгөн американдарҙың индеецтарға ҡарашы үҙгәргән. Сөнки Американың аҫаба халҡы аҡ тәнле күскенселәргә ҡарағанда тәбиғәт менән яҡшы мөнәсәбәттә булған. Уларҙың фәлсәфәһе беҙ күҙаллаған цивилизациянан күпкә мәғрифәтлерәк. Индеецтар үҙҙәренең Илаһы тип Бөйөк Рухҡа табына. Һунарсылар ҡәбиләләштәрен туйҙырырлыҡ ҡына ҡош йә хайуан аулай, ағас ҡырҡһалар, урынына яңыһын ултырталар, ерҙе эшкәртәләр, ваҡыты-ваҡыты менән уға ял бирел алалар.

Индеецтар ҡәбиләләре араһында тәбиғәт менән башҡаларға ҡарағанда дуҫыраҡ булғандары ла бар. Шундай ҡәбиләләрҙең башлыҡтарын сейчемдар тип атағандар. Ундайҙарға, мәҫәлән, алкогиндар һәм вампаноаггар ҡараған. Уларҙың сейчемдары халыҡ менән идара иткәндә аҡылы менән айырылып торған, хатта уларҙы Аллаға тиң тип һанағандар.

Роквэй ҡәбиләһенең һуңғы сейчемы булып Такапуша тора. Ул ҡәбиләләштәрен яңы күршеләр эргәһендә йәшәү рәүешен үҙгәртергә, дуҫлыҡта һәм ихтирамда йәшәү өсөн яңы аҡыл үрҙәрен яуларға, шулай уҡ тотош тәбиғәт һәм тормош менән бер бөтөн булыу өсөн быуаттарҙан-быуаттарға тапшырылған аҡыл хаҡында иҫләргә кәрәклекте хәтерләтеп торған.

Алдағы бүлектәрҙә беҙ Илаһҡа яҡынайыу өсөн мотлаҡ булған ыңғай фекерләүгә нигеҙ биреүсе тәбиғәт тураһында һүҙ йөрөткәйнек, быныһында инде киңерәк пландағы тәбиғәт тураһында һөйләшергә һәм унда Илаһтың ҙур хәреф менән яҙылырға тейешле мөһим аспектын күрергә тырышырбыҙ.

### Йәшәйеш тәбиғәте

Яңы элементар өлөшсә асҡаны өсөн Физика буйынса Нобель премияһын алған бер физик-атомсы наград тапшырыу тантанаһында: "Мин был өлөшсәнең булыуы тураһында уны эҙләүгә тотоноңҙан алда уҡ уйлана башлағайным", - тип белдергән. Тәүҙә унда фекер тыуған, ошо өлөшсәне күҙаллап, ул уны тапҡан.

Хәҙер ғалимдар аңдың энергияһын тикшерә башлай. Улар уны үлсәй, фокуслай, әммә әлегә тиклем уның ярҙамында ниндәй эштәр башҡарып була икәнлеген танымай. Алға табан әкрен барған ғалимдарҙы әрләмәйек. Уларға фәнни ысул ҡулланырға, барыһын да яҙып барырға, килеп сыҡҡан һөҙөмтәләрҙе матбуғатта баҫтырырға кәрәк. Әгәр быға нығынған парадигмаларҙан ситкә тайпылһағыҙ, профессиональ репутацияғыҙ шик аҫтына алынасаҡ, тикшереңеү өсөн аҡса бүленмәйәсәк, нәшерселәр һеҙҙән йөҙ борасаҡ. Шуға ла күптәр үҙен етди хәүефкә дусар итмәй, ғәҙәттәгесә эшләй бирә.

Әммә беҙ һеҙҙең менән бер генә аҙым яһамайбыҙ. Беҙ Йыһанға ихтирам күрһәтеп, алмашҡа Илаһтың иғтибарын йәлеп итеп, үҙ аңыбыҙҙы Йыһан Аңы менән тоташтырырға, йыһандың энергетик тәбиғәтен танып, беҙ уны яҡтылыҡ, аң, һөйөү энергияһына әйләндерергә теләйбеҙ. Беҙ галактика сиктәренә йүнәлеп, кире ҡайтырбыҙ. Был беҙгә уныш мөмкинлеген бирер һәм бер тин дә тормаҫ. Бары тик бер нисә минутығыҙ ғына сарыф ителер.

**Роберт СТОУН. (Дауамы бар).**



## 13 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 16.00 Т/с "Кулагины". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Тайны следствия-21". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20, 3.10 Т/с "В зоне риска". [16+]
4.00 Т/с "Личное дело". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Профилактика на канале с 07.00 до 14.00.**
**14.00 Итоги недели (на рус. яз).**
**14.45 Специальный репортаж. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе… [12+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Т/с "Бабушка-детектив". [12+]**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**17.45, 20.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**21.00 Крылья. [6+]**
**22.00 Спортивная история. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Один шанс из тысячи". [12+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 "Моя семья". [12+]**
**4.45 "100 шагов на войне…" Отрывки из военной прозы башкирских писателей. [12+]**
**5.00 Башҡорттар. [6+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 14 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 16.00 Т/с "Кулагины". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Тайны следствия-21". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20, 3.10 Т/с "В зоне риска". [16+]
4.00 Т/с "Личное дело". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Бабушка-детектив". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00, 19.00 Послание Главы Республики Башкортостан Р.Ф. Хабирова Государственному Собранию - Курултаю Республики Башкортостан.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Хазина". [0+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**15.30, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.00 Д/ф "Странник". [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**20.00 Вечерний телецентр.**
**20.45 "Сәңгелдәк". [0+]**
**21.00 Детей много не бывает. [6+]**
**22.00 Теге өсәү! [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Отряд особого назначения". [12+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Озеро моей души". [12+]**
**4.30 Автограф. [12+]**
**5.00 "Хазина". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 15 ДЕКАБРЯ СРЕДА
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 16.00 Т/с "Кулагины". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Тайны следствия-21". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20, 3.10 Т/с "В зоне риска". [16+]
4.00 Т/с "Личное дело". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Бабушка-детектив". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Тормош. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [6+]**
**15.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Спортивная история. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Ожидания полковника Шалыгина". [12+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Любишь - не любишь?". [12+]**
**4.30 "Алтын тирмә". [0+]**
**5.15 "100 шагов на войне…" Отрывки из военной прозы башкирских писателей. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 16 ДЕКАБРЯ ЧЕТВЕРГ
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 16.00 Т/с "Кулагины". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Тайны следствия-21". [16+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20, 3.10 Т/с "В зоне риска". [16+]
4.00 Т/с "Личное дело". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Бабушка-детектив". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Теге өсәү! [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә.Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Дорога к храму". [0+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Этно-краса". [12+]**
**20.45, 23.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**0.00 Х/ф "Опасные гастроли". [6+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Дальше тишина". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 17 ДЕКАБРЯ ПЯТНИЦА
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 16.00 Т/с "Кулагины". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Юморина-2021. [16+]
23.00 Веселья час. [16+]
0.45 Х/ф "Потому что люблю". [12+]
4.00 Т/с "Личное дело". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Бабушка-детектив". [12+]**
**10.30, 23.30 "Автограф". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Автограф. [12+]**
**14.00 Мы дети войны. [12+]**
**14.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**14.30 Башҡорттар. [6+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 "Самые важные открытия человечества". [12+]**
**17.00 "Ҡуласа". [12+]**
**17.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**19.45, 20.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 Х/ф "Одинокая женщина желает познакомиться". [0+]**
**2.00 Спектакль "Одолжи мне жеребца". [12+]**
**4.00 Әлләсе… [12+]**
**4.45 "Бай". [12+]**
**5.15 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Историческая среда. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 18 ДЕКАБРЯ СУББОТА
### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
12.35 Доктор Мясников. [12+]
13.40 Х/ф "Любовь по найму". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Из чувства долга". [12+]
1.25 Х/ф "Средство от разлуки". [12+]
4.39 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 "Ете егет". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 Преград. Net. [6+]**
**10.15 "Этно-краса". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [0+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 "Башҡорт йыры" представляет…" [12+]**
**19.00, 4.30 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**19.45 Ради добра. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 1.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**0.00 Х/ф "Год теленка". [12+]**
**2.15 Спектакль "Салават". [12+]**
**5.15 "100 шагов на войне…" Отрывки из военной прозы башкирских писателей. [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 19 ДЕКАБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### РОССИЯ 1

5.10, 3.10 Х/ф "Эта женщина ко мне". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Большая переделка.
12.30 Парад юмора. [16+]
14.30 Х/ф "Счастье можно дарить". [12+]
18.40 Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя Птица".
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40, 0.20 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
23.30 Д/ф "Опасный вирус. Второй год". [12+]
1.40 Х/ф "Клинч". [16+]
4.54 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Ҡурай даны". [6+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "Сулпылар". [0+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.00 "Елкән". [6+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 "Ете егет". [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 "Хазина". [0+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 3.00 Историческая среда. [12+]**
**17.00 "Благодарен судьбе". Юбилейный концерт народного артиста РБ Радика Вальмухаметова. [12+]**
**19.15 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**20.15 Әлләсе… [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30, 3.30 Х/ф "Сыщик Петербургской полиции". [0+]**
**1.00 Спектакль "Касатка". [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**14 декабрь "Урал батыр"**, Башҡорт халыҡ эпосы буйынса. 14.00, 19.00 12+
**15 декабрь "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович). 16+
**16 декабрь "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), комедия. 12+
**17 декабрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 16+
**18 декабрь "Йәштәр һәм йәш йөрәктәр"**, театрлаштырылған концерт. 18.00 6+
**19 декабрь "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмтғәлиева), лирик комедия. 18.00 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**14 декабрь "Арба"** (Зөһрә һәм Таңсулпан Бураҡаевалар), әкиәт. 11.00 6+
**"Ғашиҡтар көнө"** (Н. Ғәйетбаев), музыкаль комедия. 14+
**18 декабрь "Зимняя небылица"** (А. Горбунов), әкиәт. 12.00, 15.00 0+
**Премьера! "Ҡыш бабай и Дед мороз"** Яңы йыл тамашаһы. 18.00 12+
**19 декабрь "Щелкунчик"** (Н. Соболева), әкиәт. 12.00, 15.00, 18.00 0+
**"Новый год наоборот"** (И. Казакова), Яңы йыл әкиәте. 11.00, 13.30, 15.00 0+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**14 декабрь "Етем төлкө"** (О. Штырляева). 11.00 0+
**18-19 декабрь "Волк и семеро козлят"** (А. Рахманкулова). 11.00, 13.00 0+
**"Что такое Новый год?"** бэби-спектакль. 16.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**13 декабрь "Духовой оркестр представляет"**. 14.00 6+
**14 декабрь Премьера! "Подарок далеким планетам"** (Таңсулпан һәм Зөһрә Бураҡаевалар), Башҡорт теле көнөнә. 6+
**15 декабрь "Классика в джинсах"** камерный оркестр концерты. 15.00 6+
А. Шилклопер, джаз. 6+
**16 декабрь "Romantic Collection"** лаунж-концерт. 6+
**18 декабрь "Духовой оркестр представляет"**. 15.00 6+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**14 декабрь "Әүлиә"** (Л. Яҡшыбаева). 18.00 12+
**15 декабрь "Әүлиә"** (Л. Яҡшыбаева). 12+
**16 декабрь "Шахтер"** (Б. Ҡаһарманова), драма. 14.00, 19.00 12+
**17 декабрь "Тау артында ниҙәр бар?"** (Т. Ғиниәтуллин, Н. Ғәйетбаев), хикәйәт. 12+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**13 декабрь "Всем кого касается"** (Д. Сидерос), трогательная история. 15.00 12+
**20 декабрь Премьера! "Волшебная лампа Алладина"** (Л. Нигматуллина), әкиәт. 10.00, 12.00, 14.00, 16.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**14 декабрь "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай), музыкаль комедия. 14.00 12+
**16-17 декабрь Премьера! "Эх, күгәрсенкәйҙәрем…"** (Ф. Бүләков), комедия. 12+
**18 декабрь "Нисек кейәүгә сығырға?"** (Н. Ғәйетбаев), комедия. 12+
**19 декабрь Премьера! "В поисках утраченного волшебства"** (М. Хейфец), Яңы йыл әкиәте. 12.00 0+
**"Минең ҡатынымдың исеме Морис"** (Р. Шарт), комедия. 18.00 16+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

1443 һижри йыл.

| Декабрь (Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 13 (9) дүшәмбе | 8:04 | 9:34 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 14 (10) шишәмбе | 8:05 | 9:35 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 15 (11) шаршамбы | 8:06 | 9:36 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 16 (12) кесе йома | 8:07 | 9:37 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 17 (13) йома | 8:07 | 9:37 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 18 (14) шәмбе | 8:08 | 9:38 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 19 (15) йәкшәмбе | 8:09 | 9:39 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *Аҡсағыҙҙы һанап бөтә алаһығыҙ икән, тимәк, һеҙҙең миллиард доллар аҡсағыҙ юҡ.*

*(Пол Гетти).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ЙЫРҘАРЫ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**49-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Гәзит. Ямантау. Мәсем. Ҡанат. Юрған. Ауылдаш. Торатау. Ареал. Ирәмәл. Ырыу. Ант. Баҙар. Ләлә. Аҡыл. Ләпәк. Ҡыуаҡ. Кеше. Алиһә. Шаҡша. Шарлама. Ирәкташ.

**Вертикаль буйынса:** Тумыртҡа. Ҡырҡтытау. Тал. Баҡа. Ярма. Лакшми. Тауис. Грамм. Аллаһ. Әүәләк. Сәләмәтлек. Ете. Тыуым. Юша. Бәлеш. Роза. Алма. Нил. Рикша.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

# ДИКТОР ИҪТӘЛЕГЕНӘ



**Учалыла ошо райондың Яңы Байрамғол ауылында тыуып үҫкән, "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһы дикторы Әхәт Мортазин иҫтәлегенә алып барыусылар ҙың "Диктор тауышы" конкурсы еңеүселәре билдәләнде.**

Өсөнсө тапҡыр ойошторолған конкурста Башҡортостандан һәм Силәбе өлкәһенән 80 уҡыусы ҡатнашты. Финалға сыҡҡан 18 кеше билдәле дикторҙың тыуған яғында оҫталыҡтарын күрһәтте. Саҡырылған ҡунаҡтар иҫәбендә - Әхәт Мортазиндың хәләл ефете, "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһы директоры урынбаҫары Тәнзилә Үлмәҫбаева, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Алик Байғарин, Башҡортостан юлдаш телевидениеһының махсус хәбәрсеһе Гүзәл Ситдиҡова, дикторҙың бер туған ағаһы Радик Мортазин. Халыҡ артисының туғандары үҙҙәренең хәтирәләре менән уртаҡлашты, уның тормошонан ҡыҙыҡлы хәлдәр тураһында һөйләне. Уҡыусылар текстарҙы аңлайышлы, тулҡынланмайынса тасуири итеп уҡыны, яңылыҡты яттан һөйләп бирҙе. "Минең фекеремсә, балалар, һеҙ бөтәгеҙ ҙә - еңеүселәр. Сөнки туған телдең мөһимлеген аңлайһығыҙ, уға хөрмәт менән ҡарайһығыҙ, тимәк, башҡорт халҡының тарихы, мәҙәниәте йәшәй һәм быуындан-быуынға тапшырыла", - тине уҡыусыларға мөрәжәғәт итеп Тәнзилә Үлмәҫбаева.

Конкурстың беренсе этабы онлайн-форматта, муниципаль кимәлдә үтте. Һуңынан иң яҡшы видеороликтар Өфөгә ебәрелде, унда Башҡортостан телевидениеһы белгестәренән торған жюри еңеүселәрҙе һайлап алды. Улар - Әлшәй районынан Байрас Сәләмов, Өфөнән Арыҫлан Ҡырымсурин, Учалы районы Ураҙ ауылынан Линиза Шәйхетдинова, Сибайҙан Арыҫлан Мәхмүтов. Аҙаҡ сарала ҡатнашыусылар Әхәт Мортазиндың Яңы Байрамғол ауылы мәктәбендә урынлашҡан музейын ҡараны.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ҠИММӘТЛӘНГӘН...



**Башҡортостан статистиктары күпселек социаль әһәмиәтле аҙыҡ-түлеккә хаҡтың артыуын теркәгән.**

Башстаттың аҙналыҡ мониторингы мәғлүмәттәре буйынса, республикала айырыуса кәбеҫтә ҡиммәтләнгән (3,1 процентҡа). Бер килограмм кәбеҫтәнең уртаса хаҡы - 39 һум.Шартлы икенсе урында - арыш ононан һәм арыш-бойҙай ононан бешерелгән икмәк. Бер аҙна эсендә ул 2,9 процентҡа артып, килограмы 62 һумға еткән. Өсөнсө урында иһә туңдырылған балыҡ, ул 2 процентҡа артҡан. Хәҙер уның бер килограмы уртаса 163 һумға төшә. Республикала хаҡтары күтәрелгән аҙыҡ-түлек исемлегендә майлы эремсек, йомортҡа, вермишель, ҡарабойҙай, һөт, дөгө, сосиска, сарделька, колбаса, бойҙай икмәге, тары ярмаһы, шәкәр, аҡ май, маргарин, һарыҡ ите, көнбағыш майы, сыр, он, тоҙ, алма, һыйыр ите, балалар өсөн ит консервалары бар. Бер аҙнала улар 0,1 - 1,8 процентҡа ҡыйбатланған.

Хаҡы төшкән аҙыҡ-түлек иҫәбендә - помидор, шоколадлы кәнфиттәр, яңы ҡыяр, балалар өсөн йәшелсә консервалары. Шулай уҡ был исемлеккә сусҡа ите, макарон, ҡара сәй, кишер, башлы һуған, балалар туҡланыуы өсөн емеш-еләк консервалары, ҡаймаҡ, картуф, тауыҡ, балалар өсөн ҡоро һөт ҡатышмалары ингән. Бер аҙнала уларҙың хаҡы 0,04-1,2 процентҡа төшкән.

# КАМИЛЛАША...



**15 декабргә тиклем бөтә "ПАЗик"тар Өфөнөң транспорт селтәренән алынырға тейеш. Был турала ҡала хакимиәтендә үткән оператив кәңәшмәлә транспорт һәм элемтә идаралығы начальнигы Олег Хмарин белдерҙе.**

Уның һүҙҙәренсә, ҡалала пассажирҙар автопаркын яңыртыу буйынса планға ярашлы эш алып барыла. Октябрь башында Өфөлә 235 "ПАЗик" йөрөһә, хәҙер улар 150 генә ҡалған. Яҡын арала Мәскәүҙән 50 яңы автобус килтереү көтөлә, тип өҫтәне Олег Хмарин. Ағымдағы йылда баш ҡала маршруттарында "Башавтотранс"тың 220 ҙур һәм урта класлы автобустары йөрөй башланы. Уның һүҙҙәренсә, төп бурыс - йәмәғәт транспорты ваҡытында йөрөһөн, өфөләр өсөн хәүефһеҙ һәм уңайлы булһын. Шуға бәйле ҡала пассажирҙар транспортын үҫтереүгә йүнәлтелгән бер нисә сара ҡаралған. Киләсәктә яңы маршрут селтәрен әҙерләү, трамвай бәйләнешен, күсмә составты яңыртыу планы бар. Шәхси һәм дәүләт ташыусылары менән эш алып барыла.

# КӨСЛӨ ИХТЫЯР МЕНӘН...



**Ошо көндәрҙә 101 йәшлек Анисия Матвеевна Камышлова Күмертау ҡалаһының 2-се ковид-госпиталенән һауығып сыҡты.**

Медучреждениела әйтеүҙәренсә, Федоровка районының Федоровка ауылында йәшәүсе был әбей госпиталгә бынан ике аҙна элек ҡыҙы менән килгән була. Икеһендә лә коронавирус сире теркәлә. Ҡыҙының һүҙҙәренсә, пенсионер әбей сирҙе бик ауыр кисергән. Медиктар әйтеүенсә, тажзәхмәт сире ауырыуҙарҙың башҡа төр сирҙәре арҡаһында ҡатмарлыҡтар барлыҡҡа килтерә. Ә шулай ҙа пациенттың һауығыуына уның күңел торошо, кәйефе ныҡ булышлыҡ итә. Анисия Матвеевна һуғыш йылдарында сыныҡҡан көслө ихтыярлы кеше, унда йәшәү теләге бик көслө, ти дауалаусы табип Анастасия Трушина. Һуғыш ветераны Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең сираттағы йыллығын һау-сәләмәт хәлдә тыуған ауылында ҡаршыларға хыяллана. "Фашизмды һәм коронавирусты еңгән кеше," - тиҙәр уның хаҡында медиктар. Анисия Матвеевна Бөйөк Ватан һуғышы юлдарын 1871-се зенит-артиллерия полҡы составында үтә, телефон бәйләнешен тәьмин итә. Еңеүҙе ул үҙенең хәрби посында Кенигсбергта ҡаршылай. Һуғыштан һуң ғүмере буйына почтала эшләй, республикала иң өлкән почта хеҙмәткәре.

*✓ Шатлана һәм өмөтләнә белеү - бәхет, шикләнеп һәм күңел төшөнкөлөгөнә бирелеп йәшәү - бәхетһеҙлек.*

***(Д. Юм).***



ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

# ЙЫРЛЫ ДОНЪЯ - НУРЛЫ ДОНЪЯ



**Бер-беребеҙгә хәүефләнеп, шикләнеңкерәп ҡарап йөрөгән мәлдә, сибайҙарҙы йоҡоһонан уятҡандай, билдәле йырсы Айгөл Әсәҙуллинаның соло-концерты гөрләп уҙҙы. Әбйәлилдән килеп еткән ата-әсәһенә, туғандарына, күрше-тирәһенә рәхмәт, яратҡан йырсыларына ышанысլы терәк булып, уны ҡотлауҙарға, гөл-сәскәгә күмделәр. Сибай концерт-театр берекмәһе етәкселеге, ижадташ коллегалары тамашаны юғары сәнғәт кимәленә күтәрҙе. Һүҙҙе ошо нурлы сараның төп геройы Айгөлгә бирәйек. Ни тиһәң дә, концертты йылы килеш ҡарап ҡына баһа биреп була, хис-тойғоларҙың ташҡан мәле лә тамаша залында көслөрәк була. Икмәк тәмен бешереүсе ашаусыға ҡарағанда яҡшыраҡ белә.**

- Йырсы булыу хыялы бала сағымдан оҙатып йөрөй. Тәү тапҡыр атайым менән сәхнәгә сығыуым хәтеремә нык уйылып ҡалған. Йырҙың беренсе куплетын йырланым да һүҙҙәрен онроттом. "Әй, ҡалған яғын оноттом", - тигәс, әллә көлөп, әллә йәлләп, дәррәү ҡул саптылар. Тауышым көслө булғас, атайым киләсәгемде шул саҡта уҡ күҙаллағандыр инде. Ул - Ҡыш бабай, ә мин һәр йылдың башланғысы - Яңы йыл образында сыға торғайныҡ. Ижад юлым шулайтып атайым менән бергә йөрөп башланды. Әсәйем дә йырлай минең. Тауышы көслө түгел, әммә бик моңло. Атайымдың бер туған апайҙары ла бынамын тигән йырсылар. Миңә лә тыумыштан һалынғандыр инде ул һәләт. Бала саҡтан уҡ башҡа һөнәрҙе күҙ алдына ла килтермәнем. Бишенсе класҡа, имтихандарҙы һәйбәт тапшырып, Өфөләге Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге гимназияға вокал һәм фортепьяно класына уҡырға индем һәм ете йылым музыкаль мәктәптә үтте. Тәнзилә Үҙәнбаева класында халыҡ йырҙарын өйрәндем. Фортепиано буйынса ла гел "биш"кә өлгәшә инем. Музыка уҡытыусыһы һөнәрен һайларға ла булыр ине, әммә йыр үҙенә тартты. Бигерәк тә Лилиә Ишемйәрованың башҡарыуындағы йырҙар оҡшай торғайны. Уны тыңлап йөрөй торғас, тауышым уныҡына оҡшай башланы хатта. Әле миңә Римма Амангилдинаның тауышы оҡшай. Яҡташым булараҡ та үҙ күрәм, үҙен сәхнәлә тотоуы, баҫалҡылығы һоҡландыра. Уның менән концерттарҙа, төрлө сараларҙа осрашып аралашып торабыҙ. Фәнил ағайым да, еңгәй ҙә бейеүселәр. Әртистәр заты инде беҙ!

Өфөнән һуң Сибай музыка училищеһының өсөнсө курсына Мусин Джон Әхмәт улы класына алдылар. Уҡыуҙы ҡыҙыл диплом менән тамамлап, 2002 йылдың авгусында Сибай филармонияһына эшкә килдем. Биш йылдан Стәрлетамаҡ филармонияһына саҡырҙылар. Унда ла шул сама эшләгәндән һуң, Өфөгә "Мираҫ" ансамбленә күстем. Күңелем кире Сибайға тартыла башланы һәм эшемде тәүге ижад йортомда дауам итәм. Ижадымдың сәскә атҡан мәлендә билдәле композитор Салауат Низаметдинов иғтибар итте, тауышымды оҡшатҡас, уның менән хеҙмәттәшлек башланғайны, тик ул арабыҙҙан баҡыйлыҡҡа күсте.

"Башҡорт йыры" проекты йәштәргә популярлыҡ яулауға, телевидение аша эфирға сығыуға, ҙур аудиторияға күреүгә нык ярҙам итә. Рита Өмөтбаеваға был йүнәлештә ҙур эштәр башҡарыуы өсөн һәйкәл ҡуйырлыҡ. Экранға сыҡҡас, ижадҡа ҡарата мөнәсәбәт үҙгәрә, үҙүҙеңә ситтән ҡарап, етешһеҙ яҡтарың күренә. Шул проектта ҡатнашҡандан һуң мин, мәҫәлән, ябыға башланым. Был тышҡы яҡтан, ә бит уның күҙгә күренмәгән күңел торошо ла бар: халыҡ йырҙарына мөнәсәбәт үҙгәрә, халыҡ йырын йырламаған йырсы йырсы түгел, тигән аксиоманы тулыһынса аңлайһың. Соло-концертымда тауышыма тура килгән "Баяс" тигән халыҡ йырын, сәхрәләрҙә йырлағандай, бер ниндәй музыкаль оҙатыуһыҙ башҡарам.

Был минең тәүге соло-концертым. Ошоға тиклем ашыҡманым, сөнки ниндәйҙер етди әҙерлек булырға тейешен аңлайым. Минең турала тамашасы әҙмекүпме белергә тейеш бит. Ун йылдан ашыу сәхнәлә булыуым, ижад итеүем быға этәргес бирә, халыҡ алдына ижад юлым башланғандан алып башҡарған йырҙарым менән сыҡҡым килә. Йыр һайлағанда һүҙҙәре оҡшаһа, мин уға сат йәбешәм, шул көндә үк һүҙҙәрен дә ятлайым, көйөн дә өйрәнәм. Әгәр йыр йөрәгемә ятмаһа, һүҙҙәре лә батмай, көйө лә һеңмәй репертуарымдан төшөп ҡала. Үҙенә оҡшаһа, халыҡҡа еткереүе лә еңел бит ул.

Тырышам, үҙемде ялҡау тимәҫ инем, эшсән мин. Мәҫәлән, бешеренергә яратам, балаҡайҙарым тәмле ашаһын, матур кейенһен, тип тырышам. Мәҙәниәт өлкәһендә хеҙмәт иткәс, бөтәһенә лә өлгөрөргә тейешмен, тип иҫәпләйем. Бөтә ғүмерем, бөтә тормошом - йыр булғас, хыялым тормошҡа ашты, тиһәм дә була. Икенсе өлкәлә лә эшләй алыр инем, әммә йыр иле ебәрмәй мине. Һәр бер кешенең үҙенә генә хас һәләте була. Минеке - сәхнә һәм йыр! Концертым "Айгөл иле", тип аталыуы ла бушҡа түгел: булмышымды, яҙмышымды, тормошомдо сағылдыра, мин нисекмен, шуны йырҙар аша күрһәтә. Әҙерлек күптән башланғайны ла, төрлө сикләүҙәр арҡаһында кисектерелә килде. Аллаһҡа шөкөр, мөҙҙәте етте, шуға күрә бер ҙә ҡаушамай, әҙерлек менән сығам тамашасым алдына. Донъялар имен тоһон, тыуған яҡтарҙа ла күрһәтербеҙ, тигән өмөттәмен. Халыҡтың һөйөүен яулар өсөн күп эшләргә кәрәк икәнен яҡшы аңлайым. Тамашасылар ихласлыҡты бик нескә тоя, фонограммаға ҡушылып, ауыҙ асып ябыу кәрәкмәй уға. Ундай концертты радионан тыңлап, йә телевизорҙан ҡарап була. Концерттың музыкаль етәксеһе Рәмил Париж улы Туйсин әйтмешләй: "Тик тере тауыш булырға тейеш, халыҡты ла, үҙеңде лә алдама".

**Радик ӨМӨТҠУЖИН.**

*әйткәндәй...*

## ҒАИЛӘНӘН БАШЛАНА...

**"Туған тел ғаиләнән башлана" проекты сиктәрендә башҡорт теле тураһында видеороликтар төшөрөлә. Проекттың маҡсаты - башҡорт телен популярлаштырыу һәм һаҡлау. Ул М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры булышлығында тормошҡа ашырыла.**

Проекттың авторҙары - Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы, С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Хөрмәтулла Үтәшев һәм "Сируси", "Өс хат", "Кластан тыш дәрес" фильмдары буйынса билдәле кинорежиссер Руслан Юлтаев, М.Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрының әҙәбиәт бүлегенең баш мөхәррире Динара Ҡәйүмова. "Беҙ 2-5 минутлыҡ бер нисә видеоролик төшөрҙөк. Донъяла 7 меңдән ашыу тел иҫәпләнә, уларҙың яртыһына юғалыу ҡурҡынысы янай. Тамашасыларға башҡорт телен һаҡлауҙың һәр беребеҙгә бәйле икәнен еткерергә теләйбеҙ. Баланы бәләкәйҙән, уның теле асылғандан алып, туған телендә тәрбиәләргә кәрәк. Был видеороликтар интернетта таратыла, Башҡортостан Республикаһы телеканалдарында һәм төрлө структураларҙың рәсми сайттарында күрһәтелә", - тине проект етәксеһе Хөрмәтулла Ғаззали улы.

Әле сюжетлы роликтар өҫтөндә эш тамамланып килә. "Әкренләп донъяла телдәр юғала. Тимәк, улар менән бергә тотош халыҡтарҙың йолалары һәм мәҙәниәте бөтөнләйгә юҡҡа сыға. Туған телдең балалар баҡсаларында, мәктәптәрҙә, институттарҙа өйрәнелеүе бик мөһим, әлбиттә. Ләкин ата-әсәләр өйҙә балалары менән туған телендә һөйләшә башламаһа, телде һаҡлау бурысын үтәү мөмкин түгел. Әгәр видеосюжеттар кешеләрҙе ошо хаҡта уйланырға мәжбүр итһә, был беҙҙең өсөн ҙур ҡаҙаныш булыр", - тип билдәләне Руслан Юлтаев.

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ОЯЛМАҒАН КЕШЕ ӨСӨН...

### ояттың йөҙө ҡыҙарыр

Орошҡаҡ булһа - улың яу, ҡарышҡаҡ булһа - ҡыҙың яу.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Балалар беҙ теләгәнсә һәм көткәнсә генә үҫһә, бөтәһе лә гений булыр ине.

**(Иоганн Гете).**

Аҡсағыҙҙы һанап бөтә алаһығыҙ икән, тимәк, һеҙҙең миллиард доллар аҡсағыҙ юҡ.

**(Пол Гетти).**

Шатлана һәм өмөтләнә белеү - бәхет, шикләнеп һәм күңел төшөнкөлөгөнә бирелеп йәшәү - бәхетһеҙлек.

**(Д. Юм).**

Бер кеше лә үҙен бәхетле тип һанамай тороп, бәхетле була алмай.

**(Марк Аврелий).**

Ҡатын-ҡыҙ ғына ваҡытты ваҡытлыса туҡтатып тора ала.

**(Юзеф Булатович).**

Әгәр ҙә балаң һинең өйҙө уның да өйө итеп тоймаһа, ул урамды өйө итәсәк.

**(Надин де Ротшильд).**

Упҡынды ике тапҡыр һикереүҙән дә тупаҫыраҡ хата булыуы мөмкин түгел.

**(Д. Ллойд Джордж).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер саҡ Будда эргәһенә бик белемле, мәҙәниәтле ғалим килгән һәм һорау биргән. Будда хәҙер генә уның һорауына яуап бирә алмауы тураһында белдергән. Ғалим бик нык аптырап:"Ни өсөн яуап бирә алмайһығыҙ, ваҡытығыҙ тармы?" - тип һораған. "Юҡ, ваҡытым етерлек минең, - тигән Будда, - һеҙ минең яуапты хәҙер генә ҡабул итә алмаҫһығыҙ, тип уйлайым". "Ни өсөн?" - тип ныҡышҡан ғалим. "Өс төрлө тыңлаусы була, - тип һүҙен дауам иткән Будда. -Беренсеһе баштүбән әйләндереп ҡуйылған көршәк кеүек: күпме генә һөйләһәң дә, уның башына бер ни ҙә инмәй. Икенсе төрлө тыңлаусы төбө тишек көршәк кеүек: уны мәғлүмәт менән тултыраһың, ләкин тишек көршәктә һыу тотҡарланмаған кеүек, һөйләнгән һүҙ ҙә башҡа һеңмәй, файҙаһыҙға елгә осоп бөтә. Өсөнсө тыңлаусы баштүбән торған йә тишекле көршәк кеүек түгел, ә төрлө ҡалдыҡ-ҡолдоҡтар менән тулы көршәк кеүек: уға һыу һалаһың, һыу бысранып, ағыуланып тик тора. Һеҙ тап бына ошо көршәк кеүек. Һеҙ шул тиклем күп беләһегеҙ, һеҙҙә һеҙҙең тарафтан аҙағынаса аң менән ҡабул ителмәгән мәғлүмәттәр ҙә етерлек. Ул "сүпле" мәғлүмәттәр һеҙгә мин әйтәсәк яуапты ҡабул итергә ҡамасаулаясаҡ".

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
10 декабрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3250
Заказ - 1502

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.